ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

7-13 сентябрь (һарысай) 2019

№36 (870)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

8 сентябрь 2019

БЕРҘӘМ ТАУЫШ БИРЕҮ КӨНӨ

***Иғтибар! Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙға 2020 йылдың беренсе яртыһы өсөн гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы башланыуы тураһында хәбәр итәбеҙ. 1 сентябрҙән республиканың һәр ҡала-район-ауылында ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 676 һум 02 тингә яҙыла башлай алаһығыҙ. Был турала таныштарығыҙға, әйләнә-тирәләгеләрегеҙгә лә еткерһәгеҙ ине.***

***Мөхәрририәт.***

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Кем һин, ниндәй һин, Кеше?



3

Яңыса уҡытам, тиһәң...



8-9

Башҡорт дивизияһында



10-11

Аҡылды...

төҫ һәм көй ярҙамында үлсәп була имеш



13

ТВ-программа 14

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# БЫЛ МӘКТӘПТӘР...

## тиҙ үҫеш билдәһе буласаҡ

**Республиканың барлыҡ мәктәптәрендә яңы уҡыу йылы башындағы традицион йола - тантаналы линейкалар был юлы 2 сентябрҙә атҡарылды. Баш ҡалалағы бар йәмәғәтселектең иғтибар үҙәгендә булған ике белем усағында - Дим районында урынлашҡан өр-яңы 162-се "Смарт" полилингваль күп профилле мәктәбендә һәм Совет районындағы шулай уҡ өр-яңынан төҙөлгән 44-се полилингваль күп профилле мәктәптә был көнгә айырыуса нығ әҙерләнделәр. Сөнки улар сит телдәр һәм туған телдәр тәрәнәйтеп өйрәнелгән тәүге үҙенсәлекле белем усаҡтары буласаҡ. Быңдайҙар әле Рәсәй кимәлендә лә тәүгеләр рәтендә.**



- Был мәктәп биләмәһендә баҫып тороуы ғына ла шул тиклем тулҡынландыра, ул минең өсөн генә түгел, күптәрегеҙгә Башҡортостандың тиҙ үҫеше символы булыр, моғайын, - тип мөрәжәғәт итте 162-се "Смарт" полилингваль мәктәбен асыу тантанаһында Волга буйы федераль округында Рәсәй Президентының тулы хоҡуҡлы вәкиле Игорь Комаров. - Юҡҡа ғына "Мәғариф" милли проектын тормошҡа ашырыуға ҙур суммалар бүленмәй, бөгөн эш башлап торған ошо шәп мәктәп тә уның бер өлөшө. Балалар бөтәбеҙҙе лә уңыштары һәм яңы белемдәре менән ҡыуандырһын өсөн бында бөтә шарттар һәм кәрәкле мөхит булдырылырына шигем юҡ.

Игорь Анатольевич та, шулай уҡ ошо тантанала ҡатнашыусы Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Фәрит улы ла яңы мәктәп киләсәктә иң алдынғылар араһында булырына, тыуған ил мәғарифының яҡшы традицияларын һаҡларына һәм арттырырына ышаныс белдерҙе.

**(Дауамы 4-се биттә).**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Рәсәй Хөкүмәте рәйесе Д. Медведевтың - эш аҙнаһын дүрт көнгә ҡыҫҡартырға, Дәүләт Думаһы депутаттарының мәктәп уҡыусыларының йәйге каникулдарын 1 октябрргә тиклем оҙайтырға кәрәк, тигән тәкдимдәренә ҡарашығыҙ нисек?

***Айнур ИШМӨХӘМӘТОВ, йәш белгес, Өфө ҡалаһы:*** Әле генә булмаһа ла, берәй 20-30 йылдан был хәбәр ысынбарлыҡҡа әйләнер, бәлки. Бөтөн тармаҡтар ҙа тотошлай уҡ был системаға күсмәһә лә, күп өлкәләрҙең эш тәртибе үҙгәрәсәк. Үҙгәрештәр нигеҙҙә етештереү тармаҡтарында күҙәтелеүе ихтимал, сөнки белгестәр фаразлауынса, кеше хеҙмәте ҡасандыр барыбер яһалма интеллект менән алышынасаҡ, ләкин, ҡабатлайым, был беҙҙә, Рәсәй шарттарында, тиҙ арала башҡарыла торған эш түгел, ҡайһы бер электрон ҡорамал һәм приборҙар менән эш итеүсе хеҙмәт төрҙәрен иҫәпкә алмағанда, әлбиттә. Германия, Швеция, Швейцария, Бельгия, Дания, Норвегия, Австрия, Италия кеүек үҫеш кимәле Рәсәйҙән байтаҡҡа юғары илдәр әле үк ҡыҫҡартылған аҙна буйынса эш тәжрибәһенә эйә. Әйтеүемсә, уларҙың үҫеш кимәле бының өсөн мөмкинлек бирә. Шундай ябай ғына сағыштырыу ҙа был мәсьәләгә күҙҙе аса. Мәҫәлән, былтырғы мәғлүмәттәр буйынса Данияла йән башына эске продукт (ВВП) 57 доллар тәшкил итһә, Швейцарияла - 80, ә беҙҙең Рәсәйҙә был күрһәткес ни бары... 9 доллар. Иларғамы, көлөргәме... Ә шул уҡ ваҡытта күҙ ҙә йоммай ниндәйҙер ҡыҫҡартылған эш аҙнаһы хаҡында һүҙ башланылар. Былай ҙа халыҡ хәҙер нисек тә күберәк ял итеү яйын ғына ҡарап тора. Шуға өйрәнеп киттеләр. Байрамдарҙы ғына алып ҡарағыҙ: өс көн дә биш көн. Яңы йыл каникулдары хаҡында әйтеп торорға ла түгел. Аҙыраҡ эшләп, күберәк ял итер өсөн беҙгә тәүҙә тырышып эшләргә, хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәрергә, халыҡса әйткәндә, бол туплarға, шунан ғына ял хаҡында уйларға кәрәк. Ә ял, дөрөҫөн әйткәндә, кәрәк, сөнки кешенең ғүмере өй - эш - өй маршруты менән генә сикләнергә тейеш түгел. Эш кешеһе лә - кеше, уның өсөн төрлө яҡлап үҫешергә, һаулығын нығытырға, файҙалы ял итергә, ер-һыу, донъя күреп, сәфәрҙәрҙә булырға шарттар тыуҙырылырға тейеш. Шул саҡта ғына кешелә ижади ҡараш тыуыр һәм ул эшен дәртләнеп башҡарыр ине.

**(Дауамы 2-се биттә).**

12+

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Рәсәй Хөкүмәте рәйесе Д. Медведевтың - эш аҙнаһын дүрт көнгә ҡыҫҡартырға, Дәүләт Думаһы депутаттарының мәктәп уҡыусыларының йәйге каникулдарын 1 октябргә тиклем оҙайтырға кәрәк, тигән тәҡдимдәренә ҡарашығыҙ нисек?

(Башы 1-се биттә).

***Фәйрүзә ИШБИРҘИНА, пенсиялағы уҡытыусы:*** Әле күптән түгел генә, оҙон ял һәм байрам көндәре халыҡтың һаулығына насар тәьҫир итә һәм ил иҡтисадын тотҡарлай, тигән дәғүә белдерелеп, Яңы йыл каникулдарын кәметеү йә бөтөнләй бөтөрөү хаҡында бәхәстәр барғанда, РФ премьер-министры Д. Медведев эш аҙнаһын дүрт көнгә ҡалдырыу тураһында көтөлмәгән башланғысы менән сығыш яһап, бар ғаләмде гәжәп итте. Был хаҡта ул олпат форумда - июндә Женевала булып үткән Халыҡ-ара хеҙмәт ойошмаһы сессияһында белдерҙе. Технологик прогресс эш урындарының, эш ваҡытының ҡотолғоһоҙ рәүештә ҡыҫҡарыуына килтерә, тине ул. Был иһә, Премьер фекеренсә, хеҙмәтсәндәргә күберәк ял итергә мөмкинлек бирәсәк. Ә бит йөмәғәтселек яҡшы хәтерләй булыр: үткән ҡыштың ун көнлөк яңы йыл каникулдарынан һуң Д. Медведев ризаһыҙлыҡ менән, ял итеү етеп торор, яңы йыл каникулдары иҡтисадҡа зыян килтерә; ил халҡы байрамды яҡшы билдәләй, ләкин бер нәмә лә эшләмәй, тип белдергәйне. Әле килеп, Премьерҙың фекере 180 градусҡа үҙгәргән: аҙнаһына дүрт көн эшләү ҙә етә, ти ул.

Әйткәндәй, донъя ғәмәлиәтендә бындай тәжрибә бар: Швеция, Яңы Зеландия, Австралия кеүек илдәрҙең алдынғы фирмалары дүрт көнлөк эш аҙнаһын уңышлы һынап ҡараған да инде. Ләкин был илдәрҙәге тормош кимәле менән Рәсәйгәме һуң тинләшергә? Дөрөҫөн әйткәндә, эксперттар яҙыуынса, хөкүмәт башлығының да, уның был өлкәлә фекерҙәше Рәсәй бойондороҡһоҙ профсоюздар федерацияһының да аныҡ ҡына ҡарашы юҡ был йәһәттән.

Ә халыҡ ни эшләр: ашапэсеп, ял итеп, бөтөнләй ялҡауланып китмәсме? Унан бит әле ашап-эсергә лә аҡса кәрәк! Һорау бирелгән халыҡтың 82 проценты дүрт көнлөк эш аҙнаһына ҡаршы икәнен белдерә, сөнки улар эш хаҡтарын юғалтыуҙан ҡурҡа. Эшләмәгән бер көн өсөн кем түләһен, профсоюзмы? Эш көнө ҡыҫҡартылыуға ҡарамаҫтан, эш хаҡы кәмемәйәсәк, тигән вәғәҙәгә хәҙер күп тапҡыр төп башына ултырып өйрәнгән халыҡ һис ышанмаясаҡ һәм бының булыуы мөмкин дә түгел! Ысынбарлыҡҡа ҡарап фекер итеү кәрәк: Швецияла йәшәмәйбеҙ бит... Тәгәйен эш көндәре генә түгел, ҡайһы бер һөнәр эйәләре 1,5-2 ставкаға аҙнаһына 6-шар көн тир түгеп тә ғаиләһен саҡ аҫрап көн күрә түгелме? Әгәр Рәсәйҙә, Премьер фаразлағанса, "котолғоһоҙ" рәүештә эш урындары кәмеүе көтөлә икән һәм эш аҙнаһы дүрт көнгә ҡыҫҡартыла ҡалһа, пенсия йәше өҫтәлгәндәр ни менән шөғөлләнер икән?



***Римма ЙӘРМӨХӘМӘТОВА, Сибай сәнғәт колледжы уҡытыусыһы:*** Мәктәп уҡыусылары һәм студенттарҙың йәйге каникулдарын 1 октябргә тиклем оҙайтыу башланғысы менән сыҡҡан Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаты В. Власов был теманы тәү тапҡыр ҡуҙғатмай: бынан ике йыл элек ул мәктәптә 12 класс булдырыу һәм әле әйтеүенсә, йәйге каникулды бер айға оҙайтыу хаҡында мәсьәлә күтәргәйне. Ул саҡ РФ Мәғариф министрлығы депутаттың был башланғысын кире ҡаҡты һәм дөрөҫ эшләне, тип уйлайым, сөнки шәхсән мин үҙем дә бындай тәҡдимгә ҡаршымын. Балалар күберәк уҡырға, белем кимәлен даими камиллаштыра барырға тейеш. Буш ваҡыттары күберәк булған һайын, улар уны файҙаһыҙға, бушҡа үткәрәсәк, оҙаҡ ял итеп, алған белемдәрен дә онотоп бөтөүҙәре бар. Уҡыу аҙнаһының биш көнгә ҡыҫҡартылыуы ла етәләр уларға, тигән фекерҙәмен, сөнки был көндәрҙә улар үҙҙәре лә ялға туҡтаған ата-әсәһе ҡарамағында була: уларға йорт-хужалыҡ эштәрендә булыша, дәрес әҙерләй һ.б. Шуға өҫтәп, тағы ла китап та уҡыһын ине балалар! Күптәренең дөйөм белем кимәле бик һай бит, юғиһә. Классик әҙәбиәтте, мәҙәниәтте, тарихты насар беләләр. Үҫенескә, китапты бөгөн уларға гаджет алмаштырҙы, тик унда балалар кәрәкмәгән, файҙаһыҙ, дөрөҫөрәге, күбеһенсә зыянлы мәғлүмәттәр ала, сит ил фильмдары ҡарай, уйындар уйнай, мәғәнәһеҙ диалогтар ҡора. Әйткәндәй, дәрестәрҙә балаларҙың гаджеттар менән файҙаланыуын тыйырға тигән тәҡдим буйынса шуға ла уйланырға урын бар.

***Мәҙәрис РӘХИМОВ, хеҙмәт ветераны:*** Һуңғы ваҡыт, ысынлап та, аҙыраҡ уҡыу, аҙыраҡ эшләү, күберәк ял итеү хаҡында һүҙ ҡуйырталар. Депутаттар ҙа бындай инициативаларҙы хуплап ҡына тора. Бер яҡтан, был кәрәктер ҙә, сөнки беҙҙең әлеге пенсиялағы быуын эштән башҡаны күрмәне, тигәндәй. Мин үҫмер һәм йәшлек йылдары һуғыш осорона тап килеп, тыл ауырлығын иңдәрендә күтәргән атай-әсәйҙәребеҙ хеҙмәте хаҡында һөйләп тә тормайым. Дөрөҫөн әйткәндә, эштең ни икәнен улар күрҙе һәм һуғыштан һуң да улар быуыны һеперелеп йөрөп эшләне: ҡара таңдан кискә тиклем колхоз эшендә, заводта булдылар. Замандары шундай ине, нишләйһең...

Ләкин заман бит бер урында тормай, ваҡыт та, ил ҡеүәте лә үҙгәрә, тотороҡлана, үҫешә бара. Тимәк, хеҙмәт кешеһенең эш шарттары ла яҡшыра барырға тейеш. Шуға ҡарамаҫтан, беҙҙең быуын да иртәнән кискә тиклем эштә булды, балаларҙы ҡарарға ла форсат тымай китә ине. Бер заман башты күтәреп ҡараһам, ғүмер үтеп тә киткән, имеш... Балалар ҙурайҙы, үҙҙәре эшкә төштө. Шулай бер йонсоу көҙгө иртәлә ҡыҙыбыҙ эшкә барыуҙан ҡырҡа баш тартты: былай көн дә 7-нән тороп эшкә сабырға мин берәүгә лә ҡол түгел, иртәнге 10-дан башлана торған эш эҙләйем, ти. Шунда ғына минең башҡа уй килде: нисек итеп беҙ 30-40 йыл буйына таң менән тороп саптыҡ икән? Ал-ял белмәй. Ике көн ялың йорт-хужалыҡ эштәре менән һә тигәнсә үтеп китә. Хәҙер уйлайым: эш кешеһенә тын алырға бирергә лә кәрәк, сөнки теүәл генә 9-ға эшкә килеп ултырһа ла хеҙмәткәр тулы эш көнө буйы эшләп ултырмай бит барыбер: тәмәке тартырға сығып китә, телефондан һөйләшә, сәй эсә... Йәмғеһе, иҫәпләп сығарһаң, ул ни бары 4-5 сәғәтен генә һөҙөмтәле файҙалана. Ҡалған өс сәғәтендә ни ял итә алмай, ни эшләй алмай эшлекле ҡиәфәт һаҡлап, киске алты тулғанын зарығып көтөргә мәжбүр. Бына ни өсөн мин яңы башланғысты яҡлайым: йәш быуын яңы, цивилизациялы шарттарҙа эшләргә тейеш, тип уйлайым.

Әлбиттә, ҡайһы бер күҙәтеүселәр, был хеҙмәт етештереүсәнлеген кәметеп, ил иҡтисадына зыян ғына килтерәсәк, һөҙөмтәлә эш хаҡы кәмейәсәк, тип ҡурҡыта, ләкин хәҙер инде 20 йыл буйы һис тә артып китә алмаған ВВП-ны (эске тулайым продукт) эш көнө оҙайлығы менән түгел, ә башҡасараҡ заманса исулдар менән генә арттырып буласағын әйтеп биреү өсөн иҡтисадсы булыу ҙа кәрәкмәй. Әлеге лә баяғы производствоны заманса йыһазландырыу, эш процестарын роботлаштырыу, электрон идара итеү системаларын ҡыйыуыраҡ индереү - бер һүҙ менән әйткәндә, производствоны ныҡышмалыраҡ модернизациялау талап ителә. Эшселәр эш аҙнаһы йәки эш көнөн ҡыҫҡартыуға ҡаршы икән, был ныҡлыҡты етештереү менән бәйле булмаған өлкәләрҙә - хеҙмәткәрҙәр өсөн индерергә була. Ул саҡта ла ҡыҫҡартылған эш көнө йә аҙнаһы табиптар, һатыусылар кеүек көн оҙоно халыҡҡа кәрәкле булған тармаҡтарға ҡағылмаясаҡтыр, тип уйлайым.

Әйткәндәй, мәктәптәр бер аҙ тын алып ҡалыр хәҙер: уҡыу ваҡыты аҙнаһына биш көн бит. Ә бына каникулдарҙы 1 октябргә тиклем оҙайтыу - был инде сиктән ашып китер, тием. Июнь имтихандар менән үтә, тип һылтаныу ҙа буш, сөнки ул сығарылыш кластар менән 9-сыларға ғына ҡағыла, ә башҡа кластар был ваҡытта рәхәтләнеп ял итә.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

## МАҠСАТЫҘМЫ ЙӘШТӘР?

Ҡаршыма ике ҡыҙ килә. Башҡорт башҡортто әллә ҡайҙан таный, тигән тойомлауға эйә ҡыҙҙар булды, ахры, былар - минә киң йылмайып баҡтылар һәм мине лә туҡтарға мәжбүр иттеләр.

-Нимә, ҡыҙҙар, юл тапмай йөрөйһөгөҙмө әллә? - тим.

- Юҡ, һеҙгә һорау бирергә теләгәйнем, - ти ҡыҙҙарҙың береһе.- Әйтегеҙ әле, берәй заман кеше ауырымай ғына, һау-сәләмәт йәшәй аласаҡмы?

- Бәй, нинә ундай һорау бирергә булдың әле? Берәй ойошманан мы һеҙ, опрос эшләп йөрөйһөгөҙмө?

- Юҡ. Мин бына хәҡиҡәт эҙләйем. Инжилды уҡып сыҡтым...

- Ә нинә Инжилды, ә Ҡөрьәнде түгел?

- Ҡөрьәнде лә уҡырға уйлайым...

Был ҡыҙҙың (икенсеһе өндәшмәй генә торҙо) ҡылығы бер аҙ аптыратты, шуға ла аҙаҡҡа тиклем асыҡламаҡсы булып: "Ҡыҙҙар, һеҙ берәй секта-фәләндәнме әллә?" - тип һорауым. "Юҡ", тигән яуап алғас, үҙем һөйләй башланым: "Ҡыҙҙар, бөгөн ҡала урамдарында шу-

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓2019 йылдың 11 октябрендә Республика көнөн үткәреү тураһында указға ҡул ҡуйылды. Быйыл Республика көнөн билдәләү Башҡортостан Республикаһы ойошторолоуҙың 100 йыллығына арнала. Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһе Александр Сидякин етәкселегендәге ойоштороу комитетына сараларҙы әҙерләү һәм уҙғарыу планын төҙөү бурысы йөкмәтелде.

✓Башҡортостан Башлығы хакимиәтендә социаль коммуникациялар идаралығы булдырылды. Яңы идаралыҡ етәксеһе итеп быға тиклем Башҡортостан Башлығы ҡарамағындағы социаль селтәрҙә халыҡтың мөрәжәғәттәре буйынса эшсе төркөм етәксеһе вазифаһын биләгән Елена Прочаковская тәғәйенләнде.

✓Башҡортостанда республика башлығы ҡарамағындағы Кеше хоҡуҡтары һәм граждандыҡ йәмғиәте институттарын үҫтереү советы булдырылды. Советтың бурыстарына, атап әйткәндә, ағымдағы хәлде күҙәтеү, ҡануниәтте боҙоу осраҡтарын тикшереү, граждандарҙың хоҡуҡтарын ҡыҫыу, методик һәм белешмә-аналитика материалдарын әҙерләүҙә һәм баҫтырып сығарыуҙа ҡатнашыу, шулай уҡ йәмәғәт контроле механизмдарын үҫтереү, халыҡтың хоҡуҡи белемен арттырыуға ярҙам итеү ҡарай.

✓"Торатау" конгресс-холында эшҡыуарҙар өсөн берҙәм клиент офисы форматында эшләүсе "Минең бизнесым" үҙәге асылды. Республикаһың Эшҡыуарлыҡ һәм туризм буйынса дәүләт комитеты рәйесе вазифаһын башҡарыусы Римма Бойцова билдәләүенсә, бында ресурс менән тәьмин итеүсе ойошмаларҙы бер урынға туплаған проект офисы эшләйәсәк. Республика Башлығы Хакимиәте етәксеһе Александр Сидякин һүҙҙәренсә, тиҙҙән Сибайҙа, Салауатта һәм Нефтекамала ошондай үҙәктәр асыласаҡ.

✓Рәсәй Хөкүмәте төбәктәргә 1,55 мең ашығыс ярҙам автомобиле һәм 2,45 мең мәктәп автобусы һатып ала. Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау системаһына 14 ашығыс медицина ярҙамы автомобиле (В класлы) һәм 10 реанимобиль (С класлы) бүленә. Төбәккә мәктәп автобустары һатып алыу 21-24 пассажир һыйҙырышлы 28 машинанан, 31-ҙән күберәк пассажир өсөн бер автобустан, 13-20 кешелек - алты, 10-12 пассажир өсөн ике автобустан тора.

*✓ Донъяның иң ҙур байлығы - кеше! Кеше - иң юғары зат, сөнки уға рух сәләмәтлеге хас. Кешенең ҡулынан килмәгән эш юҡ. Уға аң һәм аҡыл, булдыҡлылыҡ бирелгән.*



УЙЛЫҒА - УЙ

**Мосолман тормошонда "күк ҡабағы асыла" тигән бер төшөнсә бар: күк ҡабағы асылыу - игелеккә, ҡыуаныс һәм шатлыҡҡа була. "Аллаһ рәхмәте менән күк ҡабағы асылыуҙың дүрт шарты бар, - тигән Бәйғәмбәр ғәләйһиссәләм. - Ямғыр яуғанда, сабый бала ата-әсәһенең битенә ҡарап торғанда, Ҡәғбә ишектәре асылғанда һәм никах уҡылғанда". Эйе, ямғырҙар яуып торһон, сабыйҙар йөҙөнән йылмайыу китмәһен, Ҡәғбә ишектәре ябылмаһын, никахтар кәмемәһен, тарҡалмаһын. Былар барыһы ла тормошобоҙға бәрәкәт, матурлыҡ алып килһә, гонаһтарыбыҙға кәртә булып торһа ине. Ә минең бөгөнгө һүҙем XXI быуат кешеһе, сабый балалар һәм уларҙың яҙмыштары тураһында булыр.**

# КЕМ ҺИН, НИНДӘЙ ҺИН, КЕШЕ?

Эйе, әҙәм балаһы күпме замандар үтһә лә, үҙ асылында артыҡ үҙгәрмәй, Ер йөҙөнә ҡайһылай яралһа, нигеҙҙә, шул килеш ҡала. Уға уҡымышлылыҡ, белем, һәләт, фекерләү мөмкинлеге бирелгән һәм был мөмкинлектәр донъя менән бергә үҫә, үҙгәрә. Кешелә тәбиғәт тарафынан бирелгән мөхәббәт - хыянат, тыуыу - үлеү, тоғролоҡ - мәкерлек, патриотизм - һатлыҡ йәнлелек, яуызлыҡ - изге күңеллелек, уңғанлыҡ - ялҡаулыҡ, һаранлыҡ - йомартлыҡ, матурлыҡ - ғәриплек, батырлыҡ - бахырлыҡ кеүек сифаттар әле лә йәшәй, үҙгәрә бара. Тик хәҙерге заманда кире сифаттар ыңғай сифаттарҙан өҫтөнлөк ала башланы. Тормошобоҙҙағы кешелеклелек, миһырбанлыҡ, гүзәллек, инсафлыҡ кеүек сифаттарҙы яуызлыҡ, яманлыҡ, вәхшилек, өҫтөнлөк, дошманлыҡ, үҙ-үҙеңде генә яратыу, артыҡ әрһеҙлек кеүек кире сифаттар ҡыуалап сығарып бөтөп бара. Кеше ҡайҙалыр ашыға, ҡабалана, яуаплылыҡтан ҡаса, үҙенең был донъяға нимәгә тыуғаны, кемгә кәрәклеге, тормоштағы урыны, тәғәйенләнеше, киләсәге тураһында уйланырға ла ваҡыты ҡалмай, шикелле.

Кем һин, Кеше? Ниндәй һин? Был һорауҙарға яуап эҙләүсе бер мин генә түгел. Борон-борондан бик күптәр ошо серле затты тулыраҡ асырға, уның күңеленә нығыраҡ үтеп инергә тырышҡан, артабан да шулай буласаҡ. Кеше һәм хайуан (тере йән эйәһе) бер-береһенән нимәһе менән айырыла? Берәүҙәр быны әҙәми заттың кейенеп, оят булған ерҙәрен ҡаплап йөрөүе менән, икенселәр уларҙың бергә берләшеп, татыу, йәиһә ыҙғышталашта йәшәй белеүе, зирәк аҡыллы, зиһенле, мөхәббәтле, телмәрле булыуы менән раҫлар. Эйе, кеше вәхшилек түбәнлегенән ҡотолоп, хайуандан юғары күтәрелә ала.

Беҙҙең өсөн үҙ-ара мөхәббәт, дуҫлыҡ, фекер уртаҡлығы, сабыйҙарға миһырбанлы ҡараштан да ҡиммәтерәк нәмә юҡтыр. Ана шул ҡиммәттәрҙең береһе генә булмаһа ла донъябыҙҙың матурлығына, йәшәйеш ҡануныбыҙға ҙур зыян килә. Донъяның иң ҙур байлығы - кеше! Кеше - иң юғары зат, сөнки уға рух сәләмәтлеге хас. Кешенең ҡулынан килмәгән эш юҡ. Уға аң һәм аҡыл, булдыҡлылыҡ бирелгән. Әҙәм балаһына әҙәм булып йәшәргә лә йәшәргә ине лә бит. Тик... Балалары бар көйө ҡарттар йортонда тилмереп ятҡандарға ҡараһаң, ғәзиз балалары ҡул күтәреү арҡаһында был фани донъянан үтеп киткәндәрҙе уйлаһаң - уйҙарҙан уйылып китерлек. Был күренештәргә беҙ күнегеп тә, өйрәнеп тә киттек, шикелле. Ә инде ҡайһы бер әсәләрҙең, әгәр ҙә уларҙы шулай тип атарға яраһа, үҙ балаларынан баш тартыуы, ташлап китеүе, сүплеккә ырғытыуы, хатта быуып үлтереүе тураһында ишетһәң, сәстәр үрә тора, йөрәктәребеҙ ярылырҙай була.



Донъябыҙ бер ғәйепһеҙ етем балалар, ташландыҡ балалар менән тулды бит. Республикабыҙҙа ғына ла меңәрләгән етем һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балалар иҫәпләнә, ә бөтә Рәсәй буйынса ҡот осҡос һан килеп сыға. Ярай әле етемдәрҙе ғаиләгә патронат тәрбиәгә биреү башланды, юғиһә, ҡайҙа ҡуйып бөтөр инек беҙ уларҙы. Әсә булыу - игелекле вазифа ғына түгел, ә юғары дәрәжә, хоҡуҡи бурыс та. Бурысты үтәү - сәләмәт, көслө рухлы, юғары әхлаҡлы, киң ҡарашлы өлгөргән шәхес тәрбиәләү. Бөгөн беҙҙең йәмғиәтебеҙҙә һәр балаға етерлек кимәлдә белем бирелгән саҡта тәрбиәнең, тәрбиәлелектең ҡәҙере етмәүе көн кеүек асыҡ. XXI быуат кешеһенә киң күңеллелек, изгелек, тәүфиҡ, иман етмәй.

Һәр бала үҙ өлөшө менән тыуа был донъяға. Бәйғәмбәребеҙ: "Тыуған ваҡытында һәр бала фатри, йәғни тәбиғи иман менән тыуа", - тигән. Ҡайһы саҡта сабый балаларҙың - донъя тормошоноң биҙәге икәнен онотоп китәбеҙ.

Тәбиғәт ул бер тәртип менән төҙөлгән. Тәбиғәт ҡанундарында теүәлһеҙлек юҡ, теүәлһеҙлекте кешеләр үҙҙәре тыуҙырып тора һәм үҙе тыуҙырған теүәлһеҙлек уның үҙенең рухына үлемесле йоғонто яһай. Рухын ярлыландыра, уны юҡҡа сығара. Йәнлектәрҙән ғибрәт алырға кәрәк: ғәрип булып тыуған малды, йәнлектәрҙе күргәнегеҙ бармы? Булһа ла, бик һирәктер. Улар дүрт һыны төҙөк, етешһеҙлектәрҙән пак булып тыуа.

Кеше менән хайуанды сағыштыра, тип бер үк аптырай, ғәжәпләнә күрмәгеҙ. Кешеләрҙең ҡайһы бер ҡылыҡтарына яуап табыр өсөн махсус эшләйем мин быны. Бүреләр тормошонан миҫал килтереп китеү урынлы булыр. Ни өсөн бүреләр һуң? Бүре - иң йыртҡыс хайуандарҙың береһе һанала. Бүреләр ҡыш уртаһында үҙҙәренең туйҙарын үткәргәндән һуң, инә бүре яҡты донъяға тыуасаҡ балаларын ҡыҙғанып, ата бүренән ҡасып китә. Алдан әҙерләп ҡуйылған өңөнә барып урынлаша. Тик балалары тыуып, күпмелер ваҡыт уҙғас ҡына, ул ата бүрегә олоп тауыш бирә һәм уныһы инә бүрегә һәм балаларына аҙыҡ эҙләп, табыш артынан сығып китә. Был күренеште нәҫелнәсәпте һаҡлау, бүреләр затын дауам итеү, арттырыу инстинкты тип ҡабул итергә кәрәктер.

Бындай миҫалдарҙы бик күп килтереп булыр ине, әлбиттә. Ә ҡайһы бер кешеләр өсөн бала тормош йөгөнә, йәшлектең көндәшсеһенә, дәғүәсеһенә әйләнә. Тормош ауырлығына, тейешле йәшәү шарттары булмауына, башҡаса сара таба алмауға һ.б. сәбәптәргә һылтаныу урынһыҙ булыр, минеңсә.

"Бала - бәғер ите", "Бала - ата-әсәнең бәғер емеше" тигән изге һүҙҙәрҙе һис ҡасан онотмаһаҡ ине. Сабый баланың киләсәк тормошона, яҙмышына битараф булыу, үҙеңдең төп вазифаңа, бурысыңа аңһыҙ ҡарау - үҙеңә һәм тормошоңа ҡарата оло енәйәт, золом, хөкөм ул.

Киләсәк быуын: "Әҙәми заттан да түбәнерәк зат юҡ был донъяла!" - тип әйтерлек булмаһын ине. Әйтер һүҙем шул: кеше ысын Кеше булып ҡалһын был донъяла. Ә ысын кеше ниндәй ул, һеҙ нисек уйлайһығыҙ, йәмәғәт?

**Ғайса ИШМӨХӘМӘТОВ.**
**Ейәнсура районы.**

---

лай кешеләрҙе туҡтатып, ниндәйҙер һорау бирә, ниндәйҙер китап, йә тауар тәҡдим итә торған кешеләр осрап тора. Һәм ундай кешеләр хоҡуҡ һаҡлау органдары тарафынан эҙәрлекләнергә лә мөмкиндәр. Һеҙ ошондай хәүефле яғын белмәйһегеҙме ни әлеге ҡылығығыҙҙың? Белмәгәнһегеҙ икән, белегеҙ, икенсе тапҡыр улай итмәгеҙ. Ә ниндәйҙер һорауға яуап алғығыҙ килә икән, китаптар уҡығыҙ, гәзиттәр...

Шунан мин ҡыҙҙарҙың ҡайҙа эшләүе, баш ҡалалағы ниндәй башҡорт сараларына йөрөүҙәре, ниндәй китаптар, гәзиттәр уҡыуҙары тураһында һораштым. Асыҡланыуынса, ҡыҙҙар бер ниндәй уҡыу йортонда ла уҡымаған, тимәк, ниндәйҙер һөнәр алмаған. Миңә һорау биргәне парикмахерскийҙа иҙән йыуыусы булып эшләй, икенсеһенең тәғәйен генә эш урыны ла юҡ. Китаптар, гәзиттәр уҡымайҙар. Киноларға, театрҙарға, башҡа мәҙәни сараларға йөрөмәйҙәр. "Ә ниңә Өфөгә килдегеҙ һуң? Ниндәй аҡсаға йәшәйһегеҙ, атай-әсәй бирәме?" тигән һорауым да яуапһыҙ ҡалды...

Йәштәр Өфөгә, ғөмүмән, ҡалаларға уҡып белем алырға, яратҡан һөнәренә эйә булырға, күңел ятҡан эшкә урынлашырға тигән маҡсаттарын тормошҡа ашырырға килә, тип белә инек. Ә был хәл уйландырҙы. Күпме икән беҙҙә шундай йәштәр?

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА.**

---

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Өфөгә Рәсәйҙең Регби федерацияһы идараһы рәйесе Станислав Дружинин килде. Ул Башҡортостан етәкселеге менән осрашты. Яҡтар төбәктә ошо спорт төрөн үҫтереү мөмкинлектәрен тикшерҙе. Станислав Дружинин һүҙҙәренсә, Башҡортостан регби мәктәбенең киләсәге яҡшы. "Өфө" клубы әле үк Бөтә Рәсәй турнирҙарында сығыш яһай. Башҡортостанда 250 егет ошо спорт төрө менән шөғөлләнә.

✓Октябрҙән Өфөлә "Башавтотранс" автобустарында һәм электр транспортында бер сәғәтлек тариф индереү күҙаллана. "Алға" картаһы буйынса автобустарҙа юл хаҡы - 20 һум, троллейбустарҙа һәм трамвайҙарҙа 18 һум була. Электр транспортынан автобусҡа күсеп ултырғанда билет өсөн өҫтәмә аҡса түләү талап ителмәй. 1 сентябрҙән "Башавтотранс" дәүләт ташыусыһы автобустарында сәғәт эсендә бер билет менән төрлө маршруттарға күсеп ултырырға мөмкинлек биргән тариф ғәмәлгә инде.

✓Республикала 2020 йылдың беренсе ярты йыллығына ваҡытлы матбуғатҡа яҙылыу кампанияһы башланды. Республиканың барлыҡ почта бүлексәләрендә йәки Рәсәй почтаһы сайтында 4,2 меңдән ашыу гәзит-журналға яҙылырға була. Бынан тыш, "Изгелек ағасы" хәйриә акцияһы барышында һәр кемдең үҙе һайлаған социаль учреждение өсөн күңеленә ятҡан баҫмаға яҙылыу мөмкинлеге бар.

✓Өфө тәүге тапҡыр Рәсәйҙең балалар хирургтары форумын һәм беренсе Рәсәй-Ҡытай конгресын ҡабул итте. Башҡортостандың баш ҡалаһына ил төбәктәренән, Ҡытайҙан, АҠШ-тан һәм Германиянан 400-ҙән ашыу делегат килде. Билдәләнеүенсә, республиканың балалар хирургияһы һәр саҡ новаторҙар иҫәбендә. Бында торакоскопик хирургия алдараҡ барлыҡҡа килде. Башҡортостан табиптары Рәсәйҙә генә түгел, ә донъяла тәүгеләрҙән булып балаларға беренсе торакоскопик операция яһаны.

✓"Башавтотранс" предприятиеһы автобустарҙың сираттағы партияһын алды. Киләһе йылдың апреленә ҡәҙәр "Башавтотранс"ҡа, дөйөм алғанда, төрлө кластағы 589 автобус бирелә (418-е тапшырылды), был пассажирҙарҙы хеҙмәтләндереү сифатын етди үҙгәртергә тейеш, тигән ышаныс бар.

*✓ 1 сентябрҙән түңәрәктәрҙә һәм секцияларҙа шөғөлләнергә теләгән балаларҙы иҫәпкә алыу башланған. 8800 һум - республика буйынса уртаса сумма һәм уҡыусыларҙың йәшәгән, уҡыған урынына ҡарап, кәмергә йәки артырға мөмкин.*



ТУҠТА, МӘЛ!

# КҮҘ АЛДЫНАН ҮТТЕ...

**Үткән аҙнала Ҡырмыҫҡалы районы Тауһеңгер ауылы янындағы яланда 112-се башҡорт кавалерия дивизияһының легендар командиры Миңлегәле Шаймуратовтың тыуыуына 120 йыл тулыуға арналған байрам саралары үтте. Театрлаштырылған тамашаларҙа, яу яланы реконструкцияһында Бөйөк Ватан һуғышы ваҡытындағы күренештәр күҙ алдына баҫып, тетрәндерҙе. Байрамдан күренештәр ошо фотоларҙа ла һүрәтләнә.**











ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ДЕПУТАТТАР ЯУ АСТЫ!

**БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары республика буйлап легаль булмаған алкоголь һатыу нөктәләрен асыҡлау һәм уларҙың эшен киҫәтеү буйынса рейдтар үткәреү инициативаһы менән сыҡты. Был хаҡта парламент етәксеһе Константин Толкачев белдерҙе.**

"Легаль булмаған алкоголь һатыу менән көрәштә уңыштар булһа ла, һәр урында уны төнөн һатыуҙы тыйыу боҙола. Алкоголь продукцияһын төнөн һәм балиғ булмағандарға һатыу факттарын асыҡлаясаҡбыҙ. Был бик ҙур эш, уны урындағы муниципалитет депутаттары менән берлектә алып барасаҡбыҙ. Рейдтар мөмкин тиклем һөҙөмтәле булһын өсөн республика халҡына алкоголь һатыу нөктәләрен асыҡлауҙа ярҙам итергә тәҡдим итәм. Әгәр был хаҡта белһәгеҙ, Дәүләт Йыйылышына хәбәр итегеҙ", - тине ул.

Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай билдәләүенсә, алкоголь продукцияһының цивилизациялы баҙарын һәм уны ҡулланыу мәҙәниәтен булдырыу өсөн эҙмә-эҙлекле эшләргә кәрәк. Алкоголдә төндә һатыу проблемаһын депутаттар "Этил спиртын, алкоголле һәм спиртлы эсемлектәр етештереүҙе һәм һатыуҙы дәүләт көйләүе һәм алкоголь продукцияһын ҡулланыуҙы (эсеүҙе) сикләү тураһында" федераль законға төҙәтеүҙәр индереү аша хәл итергә уйлай. Әлеге ваҡытта тәҡдим ителгән закон проекты Дәүләт Думаһында ҡарала. Документ бер үк адрес буйынса алкоголь һатыуға ике төрлө лицензия биреүҙе тыйыуҙы күҙаллай. "Әле магазиндарға лицензияны йәмәғәт туҡланыуы ойошмаһы кеүек алырға мөмкин, - ти Константин Толкачев. - Өҫтәл һәм бер нисә ултырғыс ҡуйып, магазин йәмәғәт туҡланыуы нөктәһенә әйләнә һәм төнөн дә спиртлы эсемлектәр һата. Формаль яҡтан бәйләнерлек урын юҡ. Ғәмәлдә закон тарафынан рөхсәт ителмәгән төнгө һатыуҙы тыйыу боҙола. Беҙ бер үк ваҡытта бер үк адрес буйынса ошо ике төрлө эшмәкәрлек буйынса алкоголь һатыуҙы тыйыуҙы тәҡдим итәбеҙ".

Парламент спикеры депутат корпусының, контролләүсе һәм тикшереүсе органдарҙың, киң йәмәғәтселектең әүҙемлеге ваҡыт үтеү менән республиканың алкоголь баҙарында тәртип урынлаштырырға ярҙам итәсәк, тигән фекерҙә. Легаль булмаған алкоголь һәм уны төндә һатыу нөктәләре тураһында Дәүләт Йыйылышының Facebook, Instagram, ВКонтакте социаль селтәрҙәренә яҙырға мөмкин.

# ӨҪТӘМӘ БЕЛЕМ ӨСӨН...

**Быйылғы уҡыу йылынан республиканың 36 муниципалитетында, шул иҫәптән Өфөлә уҡыусыларға өҫтәмә белем биреү буйынса пилот проектын ғәмәлгә ашырыу башлана.**

Һәр бала дәүләттән бүленгән аҡса иҫәбенә, мәктәптән тыш, өҫтәмә белем алыу мөмкинлегенә эйә. Уҡыу йылына сертификаттың уртаса суммаһы 8800 һум була. Республиканың мәғариф министры вазифаһын башҡарыусы Айбулат Хажин уҡытыусыларҙың республика кәңәшмәһендәге сығышында аҡсаны икенсе маҡсатҡа тотонорға һәм ҡулаҡсаға әйләндерергә ярамағанын билдәләне. Дәүләт һәм муниципаль учреждениелар, шәхси ойошмалар - өҫтәмә белем биреү навигаторы каталогында урынлаштырылған барлыҡ түңәрәктәр һәм секциялар ҙа финанслау программаһында ҡатнаша. Был сертификаттар электрон төрҙә бирелә һәм уларҙың барыһында ла исем-шәриф күрһәтелә. Билдәләнеүенсә, 1 сентябрҙән түңәрәктәрҙә һәм секцияларҙа шөғөлләнергә теләгән балаларҙы иҫәпкә алыу башланған. 8800 һум - республика буйынса уртаса сумма һәм уҡыусыларҙың йәшәгән, уҡыған урынына ҡарап, кәмергә йәки артырға мөмкин. Ниндәй программаны финанслауҙы - сертификат аҡсаһы иҫәбенә түләргә кәрәклеген ата-әсәләр үҙҙәре һайлай. Бала сертификат аҡсаһы менән бер нисә программа буйынса шөғөлләнә ала. Муниципалитеттарҙың ишле, аҙ тәьмин ителгән ғаиләләрҙәге балалар, һәләтле уҡыусылар өсөн сертификаттағы сумманы арттырыу мөмкинлеге бар.

# БАШҠОРТСА ӨЙРӘН!

**Башҡортостанда башҡорт телен үҙаллы өйрәнеү өсөн мобиль ҡушымта әҙерләйҙәр. Проекттың заказсыһы - Башҡортостан Республикаһының Фәндәр академияһы. Ҡушымта Android һәм iOS мобиль ҡулайламаларында эшләргә тейеш, тип хәбәр ителә дәүләт һатып алыуҙары сайтында баҫылған тендерҙа.**

Конкурсты 24 сентябрҙә уҙғарырға уйлайҙар. Ҡушымта 50 көн эсендә әҙер булырға тейеш. Подрядсы алдан башҡорт теленең лексикаһы, терминологияһы, морфемикаһы һәм грамматикаһы буйынса тикшереү үткәрергә бурыслы. Ҡушымта Breakthrough Level (элементар) кимәле өсөн әҙерләнә. Унда эҙләү системаһы, "Һайланма", "Яҙмалар" һәм башҡа рубрикалар булырға тейеш. Заказсы башҡортса мәҡәл-әйтемдәрҙе, башҡортса-русса һәм русса-башҡортса һүҙлектәрҙе һәм башҡа функцияларҙы файҙаланыуҙы күҙ уңында тота. Юридик фәндәр кандидаты, Башҡорт дәүләт университеты доценты Айнур Хәйбуллин башҡорт теленән үҙөйрәткес әҙерләне лә инде, хәҙер уның ярҙамында телде өйрәнә башларға мөмкин. 2019 йылдың апрелендә мобиль операция системалары өсөн яңы версия әҙерләүҙәре билдәле булды, ул быйыл уҡ эшләй башлай һәм уны Google Play, App Store электрон майҙансыҡтарынан күсереп алырға була.

# "ЯНҒАНТАУ" ГЕОПАРКЫ

**Башҡортостандың Салауат районында урынлашҡан "Янғантау" геопаркы Рәсәйҙә тәүгеләрҙән булып ЮНЕСКО геопарктарының глобаль селтәренә индерелде. Ҡарар Индонезияла Гили Траванган утрауында уҙған Совет ултырышында ҡабул ителде.**

"Янғантау" геопаркы менән таныштырыу сараһы ла 3-6 сентябрҙә Индонезияла алтынсы Азия-Тымыҡ океан геопарктар селтәре симпозиумында уҙҙы. Шуны билдәләп үтәйек: әлеге ваҡытта ЮНЕСКО-ның геопарктар селтәрендә донъяның 41 иленән 147-нән ашыу объект иҫәпләнә. Ошо статусты алғас, Башҡортостандың үҙ төбәген һәм геопаркты донъя кимәлендә танытыу, сит илдәрҙән туристар йәлеп итеү мөмкинлеге асылды. "Янғантау" геопаркы 1774 квадрат километр майҙанда урынлашҡан. Унда Халыҡ-ара тәбиғәтте һаҡлау союзының Ҡыҙыл исемлегенә, Рәсәйҙең һәм республиканың Ҡыҙыл китаптарына индерелгән төрлө үҫемлектәр һәм йәнлектәр бар. Рәсәйҙең Милли һәм халыҡ-ара әһәмиәткә эйә төп орнитологик биләмәһе - Өфө яҫы таулығы ла ошонда. Туғыҙ тәбиғи һәм геологик объект һаҡлана һәм махсус һаҡланған тәбиғәт биләмәләре селтәренә инә.

Әйткәндәй, әлеге ваҡытта республика биләмәһендә тағы бер геопарк - "Торатау" - булдырыу эше дауам итә.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Журналистика өлкәһендәге иң яҡшы әҫәрҙәр өсөн Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премиялар биреү буйынса комиссия, тәҡдим ителгән эштәрҙе ҡарағандан һуң, дәғүәселәрҙе конкурсҡа ҡатнашыуға индерҙе. Улар араһында билдәле шағирәләр Лариса Абдуллина, Зәһрә Ҡотлогилдина, журналистар Рафиҡ Әхмәтшин, Азат Ғиззәтуллиндар бар. Конкурсҡа үткән эштәр 2019 йылдың 27 сентябренә тиклем тикшерелә.

✓Мәскәүҙә Рәсәйҙең Ҙур әҙәби премияһының 2019 йылғы беренсе лауреаттарын атанылар. Исемлектә Башҡортостан Республикаһының Яҙыусылар союзы ағзаһы Флүр Ғәлимов та бар. Яҙыусы конкурсҡа "Аҙғын тәүбәһе" трилогияһын тәҡдим иткән.

✓Башҡортостанда йөрәк сирле пациенттарҙың айырым категориялары йыл дауамында республика бюджеты аҡсаһы иҫәбенә дарыуҙар алыу хоҡуғына эйә, тип хәбәр итә Һаулыҡ һаҡлау министрлығы. Сирҙәр категорияһы исемлегенә йөрәктең ишемия ауырыуы һәм мейе инфаркты индерелде. Әлеге ваҡытта Башҡортостанда ошондай диагнозлы 10,5 мең сирле йәшәй. Ҡарарҙы 2020 йылдың 1 ғинуарынан тормошҡа ашырыу күҙаллана.

✓Юл хәрәкәтен ойоштороу үҙәге Башҡортостан халҡы өсөн республика биләмәһендә урынлашҡан юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоуҙы фотовидеотеркәү комплекстары картаһын әҙерләне. Уның менән http://svkrb.ru/kam/index.html һылтанмаһы буйынса танышырға мөмкин. Хәҙер республиканың автомобиль юлдарында һәм урам-юл селтәрендә 169 стационар комплекс, 63 күсмә комплекс, алты мобиль комплекс - бөтәһе 238 юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоуҙы автоматик теркәү комплексы эшләй

✓"Бәләбәй" йылдам социаль-иҡтисади үҫеш биләмәһендә өс яңы резидент теркәлде. "Башпеностекло" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте Күбекле быяла етештереү заводына 270 миллион һум аҡса һала һәм 32 эш урыны булдыра. "Стройинвест" предприятиеһы тимер конструкциялар етештереүҙе ойоштороорға ниәтләй. Өсөнсө резидент - "Наш Хлеб" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте. Башҡортостан биләмәһендә йылдам социаль-иҡтисади үҫеш биләмәһе резиденттары реестрына 28 августа бөтәһе 26 инвестор индерелгән.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# БЫЛ МӘКТӘПТӘР...

## тиҙ үҫеш билдәһе буласаҡ




(Башы 1-се биттә).

Артабан ҡунаҡтар, атай-әсәйҙәр менән урынлыҡ 162-се "Смарт" мәктәбендә булдырылған заманса шарттар, уңайлыҡтарҙы үҙ күҙҙәре менән күреп, танышып сыҡты. Күргәндәр барыһын да хайран итте: мәктәптә компьютер кластары һәм сит телдәрҙе өйрәнеү өсөн махсус лингафон кабинеттарынан тыш, инженер-технологтар әҙерләү өсөн робот техникаһы, 3D моделдәр төҙөү һәм прототиптар яһау лабораториялары бар. Уҡыусыларҙың ижади һәләттәрен үҫтереү ниәтендә мәктәп телестудияһы, нәшриәт үҙәге, дизайн студияһы, күнекмәләр залы булдырылған. Малайҙарҙы слесарҙар һәм агастан әйберҙәр эшләү оҫтаханаларында, ҡыҙҙарҙы йорт хужалығы һәм кулинария, бесеү-тегеү кабинеттарында ҡул эштәренә өйрәтәсәктәр. Бөтә бүлмәләрҙә лә күркәле интерактив ҡоролмалар урынлаштырылған. Мәктәптә тотош бер медицина бүлеге эшләйәсәк, унда стоматология, прививкалар яһау, процедуралар бүлмәһе һәм табип кабинеты асыла. Белем усағы директоры Наил Әминев әйтеүенсә, уҡытыу урыҫ, башҡорт һәм инглиз телендә алып барыла. Бынан тыш, бишенсе синыфтан алып уҡыусылар икенсе сит тел өйрәнә. Шуныһы мөһим, был мәктәп көн дауамында эшләй: төшкә тиклем балалар төп дәрестәрҙе уҡый, төштән һуң күңеленә яткан түңәрәктәргә йөрөргә, өҫтәмә белем алырға мөмкинлек бирелә. Башҡа мәғариф учреждениеларынан айырмалы рәүештә, 162-се мәктәптә математика, информатика, химия һәм биология фәндәрен тәрәнәйтеп өйрәнеү һәм профилле белем биреү иртә башлана. Өлкән кластарҙа социаль-иҡтисади, химия-биология һәм медицина йүнәлештәрен һайларға мөмкин. Һуңғыһы буйынса мәктәп Башҡорт дәүләт медицина университеты менән килешеү төҙәгән.

Яңы мәктәптә спортҡа ла ҙур иғтибар бүләсәктәр, шул иҫәптән "Мәктәптә спорт көрәше" федераль проекты сиктәрендә балалар менән көрәш буйынса профессиональ тренер шөғөлләнәсәк. Белем усағында бөтәһе өс спорт залы, профессиональ футбол майҙансығы һәм урамда уңға яҡын спорт майҙансығы төҙөлгән. Балаларҙың хәүефһеҙлеген ҡайғыртып, бөтә майҙансыҡтар ҙа махсус резина ябыу менән ҡапланған, ә баскетбол һәм волейбол майҙансыҡтары 3D сетка менән кәртәләнгән. Мәктәп өсөн балаларға сифатлы белем биреү, һәләттәрен үҫтереүҙән тыш, сәләмәт быуын тәрбиәләү ҙә өҫтөнлөклө булыуын ашханала туҡланыу сифатына ҙур иғтибар бүленеүенән дә күрергә була. 400 уҡыусы һыйған ашхана меню һы тәмле һәм сифатлы аш-һыуҙың төрлөлөгө менән айырылып торасаҡ.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Башҡортостанда быйылғы уҡыу йылында 1319 мәктәптең ишеген 488 мең, шул иҫәптән 55 мең беренсе синыф уҡыусыһы асып инде. Бер йыл эсендә республикала 21 мәктәп һәм 21 балалар баҡсаһы сафҡа индерелгән. "Дөрөҫөн әйткәндә, күңел ҡыуана. Күптән түгел генә хатта Башҡортостан кеүек ҙур республика сиктәрендә лә был тиклем яңы мәктәпте сафҡа индереүҙе күҙ алдына килтереүе ауыр ине, Рәсәй Федерацияһының ваҡ субъекттары тураһында әйтеп тораһы ла түгел. Әммә был эш бөгөн "Мәғариф" милли проекты сиктәрендә тормошҡа ашырыла", - тине Рәсәй Хөкүмәте рәйесе Дмитрий Медведев 2 сентябрҙә уҙғарылған видеокәңәшмә ваҡытында.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ЙЫЛЫ КӨНДӘР КӨТӨЛӘ



**Өфөлә августың һуңғы көндәре һәм сентябрь башы көҙ миҙгеле кеүек һалҡын булды. Урындағы халыҡ социаль селтәрҙә фатирҙарында ла, офистарҙа ла өшөүҙәре хаҡында яҙа. Һалҡындан һаҡланыу өсөн берәүҙәр - йылы кейемдәр, башҡалар кондиционерҙар һәм йылытҡыстар менән файҙалана.**

Ҡала властары билдәләүенсә, коммуналь хеҙмәттәр күрһәтеүҙе көйләгән федераль ҡануниәткә ярашлы, һауа температураһы биш көн рәттән +8 градустан түбән төшһә, йорттарға йылы бирелә башлай. Ләкин билдәләнгән температура сиген көтмәйенсә лә йылы биреүҙе һорап ғариза яҙырға мөмкин. Быны өсөн торлаҡ милекселәренең дөйөм йыйылышында тейешле ҡарар ҡабул итеп, протоколды идара итеүсе компанияға еБәрергә кәрәк. Ресурс менән тәьмин итеүсе компания ошо ғариза нигеҙендә йылылыҡ энергияһын тапшыра башлай. Әгәр коллектив ҡарар ҡабул ителмәһә, йортҡа йылы биреү датаһын идара итеүсе компания хәл итә. Уҙған йылда йылытыу миҙгеле - 28 сентябрҙә, ә 2017 йылда 26 сентябрҙә башланды. Быйыл, йола буйынса, йылыны сентябрь аҙағында бирәләр. Тәү сиратта балалар баҡсаларына, мәктәптәргә һәм дауалау учреждениеларына.

Әйткәндәй, синоптиктар мәғлүмәте буйынса, 8 сентябрҙән һуң һалҡын һауа торошо "әбейҙәр сыуағы" менән алышына. Йылы һәм ҡояшлы көндәр оҙаҡ ҡына - ике аҙна самаһы дауам итә. Һауа температураһы көндөҙгө сәғәттәрҙә +26 градусҡаса күтәрелә. Төндә лә +15 градусҡа тиклем йылы була. Ҡырау көтөлмәй.

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# ИҒТИБАР ҮҘӘГЕНДӘ...



**Үткән аҙналағы оператив кәңәшмәлә яңы уҡыу йылына әҙерлек барышында белем биреү учреждениеларында хәүефһеҙлек мәсьәләләре ҡаралғайны.**

Билдәләнеүенсә, йыл башынан алып ҡаланың дөйөм белем биреү учреждениеларында - 62, мәктәпкәсә ойошмаларҙа 66 тикшереү үткәрелгән, асыҡланған етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү буйынса күрһәтмәләр бирелгән. Барлыҡ белем биреү ойошмалары янғынды иҫкәртеүҙең автоматлаштырылған сигналы, башҡа системалар менән тәьмин ителгән, хеҙмәтләндереүсе персонал һәм педагогик составҡа ғәҙәттән тыш хәл килеп тыуғанда балаларҙы эвакуациялау буйынса инструктаж һәм күнекмәләр үткәрелгән. Шулай уҡ мәғариф учреждениелары терроргә ҡаршы хәүефһеҙлек саралары менән дә тәьмин ителгән. Әлеге ваҡытта 435 объект, шул иҫәптән 144 - дөйөм белем биреү, 231 - мәктәпкәсә, 38 - башланғыс һәм урта һөнәри, 22 юғары һөнәри белем биреү учреждениеһы видеокүҙәтеү ҡоролмаһы менән йыһазландырылған. 434 объектҡа хәүефһеҙлек төймәһе ҡуйылған.

Был аҙналағы кәңәшмәлә иһә күп фатирлы йорттарҙың ихаталарын комплекслы төҙөкләндереү, "Хәүефһеҙ һәм сифатлы автомобиль юлдары" милли проектын тормошҡа ашырыу мәсьәләләренә етди иғтибар бирелде. Билдәләнеүенсә, 2011 йылдан алып Өфөлә ихаталарҙы төҙөкләндереүҙең федераль, республика, ҡала программаларын үтәү барышында 1512 ихата ремонтланған. Киләһе йылда ла был эш дауам итәсәк, яҡынса адреслы исемлеккә әле 57 ихата индерелгән.

Юлдарҙың хәүефһеҙлеге мәсьәләһенә килгәндә, быйылға 38 объектта 2,2 миллиард һумлыҡ эш башҡарыу планлаштырылған. Төҙәлөш миҙгелендә дөйөм оҙонлоғо 47 километр тәшкил иткән 28 объектта ремонт эштәре күҙалланған, әлеге ваҡытта 16 объектта дауам итә һәм уларҙа планлаштырылған күләмдең 44 проценты башҡарылған.

Проектта ҡаралған барлыҡ эштәр ваҡытында үтәләсәк, тип вәғәҙә бирә яуаплы ойошма вәкилдәре. Шулай уҡ барлыҡ ремонтланған объекттарға термопластиктан горизонталь юл билдәләре һалынасаҡ. Сифат контроле эштәрҙең һәр этабында күҙәтелә, тикшереү барышында талаптарға яуап бирмәгән осраҡтар асыҡланғанда, улар подряд ойошмаһы иҫәбенә ҡабаттан башҡарыла.

Шулай уҡ милли проект сиктәрендә юлдарҙы техник саралар менән тәьмин итеү ҙә планлаштырыла, йәғни 6 фото- видеотеркәү камераһы, 5,4 километрҙа йәйәүлеләр өсөн ҡоймалар, 6 объектта яҡтылыҡ сығанаҡтары, 6 урында хәрәкәт тығыҙлығын күрһәтеүсе тапшырғыстар урынлаштырыласаҡ.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Үксәләр ярылғанда...

❖ Һуған ҡабығын бер аҙ ҡайнатып, шуға яңы ғына йыйылған юл япрағын (күләмдәре бер тигеҙ булһын) турап, шулай уҡ 1-әр балғалаҡ үҫемлек майы, бал, он ҡушырға. Ҡамыр итеп баҫҡас, йәйеп, ауыртҡан урынға ҡуйып бәйләргә. Ҡамырҙы ябыр алдынан аяҡтарҙы яҡшылап йыуығыҙ.

❖ Үксә ярылғанда дарыуханала һатылған үт (шыйыҡ була) ярҙам итә. Сепрәкте манып, бәйләйһең, кипһә, йылы һыу менән сепрәкте өҫтөнән генә дымлайһың.

## Күҙ ауыртыуынан

❖ Күҙ ауыртыуын булдырмау өсөн ҡара һәм йәшел сәйҙе ҡуйы итеп бешерергә (1:1) һәм һыуытырға. 1 стакан һыуынған сәйгә 1 балғалаҡ ҡоро ҡыҙыл шарап өҫтәргә һәм шул ҡатнашманы күҙҙәргә бер нисә мәртәбә һөртергә.

## Бөжәк тешләһә...

❖ Бөжәк тешләгән урынға бөтнөк һуты һөртһәң, ауыртыуы, яныуы бөтә.

❖ Сей картуфты ҡырып баҫһаң, ҡысытыу бөтә.

## Йүтәлләһәң...

❖ 1 ҡалаҡ шыршы бөрөһөнә 1 стакан яңы ҡайнап сыҡҡан һыу ҡойоп, төрөп, 1 сәғәт тонәтергә. Йүтәлләй башлаған һайын 1-2 йотом эсергә. Йәйге йүтәл ҡышҡыһына ҡарағанда ауырыраҡ үтә, шуға ла йылы миҙгелдә ауырымаҫҡа тырышырға кәрәк.

## Ҡыҙыл ҡарағат

❖ Ҡыҙыл ҡарағатта С витамины, йод, тимер күп. Аппетитты аса, ҡан ойошоуын кәметә, организмдан тоҙҙо сығара, мал-тыуар ризығын (ит, тултырма, ҡаҙылыҡ һ.б.) яҡшы эшкәртә, үт ҡыуа, эсте йомшарта.

❖ Аппетит булмағанда 1-2 аҙна көнөнә 2 тапҡыр ашар алдынан ғына 2-шәр ҡалаҡ ҡыҙыл ҡарағат ашарға кәрәк.

❖ Эс ҡатҡанда ҡыҙыл ҡарағат төнәтмәһен эсергә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *Көс-хәл менән бәйле торған бер атты тотоп, император дауалаусыны ҡыуа төшә. Шул саҡ ул үҙендә яңы көс уяныуын тоя. Сабып килә торғас, инде егерме йыл буйы һыбай йөрөмәүе, елдәргә ҡаршы сапмауы иҫенә төшә.*



*ЙОЛАНДАН ЙӨН ТАП!*



# БАШҠОРТ БАЛАҪЫ

**Дәүләкән районы Ҡәҙерғол ауылында осраған тағы бер балаҫта (1969 йыл) ҡара төҫтәге ерлек өҫтөнлөк итә. 6 эре фигуранан торған дөйөм композиция алдағыһына оҡшаһа ла, уларҙың эске өлөшөн тултырыу айырыла.**

Эске өлөшөнә горизонталь рәүештә һуҙылған ромб урынлаштырылған тура мөйөшлө ҡара фон ҡап уртала. Дүрт яғынан пирамидалар менән биҙәлгән күп мөйөшлө дүртмөйөштәр менән ҡара төҫтәге ромбтар балаҫтың ҡалған өлөшөн тултыра. Боронғо балаҫтарҙан айырмалы рәүештә, быныһында яңы төҫтәр: ҡурай еләге төҫө, зөбәржәт йәшел, асыҡ һары ҡулланылған һәм ҡара ерлектә биҙәк тағы ла байыраҡ, матурыраҡ күренә.





*Йондоҙ биҙәкле балаҫтар. Урал буйы. 1978, 1981-се йылғы экспедициялар материалдарынан. Автор фотоһы*

"Йондоҙ" тип йөрөтөлгән биҙәк тә алда телгә алынған орнаментҡа оҡшаш. Тура мөйөштәрҙең сығып торған өлөшө "М" хәрефе формаһында. Урталағы ҙур булмаған дүртмөйөштән йондоҙҙо 8 өлөшкә бүлеп торған һәм ғәҙәттә ҡараҡ төҫтә булған тура һәм диагональ һыҙыҡтар үтә. Әгәр ҙә тотош орнамент селтәрендә ҡулланылһа, ҡара төҫ менән йондоҙҙоң ситтәре лә билдәләнә.

Йондоҙҙарҙан торған композиция Ағиҙелдең урта өлөшөндәге һәм арьяғындағы райондарҙа йыш осрай. Көньяғыраҡ райондарҙа (Күгәрсен, Көйөргәҙе) һәм Дим буйы ауылдарында йондоҙло балаҫтар ҡара йәки ҡара-ҡыҙыл ерлеккә һуғылған. Оҙонона - 4-5 һәм киңлегенә 2 йондоҙ. Күпселек балаҫтарҙа йондоҙҙар бер төҫтә. Бер төҫтәге фигуралар диагональ йәки ҡуш итеп урынлашҡан. Ҡалған ерлекте ромб, дүртмөйөштәр менән тултыралар. Ҡайһы саҡта урта горизонталь линия буйынса ерлек һары йәки ҡыҙыл буй менән айырымлана һәм өҫтәмә элементтарҙы бергә бәйләп тора.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*КИНӘЙӘНЕ КИҢӘЙТЕП...*

# УҠЫУСЫ ӘҘЕР БУЛМАЙЫНСА,

## уҡытыусы килмәй ул…

Император ғәли йәнәптәре, ауырып, аяҡтан яҙа. Күпме тырышһалар ҙа, табиптар уны дауалай алмай. Ярты донъяны баҫып алған хаким ауырыу алдында көсһөҙ булып сыға. Асыуланған император уны аяҡҡа баҫтыра алмаған табиптарҙың башын киҫергә ҡуша. Яҡын тирәлә йүнле табип ҡалмай. Бер көн император вәзирен саҡыра ла:

- Тағы ла берәй табип ҡалдымы? - тип һорай.

- О, минең батшам, башҡаса ҡалманы. Һеҙ үҙегеҙ уларҙың башын киҫергә ҡуштығыҙ бит, - ти вәзир.

- Берәү ҙә ҡалманымы ни?

- Берҙән-бер дауалаусы ғына ҡалды. Ул бынан йыраҡ түгел ерҙә йәшәй.

- Ул дауалай беләме һуң?

- Эйе, белә. Ләкин ул шул тиклем тәрбиәһеҙ, мәҙәниһеҙ һәм тупаҫ кеше. Күптән түгел шул хәстрүш, императорҙы аяҡҡа баҫтыра алам, тип, хәбәр тараткан.

- Һин ниңә миңә уның тураһында өндәшмәнең?

- О, минең батшам, әгәр ҙә уны алып килһәм, уның холҡо өсөн һеҙ минең дә башымды киҫәсәкһегеҙ. Ул шул тиклем тупаҫ, - ти вәзир.

- Алып кил миңә ул холоҡһоҙ дауалаусыңды! - тип бойора император.

Алып киләләр императорға тере тороп ҡалған берҙәнбер табипты.

- Һин, ысынлап та, мине аяҡҡа баҫтыра алаһыңмы? - тип һорай батша.

- Ат дағалағанда баҡа ботон ҡыҫтырғандай, ҡыҫылма минең эшемә. Батша булмағас, мин дәүләт менән идара итеүгә ҡыҫылмайым бит, һин ниңә белмәгән башың менән медицинаға ҡыҫылаһың? Батша булараҡ, бәлки, һин бөйөкһөңдөр, ә медицинала һин ябай итексенән ары түгелһең, - тип, бик тупаҫ яуап бирә дауалаусы.

- Хәҙер үк башын киҫегеҙ! - тип аҡыра хаким.

Быға тиклем әле бер кем дә батша менән улай һөйләшмәгән була. Һаҡсылар шундуҡ тупаҫ табиптың ҡулдарын шаҡарып, теҙләндереп тә ҡуя.

- Һинең ихтыярыңда, - ти дауалаусы. - Мин һинең һуңғы ышанысың, башҡа берәү ҙә һине аяҡҡа баҫтыра алмаясаҡ.

- Ярай улайһа, әйҙә, дауалай башла. Һин бит мине бер көндә аяҡҡа баҫтырасаҡмын, тип хәбәр таратҡанһың.

- Минең өс шартым бар. Шуларҙы үтәһәң генә мин һине дауалай башлармын.

- Әйт!

- Бер тоҡ алтынға ҡушып, иң шәп атыңды бир.

- Әгәр ҙә аяҡҡа баҫтырһаң, мин һиңә алтын тейәлгән бер өйөр ат бирәм.

- Һуңынан бирерһең. Икенсе шартым: беҙ икәүҙән-икәү генә ҡалырға тейеш.

- Ниңә?

- Дауалаған мәлдә, бәлки, һиңә ауыртыуҙан ҡысҡырырға тура килер. Һинең көсһөҙ икәненде башҡалар ишетмәһен.

- Мин риза. Өсөнсө шартың ниндәй?

- Һин аяҡҡа баҫҡансы ярандарың һинең бер ниндәй бойороғоңдо ла үтәмәһен.

- Аңлат.

- Улар миңә ҡамасаулаһа, һине тулыһынса дауалай алмаҫмын.

Император табиптың өс шартына ла риза була һәм батша һарайында улар икәүҙән-икәү генә ҡала.

- Әйҙә, тиҙерәк дауалай башла, - ти тыныcһыҙ хаким.

- Һиңә, ҡарт ишәккә, мин һине аяҡҡа баҫтыра ала, тип кем әйтте? Минең ҡармаҡҡа эләккәненде һиҙмәйһеңме ни? Һин - ҡан эскестең битенә төкөрөү өсөн күпме көттөм мин ошондай уңайлы мәлде, - тип, дауалаусы батшаның битенә төкөрә.

Алйот хәлендә ҡалыуын аңлаған император асыуынан ап-аҡ була, быңдай оятһыҙ ҡыланыуға нисек тә булһа ҡаршы тороу тураһында баш вата.

- Һаҡсылар, тиҙ булығыҙ минең янға, тотоғоҙ ҡәбәхәтте! - тип ҡысҡыра ул.

Һаҡсылар уның ҡысҡырыуын ишетһә лә, батшаның бойороғон боҙоуҙан ҡурҡып, урындарынан ҡуҙғалмай.

- Ах, һин, үләкһә, ҡысҡырырға хәлеңдән киләме әле! - тип, табип йән асыуына батшаның аяғына тибә.

Император аяғы ауыртыуҙан ҡысҡырып ебәрә хатта.

- Хуш бул, һаҫып бөткән хайуан, - ти ҙә, табип батша бүләк иткән атҡа ултырып, йәне теләгән яҡҡа сабып сығып китә.

- Сабып үлтерәм, киҫәктәргә турайым! - тип үкерә император һәм, мамыҡ кеүек аяҡтарына көс-хәл менән баҫып, тышҡа сыға.

Дауалаусының хәйләһенә ышаныуына ныҡ асыуы килә уның, ләкин табип күптән инде әллә ҡайҙа олаҡҡан. Көс-хәл менән бәйле торған бер атты тотоп, император дауалаусыны ҡыуа төшә. Шул саҡ ул үҙендә яңы көс уяныуын тоя. Сабып килә торғас, инде егерме йыл буйы һыбай йөрөмәүе, елдәргә ҡаршы сапмауы иҫенә төшә. Шул саҡ артынан яҡынлашып килеүсе таныш тауышты ишетеп ҡала. Был бөйөк императорҙың ғәскәре уның артынан килә икән. Улар килеп етеүгә, батша туҙанға болғанып, һыны ҡатып көлә-көлә, ерҙә аунай икән: "Ах, һин, эт балаһы! Кемде аяҡҡа баҫтырғаныңды беләһеңме? Алтын тейәлгән бер каруан һиңә!"

Ошо кинәйәле хикәйә менән башланып китә Мирзакәрим Норбековтың "Опыт дурака, или ключ к прозрению как избавиться от очков" тигән китабы. Ташҡа баҫылғанға тиҙ ышанып бараммылыр, белмәйем, әммә үзбәк авторының китабы ныҡ тәьҫир итте: әллә күпме китап уҡып та, был китаптағы кеүек ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәргә осрағаным юҡ ине әле. Күп нәмәгә күҙем асылды, элек белеп онотҡанымды яңынан иҫкә төшөргән кеүек булдым. "Кешене үҙе белмәгән нәмәгә өйрәтеп булмай, бары белеп онотҡанын яңынан иҫенә төшөрөргә кәрәк", тип, Галилей бушҡа әйтеп ҡалдырмаған, күрәһең. Уйлап ҡарағыҙ әле, ысынлап та, шулай бит: ҡайһы бер китап ауыр уҡыла, ә ҡайһы берен уҡыған саҡта, ысынлап та, онотҡан нәмәләр яңынан иҫкә төшкән кеүек тойғо ҡала.

Эсеүҙе, тәмәке тартыуҙы ташлағандан һуң артабан камиллашыуға Норбековтың китаптары этәргес көс бирҙе миңә. Боронғо көнсығыш фәйләсүфтәренең аҡылына таянып, суфыйҙар ғилемен иҫкә төшөрөп, аңлайышлы ябай тел менән, бер аҙ юмор өҫтәп яҙылған был китаптар, ысынлап, рухи көс бирә. Тәү ҡарамаҡҡа, Норбековтың беренсе китабы күреү һәләте насар булғандарға тәғәйенләнгән һымаҡ. Әммә, ентекләп уҡыһаң, автор әйткән кәңәштәрҙе тотһаң, китапта бирелгән күнекмәләрҙе үтәһәң, ул киң ҡатлам уҡыусылар өсөн дә ҡулай. Шулай уйлап, Норбековтың китаптарын башҡаларға ла тәҡдим итә башланым. Баҡтиһәң, ҡайһы берәүҙәргә уның яҙғандары бөтөнләй тәьҫир итмәй икән. Күптәр ялҡаулыҡтары арҡаһында, йә булмаһа тормош мәшәҡәттәренән арынырға ваҡыт тапмай, ул китаптарҙы тәки уҡыманы. Китап авторы үҙе лә хроник ауырыуҙарынан тыш, ялҡаулыҡ тигән йоғошло ауырыу менән ауырыған булған. Шуға күрә ул башынан үткәндәрҙе йәшермәй, шәхси тәжрибәһенә таянып яҙа ла инде. Китаптың ылыҡтырғыс көсө, бәлки, ана шул ихласлыҡта һәм авторҙың үҙ кисерештәрен йәшермәй, нисек бар, шул килеш яҙыуындалыр ҙа.

"Уҡыусы әҙер булмайынса, уҡытыусы килмәй", тиҙәр. Һеҙ әҙерме яңы уҡытыусыны тыңларға? Әҙер булһағыҙ, уҡығыҙ, киреһенсә булһа - файҙаһы булмаясаҡ. Норбеков үҙе Сәйет Мөхәммәт Хәсән исемле кешенең өгөт-нәсихәттәрен тыңлаған. Мирзакәрим тәүге тапҡыр килгәнендә буласаҡ уҡытыусыһы уға: "Мин мәйеттәрҙе дауаламайым, бер аҙ күҙең асылғас килерһең", - тип ҡайтара. Һуңынан, тулыһынса йүнәлгәс кенә, аңлай Норбеков уҡытыусыһының һүҙҙәрен: һауығам, камиллашам тиһәң, иң тәүҙә үҙ көсөңә ышанырға кәрәк икән дә! Ә инде ялҡаулыҡҡа килгәндә, уның дауаһы ла һәр кемдең үҙендә түгелме ни? Был эпидемиянан арынмайынса, ғөмүмән, бер китапҡа ла йәбешергә ярамайҙыр ул - "батып барыусыны батып барыусы үҙе генә ҡотҡара", тиҙәрме әле? Норбековтың уҡыусылары Өфөгә йыш килеп тора. Тик үҙен күрергә ине, тигән хыялым һаман тормошҡа ашмай. Мәскәүҙән килгән бер уҡыусыһының лекцияһын тыңларға тура килгәйне. Шунда ул һөйләгән кинәйәле хикәйә һаман да иҫемдән сыҡмай: "Бер бәндәне 25 йылға төрмәгә ябалар. Яңғыҙ кешелек камерала аҡылдан шашмаҫ өсөн был меҫкен һәр бер көнөн билдәләп, сығыуына күпме ваҡыт ҡалғанын һанап, өмөтләнеп йәшәй. 25 йыл буйына ул аҙыҡ ташыусы төрмә һаҡсыһынан башҡа бер кемде лә күрмәй. Ниһайәт, сығырға ваҡыт етә. Тотҡон төрмә стенаһына һуңғы көнөн билдәләгән тамғаһын ҡуя ла, надзирателде көтә башлай. Көн кискә ауыша, ә ишек асырға тейеш кеше һаман юҡ та юҡ. Тотҡон йән асыуына ишекте дөмбөрләтә башлай. Коридорҙа аяҡ тауышы ишетелә. Ҡарауылсы ишекте аса. "Сыҡ, нимә ҡарап ултыраһың. 25 йыл буйына ишектәр асыҡ булды, ә һин бер тапҡыр ҙа ишекте асырға маташып, уны этеп тә ҡараманың", - ти ул".

Бына шулай, йәмәғәт, беҙ ҙә үҙебеҙҙе үҙебеҙҙең ялҡаулыҡ төрмәһенә бикләйбеҙ ҙә, кемдер килеп асҡанын көтөп ултырабыҙ. Аңланығыҙмы? Улайһа, үҙ ҡабырсағығыҙҙан сығығыҙ ҙа, уҡып сығығыҙ ошо китапты. Хәйер, кешене уңышҡа көйләүсе башҡа авторҙарҙың китаптары ла бихисап хәҙер. Шундай китаптарҙы уҡып та, аңламаһағыҙ, тимәк, һеҙ башҡа уҡытыусыны көтәһегеҙ...

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ.**

*✓ Дим йылғаһының бер ҡушылдығы Ҡатай-йылға тип аталһа, Ыҡ, Сөн, Дим, Ағиҙел йылғалары буйында Ҡатай һәм Салйоғот ауылдары бар. Ҡатай риүәйәттәрендә ата-бабаларының Ыҡ буйында йәшәүҙәре хаҡында мәғлүмәттәр бар.*

ЫРЫУЫҢ КЕМ?

**Тарихсы-этнолог Р.Ғ. Кузеев классификацияһына ярашлы, ҡатай ырыуы төньяҡ-көнсығыш башҡорттары төркөмөнә ҡарай. Был башҡорт ырыуының боронғо тамырҙары беҙҙең эраның тәүге быуаттарынан уҡ хәҙерге Эске Монголия, Маньчжурия тарафтарында йәшәгән кидань исемле ғәйрәтле халыҡҡа барып тоташа.**



# БЕҘ ҮҘЕБЕҘ ҠАТАЙҘАР!

Кидань империяһының үҙ яҙма теле була. Кидань яҙма теле ике төрлө була: лингвистар тәүгеһен оло кидань яҙмаһы, икенсеһен кесе кидань яҙмаһы, тип атай. Ул иероглифтарҙан һәм айырым идеограммаларҙан хасил булған, әммә ҡытай теле менән яҡынлығы юҡ. Кесе кидань яҙмаһын төҙөүсе ғалим Елюй Деланың уйғыр яҙмаһын өйрәнеүе билдәле, әммә кидандар уйғыр телендә һөйләшмәгән. Ошо телдәге ҙур булмаған яҙма ҡомартҡылар (эпитафиялар, таш стелалар, моneталар һ.б.) һаҡланып ҡалған хәлдә лә, ғалимдар был яҙма телде тулыһынса уҡый алыуға өлгәшә алманы. Күрәһең, кидандар ҡытай телен дә, монгол телен дә үҙ итмәгән. Был, бәлки, ошо тарих төпкөлөндә таралып юҡҡа сыҡҡан ҡәүемдең төрки сығышлы булыуына, йәиһә бик боронғо осорҙарҙа уҡ төркиләшеүенә ишаралыр. Ошо хаҡта урта быуаттарҙың билдәле телсе ғалимы Мәхмүт Ҡашғари ҙа (XI быуат) былай тип телгә ала: "...Хитайҙың айырым теле һәм яҙмаһы бар. Улар төрки телен тулыһынса белмәй". Тимәк, боронғо ҡара ҡытай теле төрки телдәренә яҡын булыуы бар, улар, тулыһынса булмаһа ла, шул телдә аралаша алған. Бындай күренеш бөгөн дә бар: мәҫәлән, беҙ, башҡорттар, төрөк телен тулыһынса аңламайбыҙ бит.

Шулай итеп, ҡара ҡытайҙар, айырым үҙаллы этник берләшмә булыуҙан туҡтағас, урта быуаттар башында уҡ үҙаллы халыҡ булып танылған башҡорт, ҡырғыҙ, ҡараҡалпаҡ һәм буласаҡ Джучи олоҫонда формалашасаҡ ҡаҙаҡ, нуғай, үзбәк, ҡырым татарҙары составына инеп китә. Был факт бик фәһемле һығымта яһарға ерлек бирә: ҡатай-ҡытай этнонимлы хәҙерге төрки ырыуҙарының ата-бабалары ҡара ҡытайҙар нәҫеленән булғас, уларҙың монгол сығышлы булыуы ла бик бәхәслелер.

Был турала тарихсы С. Хәмиҙуллин да үҙ фаразын белдерә. Көньяҡ Уралдағы башҡорт мөхитенә ҡатайҙар, ҡыпсаҡтар, мендәр, бөрйәндәр, табындар һәм башҡа ырыуҙар кеүек үк, һис бер ҡаршылыҡһыҙ килеп инә, тип иҫәпләй ул. Шул уҡ ваҡытта геногеография материалдары ла ҡатайҙар һәм монгол сығышлы халыҡтар араһындағы уртаҡлыҡты раҫламай: ҡатайҙарҙың төп генетик маркеры R1a-M198 гаплотөркөмөнә ҡарай, ә был генетик линия башлыса башҡорттар араһында киң таралған. Ошо гаплотөркөм табын, унлар, балыҡсы, танып, күҙәй ырыуҙарында өҫтөнлөк итә, ул шулай уҡ әйле, ҡошсо, дыуанәйлеләрҙә лә бар. Ә бына монголдарға хас C, N гаплотөркөмө субкладтары ҡатайҙарҙа юҡ тиерлек. С. Хәмиҙуллин был сетерекле мәсьәлә буйынса ла үҙ версияһын белдерә. Унынса, Көньяҡ Уралға ҡара ҡытайҙарҙың артыҡ ҙур булмаған төркөмө (улар ғәскәренең бер өлөшө) килеп сығып, ҡатай исеме аҫтында урындағы башҡорттарҙың бер төркөмөн үҙҙәре тирәһендә бер ҡорырыуға туплай алған. Тап шуның өсөн ҡатайҙар араһында R1a1-Z94 субкладына ҡараусылар өҫтөнлөк итә, ти ул.

Этнолог Р.Ғ. Кузеев ҡатайҙарҙың найман һәм аз, ас исемле боронғо ҡәбиләләр менән дә нәҫелдәш булыуын фаразлай. Ҡатай һәм наймандарҙың "балға" тамғалары бер иш. Ҡатайҙарҙың ас, ассы аймаҡтары булһа, алтайҙар составында байлаҡ ас, телеуттарҙа - төрт ас, ҡырғыҙҙарҙа - азык ырыуҙары бар. Ғалим ҡатай ырыуы составында масҡары аймағы булыуына ла иғтибар иткән. Балаҡатай районында Иҫке һәм Яңы Масҡары ауылдары бар, улар Масҡары йылғаһы буйында урынлашҡан. Ҡаҙаҡстандың Кесе Жузындағы байулы ырыуының бер бүлеме масҡар, тип атала. Шулай уҡ монгол дэрбэттары составында ла маскар ырыуы теркәлгән. Р.Ғ. Кузеев ҡара ҡытайҙарҙың салъют (салджиут) исемле монгол сығышлы ырыу халҡы менән союздаш булыуына иғтибар итә. Салъюттар татар, дурбан һәм катакиндар менән оҙаҡ йылдар буйына Сыңғыҙ ханға ҡаршылыҡ күрһәтә, еңелгәндән һуң ҡара ҡытайҙарға барып ҡушыла. Салйоғот (һалйоғот) этнонимы хәҙерге ваҡытта тик башҡорттар араһында ғына һаҡланып ҡалған. Улар күп осорҙар дауамында ҡатайҙар менән йәнәш йәшәй.

Тарихи Башҡортостан еренә ҡатайҙар һәм салйоғоттар XIII быуат урталарында дөйөм ҡыпсаҡ күсеше барышында килә. Тәүҙә улар Ыҡ һәм Ағиҙел йылғалары арауығында көн итә. Уларҙың ҡасандыр был ерҙәрҙә йәшәүен топонимдар һәм гидронимдар раҫлай. Әлшәй районында Дим йылғаһының бер ҡушылдығы Ҡатай-йылға тип аталһа, Ыҡ, Сөн, Дим, Ағиҙел йылғалары буйында Ҡатай һәм Салйоғот ауылдары бар. Ҡатай риүәйәттәрендә ата-бабаларының Ыҡ буйындағы Иҫке йортта йәшәүҙәре, ҡатай бейе Арыптың Минзәлә кантонында ерләнгәнлеге хаҡында мәғлүмәттәр бар.

Тарихсы С. Хәмиҙуллин ҡатайҙарҙың Урал аръяғына, хәҙерге йәшәгән төбәккә Себер тарафтарынан, Иртыш йылғаһы бассейнынан туранан-тура килеүе мөмкин булыуын да иғтибарға ала.

Ҡатайҙарҙың бер өлөшө Ағиҙел йылғаһының урта ағымындағы, Инйәр буйындағы ерҙәргә барып етә. Әммә уларҙың күпселеге төньяҡҡа табан йүнәлә, улар Танып йылғаһы буйлап барып, Бисерть, Сылва, Чусовой йылғаһы үренә тиклем килеп сыға. Ошо ерҙәрендә ҡатайҙар XVI быуат аҙаҡтарынаса йәшәй. Әммә Ермак походтары заманындағы һуғыштар, 1572 йылдағы ихтилалда ҡатнашыу, заводчик Строгановтарҙың ҡыҫымы аҫтында ҡатайҙар салйоғоттар менән бергә көньяҡҡа күсеп китергә мәжбүр ителә. Салйоғоттар Теча һәм Синара йылғалары буйында ҡалһа, ҡатайҙар Ҡариҙел, Оло һәм Кесе Ыҡ буйындағы ерҙәргә килеп урынлаша. Урал аръяғына табан күсенгән ҡатайҙарға малсылыҡ менән иркенләп шөғөлләнер өсөн буш ерҙәр бик аҙ булғанлыҡтан, улар XVIII быуаттың тәүге яртыһында көнсығышҡараҡ китеп, Уй һәм Тобол йылғалары үҙәнендәге ялан ерҙәрҙе үҙләштерә. Артабан уларҙы ялан-ҡатайҙар, тип атай башлайҙар.

Ҡатай ырыуы башҡорттары тарихи Башҡортостандың ғәйәт киң арауығында: Көньяҡ Уралдың урманлы-таулы зонаһында, Урта һәм Көньяҡ Урал сигендә, Ҡариҙел йылғаһы үрендә, Урал аръяғы күлдәре төбәгендә таралып йәшәй. Инйәр-ҡатай, ҡоҙғон-ҡатай һәм иҙел-ҡатайҙар хәҙерге Белорет районында йәшәй, Белорет ҡалаһы ла ҡатай ерендә урынлашҡан. Бала-ҡатайҙар ошо исемдәге районда һәм Силәбе өлкәһенең Нязепетровский районында йәшәй. Шулай уҡ Силәбе өлкәһенең Ҡонашаҡ, Арғаяш, Кәҫле һәм Сосновский райондарында оло- һәм бала-ҡатай ауылдары бар. Ялан-ҡатайҙар Ҡурған өлкәһенең Әлмән һәм Сафакүл райондарындағы башҡорт ауылдарында көн итә.

Башҡортостан тарихында күренекле урын алған, уның мәҙәниәтенә ҙур өлөш индергән байтаҡ ҡына аҫыл шәхестәр ҡатай ырыуы мөхитендә тыуып үҫкән. Башҡорт ихтилалдарында "Һыңар күҙ" Ишмөхәмәт (1681 - 1684), Арыҡҡай (1704 - 1711), Көтөкәй батыр (1735 - 1740), старшиналар Ишкенә Айсов, Дауыт Еналин, Аҡкөсөк Таиров (1772 - 1775) кеүек ил ағалары ырыуҙаштары менән үҙ хоҡуҡтары өсөн яуға күтәрелә. 1917 - 1920 йылғы башҡорт милли хәрәкәте етәкселәренең береһе, ҡатай ырыуының арҙаҡлы шәхесе Шәриф Манатов Башҡорт милли шураһының тәүге рәйесе вазифаһына һайлана. Күренекле башҡорт инсандары Ғәлимйән Таған, Әбделҡадир Инан, бер туған Ғимран һәм Сәйетгәрәй Мағазовтар Ә.З. Вәлидиҙең иң яҡын арҡаҙаштары иҫәбендә булып, Башҡорт милли автономияһын төҙөүҙә әүҙем ҡатнаша. Йәш Совет Башҡортостаны шағирҙары араһында иң күренеклеләрҙән иҫәпләнеп, башҡорт поэзияһында яҡты эҙ ҡалдырған Ғәлимов Сәләм - ҡатай ырыуы башҡорто. "Шайморатов генерал" йырының авторы, билдәле шағир һәм драматург Ҡадир Даян да тыуған төйәгенең ғорурлығы ул. Ә Ҡадир Тимерғазин - Башҡортостандың тәүге геология-минералогия фәндәре докторы, "Башнефть" ПБ директоры була, БАССР Юғары Советы Президиумы рәйесе вазифаһына һайлана. Ҡатай ырыуының башҡа меңәрләгән вәкилдәре илебеҙҙең ватансыл, эшһөйәр һәм булдыҡлы улҡыҙҙары булып танылыу тапты.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләне.**
**(Аҙағы. Башы 35-се һанда).**

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ



# БАШҠОРТТАР
## Боронғо мәғлүмәттәр

Беҙҙең ғалимдарыбыҙ һаман да әлеге Башҡорт автономияһы сиктәренән сыға алмай, ә бит беҙҙең Тарихи Башҡортостан тигән оло майҙаныбыҙ бар. Ҙур Тарихи Башҡортостанда ҡалалар бик күп булған. Иҙриси яҙған Ҡастра, Мастра, Ҡаруҡия, Нимжан, Гурхан ҡалалары башҡорт ерҙәренең ҡайһы тирәһендәрәк урынлашҡан булғандар икән? Беҙ уларҙы мотлаҡ әлеге республикабыҙ сиктәрендә генә эҙләргә тейешме ни? Беҙҙең ерҙәр бит ғәйәт ҙур булған! Тарихсы ғалимдарға ошо серҙәрҙе лә асырға кәрәк киләсәктә. Ғәрәп кешеһе үҙ туған теле ҡағиҙәләренән, өндәр яңғырашынан сығып беҙҙең башҡорт ерҙәрендәге атамаларҙы боҙоп та яҙыуы ихтимал. Мәҫәлән, Иҙриси яҙмаларындағы Ҡарукия ҡалаһы башҡортса икенсе төрләрәк яңғыраған булыуы ла бар. Минең уйымса, Ҡарукия атамаһы башҡортса Ҡарағай булырға тейештер кеүек. Сөнки башҡорт фольклорында, урта быуаттарҙың тарихи сығанаҡтарында һаҡланып беҙгә килеп еткән мәғлүмәттәргә ҡарағанда, ниндәйҙер бер Ҡарағай тигән ер йыш телгә алына. Ҡайһы бер мәғлүмәттәргә ҡарағанда, ул Ҡарағай тигән урын хәҙерге Силәбе өлкәһенең Верхнеуральск тигән ҡалаһы тирәһендәрәк булырға тейеш. XIII быуатта татар-монголдар дәүеренә ҡараған ваҡиғаларҙа Биксура хандың Йайыҡ йылғаһы башындараҡ Ҡарағайҙа хакимлыҡ итеп ултырыуы телгә алына. Хәҙерге Верхнеуральск ҡалаһы көнсығыштан көнбайышҡа, төньяҡтан көньяҡҡа ҡарай киткән юлдар киҫешкән ҙур стратегик әһәмиәтле ерҙә һалына. Был урынды урыҫтарға башҡорт тархандарының береһе күрһәтә. Уға тиклем урыҫтар был юлдың барлығын белмәйҙәр. Башҡорттар бында тормоштарында тыуып торған төрлө мәсьәләләрҙе хәл итер өсөн йыйылыр булғандар. Ошо тирәләрҙә шулай уҡ Ер Ҡарағай, Уҡлы Ҡарағай, Ябыҡ Ҡарағай тигән ниндәйҙер бер урын тарихи сығанаҡтарҙа йыш телгә алына. Был атамаларҙа бер үк ер телгә алынамы, әллә улар төрлөһө төрлө урынмы - был турала әле уйланған һәм, уны асыҡларға ынтылып, тикшергән кеше юҡ.

XIV быуаттың тәүге яртыһында йәшәгән ғәрәп ғалимы ибн Фадлаллах әл-Умариҙың хәбәр итеүенә ҡарағанда, шул дәүерҙә бөтә Себер ҡалалары башҡорттарға буйһонған булғандар.

Стәрлетамаҡ ҡалаһы урынында ла борон ниндәйҙер ҡала булған кеүек, сөнки был ҡала бик боронғо юлда урынлашҡан. Уның оло юлда ултырыуына атаманың мәғәнәһе үк ишаралай. "Стәрлетамаҡ" атамаһы ике - "стәрле" һәм "тамаҡ" тигән һүҙҙәрҙән тора. Бында "тамаҡ" тигәне башҡорт өсөн аңлашылып торһа, "стәрле" тигән өлөшө бөгөнгө башҡорт теле аша аңлатып булмай. "Стәрле" һүҙен "нимәле?" йәғни "стәр" тамырына "ле" ялғауы ҡушыуҙан барлыҡҡа килгән һүҙ тип ҡарарға кәрәк. Боронғо көнсығыш иран телдәрендә "әстәр", "стур", "астыр" һүҙе "эре мал" тигәнде аңлатҡан.

**Зәкирйән ӘМИНЕВ, этнограф.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Үҫмерҙе физик яҡтан көсөргәнешкә күнектереү кәрәк, шул ваҡытта ул үҙ энергияһын үҫешеүгә йүнәлтәсәк. Киреһенсә булһа, үҫмерҙең уйында компьютер атыш уйындары ғына була - тимәк, ул менталь кимәлдә үлтерергә өйрәнә.*



ТӘРБИӘ МӘКТӘБЕ



# ӘКИӘТТӘРЕБЕҘҘЕ ҺӨЙЛӘП,

## үҙ мөхитебеҙҙә тәрбиәлә

**"Киске Өфө" гәзитендә балаларҙы үҙ мөхитендә, үҙ милләте балалары араһында уҡытыуҙың, тәрбиәләүҙең мөһимлеге тураһында мәҡәләләр баҫылып тора. Ошо турала мин дә үҙ фекеремде белдерергә булдым әле.**

Мин 40 йылдан ашыу ғүмеремде балалар уҡытыуға арнаным. Урыҫ кластарында ла, башҡорт кластарында ла уҡыттым. Хатта үҙ тәжрибәм тураһында ентекләп яҙайыммы икән, тигән уй ҙа тыуғылап ҡуя.

Балаларын мәктәпкә биргән саҡта атай-әсәй әле йәш була. Бала үҫеп, хаталарын аңлаған ваҡытта һуң була. Мин район үҙәгендәге мәктәптә эшләгәс, атай-әсәйҙәрҙең илай-илай, талаша-асыуланыша, тартыша-ҡыртыша балаларын урыҫ класына уҡырға биреүен, беҙҙең һүҙгә ҡолаҡ та һалырға теләмәүен бик яҡшы беләм.

Сәбәптәре: етәксе вазифаларҙағы кешеләр үҙ балаларын урыҫ кластарында уҡытыуҙы өҫтөн күрә, мәктәптәге уҡытыусыларҙың да күсләү, һәләтлеләрен урыҫ кластарында уҡытырға тәғәйенләйҙәр. Ошонан башлана ла инде урыҫ кластарының өҫтөнлөгө. Башҡорт кластарына һәр саҡ уҡыуға һәләтһеҙерәк, ауырыраҡ балаларҙы ултырта торғайнылар. Хатта бер педсоветта насар уҡыусы урыҫ малайын кемдер шаяртып: "Әйҙәгеҙ, башҡорт класына ултыртайыҡ", - тигәне хәтерҙә.

Баланы үҙ мөхитенән, үҙ ҡанындағы тәрбиәнән айырмаҫҡа кәрәк. Бер саҡ урыҫ класында әкиәт уҡыйым: Кеше Айыуҙы ота ла ота, ота ла ота. Әле һабаҡ ашата, әле тамыр ашата. Бер ҡыҙ бала иланы ла ебәрҙе. "Мин Айыуҙы йәлләйем", ти. Мин баланы йыуатыу урынына бәхәсте ялғап алып киттем: "Кеше дөрөҫ эшләгәнме?" Класс икегә бүленде. Бәләкәй генә 7-8 йәшлек балалар төрлө фекер әйтте. Аҙаҡ анализ яһаным. Айыуҙы йәлләгән ҡыҙ ҙа, уны яҡлаусылар ҙа башҡорт балалары булып сыҡты. Бының менән мин урыҫ балаларын кәмһетергә теләмәйем, ә, башҡорт булараҡ, урыҫ балаларына ошо әкиәт нигеҙендә ниндәй тәрбиә бирергә белмәүем хаҡында әйтәм. Был әкиәтте ижад итеүсе халыҡ ни әйтергә, балаларын ниндәй юҫыҡта тәрбиәләргә теләгән? Педагог-ғалимдар ҙа әкиәт нигеҙендә тәрбиәләү тураһында яҙмай. Ә кәрәк ине. Һәр хәлдә, быуындан-быуынға күсә килгән был әкиәттең нигеҙендә "үҙеңдән аҡыллыҙыраҡты оторға кәрәк" тигән фәһем ятмайҙыр.

Ә башҡорт балалары быңдай "отоуҙы", "быңдай аҡылды" ҡабул итә алманы. Уларға ауырлыҡтарҙы, дошмандарҙы, хәйлә-мәкерҙе еңеүсе, көслө батырҙар тураһында уҡыу күңелләрәк. Улар шундай әкиәттәрҙе нығыраҡ ҡабул итә.

Тағы бер һығымтамды яҙайым. Сөнки психолог-ғалим Вадим Сафин да, башҡа атай-әсәйҙәр ҙә ауыл балаларының, бигерәк тә ҡыҙҙарҙың ҡайһы берҙәренең аҙып китеүе тураһында борсолоп яҙа. Мин үҙ тәжрибәмдән сығып, шуны әйтә алам: беҙ милләтебеҙгә ят идеалдар, ят мөхит, ят тәрбиә ҡанундары менән баланы үҙенең ҡан ҡалыбынан, булмыш ҡалыбынан айырабыҙ. "Үҙ" ҡалыбынан сығарылған бала башҡаныҡына яраҡһыҙ булып сыға. Ул үҙен "икенсе сортлы" итеп ҡарай башлай һәм ошо кәмһенеүҙе бөтөрөү өсөн "яттарса" ҡылана.

Эйе, баланы мөхит нығыраҡ тәрбиәләй. Ошо мөхиттә уның тормош идеалы формалаша, маҡсаты һәм маҡсатҡа өлгәшеү асулы төҫмөрләнә. Йәш атай-әсәйҙәр беҙҙең кеүек тәжрибәле, өлкән уҡытыусылар һүҙенә ҡолаҡ һалһын ине: мөмкинлек булғанда, баланы үҙ мөхитенән айырмағыҙ.

**Мәликә КҮСЕМОВА.**

**Көнбайыш илдәрендә йыш ҡабатланып торған теракттар, шулай уҡ Рәсәйҙең Керчь, Пермь, Силәбе, Улан-Удэ ҡалаларындағы фажиғәле хәлдәр, уҡыусы йәшендәге балаларҙың үҙ тиңдәштәрен аяуһыҙ туҡмау-имгәтеү осраҡтары, үҫмерҙәр суициды, инфантилизм - быңдай факттар йәш быуынды тәрбиәләү процесының хәҙерге йәмғиәт шарттарында тейешле кимәлдәге һөҙөмтә бирмәүен күрһәтә. Был етешһеҙлек мәктәптәргә, урта профессиональ һәм юғары уҡыу йорттарына берҙәй ҡағыла.**

# ЯҢЫСА УҠЫТАМ,

Миненсә, түбәндә телгә алынған проблемалар, йәғни предмет уҡытыусыларының дөйөм педагогик әҙерлеге етерлек кимәлдә булмауы, педагогтарҙың оҫта тәрбиәсе була алмауы; уҡытыусының уҡыу процесында тәғәйен тәрбиәүи функцияларын үтәмәүе; һөнәри уҡыу йорттарында һәм урта мәктәптәрҙә уҡыу-уҡытыу процесының бары тик белем биреү буйынса күрһәтелгән хеҙмәт кимәленә тиклем төшөрөлөүе; үҫмерҙәр проблемалары буйынса юғары квалификациялы белгестәр булмауы шундай аянıслы хәлдәргә юл аса.

Шул уҡ ваҡытта үҫеп килеүсе быуын үҙен уратып алған мәғлүмәти мөхиттә йәшәй, гаджеттар, интернет селтәрҙәре контентының һәр саҡта ла ыңғай булмаған тәьҫиренә аҫтына эләгә. Ә быға әлеге ваҡытта ата-әсәләр ҙә, уҡыу йорттары ла, дәүләт структуралары ла бер нисек тә тейешле йоғонто яһамай, сөнки улар был процестарҙың әҙәмтәһен аңлап та етмәй. Ә оло быуын интернет мөхитендәге мәғлүмәти процестарҙы йә аңламай, йә бөтөнләйе менән уларҙан ҡурҡа. Ҡытайҙарҙың "Илде яулап алырға теләһәң - уның балаларын тәрбиәлә" тигән әйтемен илебеҙҙә тәрбиә торошон контролһеҙ ҡалдырыуҙың ни тиклем хәүефле булыуына ишара итеп ҡабул итергә кәрәктер.

Мәктәптәребеҙҙәге хәҙерге белем биреү системаһы - беҙ, беҙҙең атай-әсәйҙәребеҙ уҡыған замандағының тап киреһе ул. Балаларҙың аңын томаланырыу һәм физик яҡтан зәғифләндереү беренсе кластарҙан уҡ алып барыла. Рәсәй Мәғариф министрлығының мәктәптәрҙә сәләмәт балаларҙың ҡалмауы хаҡында хәбәр итеүе шуға бер дәлилдер.

Бөйөк философтар, ғалимдарҙың уҡыусылары менән дәрестәрен нисек үткәргәнен хәтерләйек: бөтә дәрестәрҙе лә улар аяғөҫтө тороп үткәргән. Кешегә оҙаҡ ултырыу хас түгел, иң яҡшы идеялар һәм уйҙар ултырғыста йә ҡайҙалыр ултырғанда түгел, ә тап хәрәкәт иткәндә килә.

Шулай уҡ мәктәптәрҙә каллиграфия, таҙа яҙыу предметы булмауы хаҡында ла әйтмәй булмай. Уның урынына бөтә дәрестәрҙә лә перо - ҡауырһынлы ручка менән яҙыу-күнегеү биш минутлығын индереү файҙалы булыр ине. Быңдай ручкалар менән яҙыу ритмы уҡыусының йөрәк тибеше менән тап килә, ә был баланың психик торошона ыңғай тәьҫир итә.

Берҙәм дәүләт имтиханы үткәреү - бары тик 50-гә 50 торошондағы яуаптарҙы һайлап алыу: дөрөҫ таптыңмы - афарин, тапмаһаң - тапшыра алманың. Имтихандарҙы унификациялау, бәлки, һөҙөмтәлелер, ләкин барыһы өсөн дә түгел: стандарттар бер үк булһа ла, методикалар төрлөсә була, тимәк, һөҙөмтәләр ҙә айырыла. Шуға күрә, әгәр беҙ артабан да БДИ ҡулланабыҙ икән - уҡыусы менән әңгәмәләшеү, йәғни уның көслө һәм йомшаҡ яҡтарын билдәләүҙе мотлаҡ индерергә кәрәк: был кластарҙы ошоға ҡарап комплектлауҙы күҙ уңында тота (быны МДУ миҫалында күрергә була).

Физкультура дәресе мәктәптәрҙә аҙнаһына тик ике генә тапҡыр үткәрелә, ә балалар, белеүебеҙсә, көн һайын сәғәттәр буйына дәрестәрҙә ултыра. Әгәр улар шулай парта артында ултырһалар, дәрестәр бөткәндән һуң, һуңғы дәрес итеп, физкультура дәресен өҫтәп ҡуйыу кәрәк.

Шул уҡ ваҡытта шуны аңларға һәм күҙ уңында тоторға кәрәк: малайҙарҙың өлгөрөүе 11 йәштә башлана һәм 14-15 йәшкә тиклем дауам итә. Был арауыҡ ваҡытында үҫмерҙе физик яҡтан көсөргәнешкә күнектереү кәрәк, шул ваҡытта ғына ул үҙ энергияһын үҫешеүгә, физик эшмәкәрлеккә йүнәлтәсәк. Киреһенсә булған осраҡта, үҫмерҙең уйында тик компьютер артында атыш уйындары уйнау ғына була - тимәк, ул менталь кимәлдә үлтерергә өйрәнә. Ә был уның өлгөрөп етмәгән психикаһына аҫтыртын, тыштан күренеп бармаған агрессивлыҡ һеңдерә. Һәм һөҙөмтә булараҡ - Керчь ҡалаһындағы кеүек, төрлө террористик акттар килеп сыға. Әгәр уҡыусы мәктәптәрҙә, һауыҡтырыу комплекстарында спортсылар йәләп ителгән спорт түңәрәктәренә йөрөһә һәм үҫешһә, яҡшы һөҙөмтәләр күтәргә була.

Шулай итеп, беҙ атай-әсәйҙәр һәм йәмғиәт алдында торған күпселек проблемаларҙы хәл итәсәкбеҙ: а) үҫмер тартмай һәм эсмәй - быға ваҡыты юҡ, спорт та мөмкинлек бирмәй; б) ул урамда теләһә ҡайҙа йөрөмәйәсәк - баланың хәүефһеҙлеге тәьмин ителә; в) физик һәм психик яҡтан нығына: сәләмәт тәндә - сәләмәт рух; г) физкультура характерҙы үҙгәртә - сыныҡтыра, тимәк, ул үҙен генә түгел, яҡындарын да яҡлай алаcаҡ; д) интернетта аралашыу өсөн ваҡыт кәмей, йәғни уға ситтән тәьҫир кәмей, ә контентты, баланың нимә ҡарағанын, кем менән аралашҡанын атай-әсәйҙәр, башлыса, контролдә тота белмәй.

Билдәле булыуынса, бала тулы кимәлдә үҫешһен өсөн уға тулы ғаилә, йәғни атаһы ла, әсәһе лә кәрәк. Белеүебеҙсә, улының тәрбиәһе менән атай кеше шөғөлләнә. Психологтар, атай-әсәй айырым йәшәгән осраҡта ла, әсәләргә балаһын күберәк атаһы менән аралаштырырға, баланы ир-егет сифаттарын үҫтереүсе спорт секция-



ларына, ир-егеттәргә хас булған намыҫ, ғәҙеллек, изге күңеллелек тойғоларын үҫтереүсе, төп маҡсаты - хайуани затҡа хас психика тәҙәләшөн кеше психикаһы тибына үҙгәртеү булған спорт түңәрәктәренә йөрөтөргә кәңәш итә.

Беҙ иң мөһимен - малайҙарҙың һәм ҡыҙҙарҙың бер үк материалды үҙләштереүе, аңлауы төрлөсә булыуын күҙ уңынан ысҡындырабыҙ. Күптән түгел үткәрелгән ғилми тикшеренеүҙәрҙә бына нимә асыҡланған: 5-се класта бергә ултырған ҡыҙҙар һәм малайҙар хикәйә уҡығанда материалды төрлөсә үҙләштергән һәм хәтерҙә ҡалдырған. Ҡыҙҙарҙы күберәк әҫәрҙең сағыу, матур, хисле яғы ҡыҙыҡһындырһа, малайҙарҙы күбеһенсә ҡатылыҡ, көс күрһәтеү, намыҫ менән бәйле эпизодтары ҡыҙыҡһындырған. Шуға күрә кластарҙа бөтә уҡыусыларҙы - ҡыҙҙарҙы һәм малайҙарҙы бер тиңгә ҡуйып уҡытырға ярамай. Был уларҙа ҡатын-ҡыҙ һәм ир-егет сифаттары тәрбиәләүгә түгел, ә ниндәйҙер ур-

өсөн төп профессия булараҡ, педагог ир-егет образын пропагандалау, уны йәш үҫмерҙәр аңында формалаштырыу кәрәк. Был йәмғиәттә педагогтың социаль статусын бөтөнләйгә үҙгәртәсәк һәм үҫеп килеүсе быуынға янаған хәүефтәргә кәртә буласаҡ, әлеге көндә килеп тыуған экологик, ижтимағи, сәйәси, геополитик кризистарҙан сығарасаҡ.

Шулай уҡ, элекке заманда булғанса, хәрби хеҙмәткәрҙәрҙеке кеүек, рангылар табеле индереү һәм уларҙы вазифаларға бәйләү кәрәк. Йәш быуынға тәрбиә һәм белем биреү - дәүләт сәйәсәте, ә быны тормошҡа ашырыу уҡытыусылар өҫтөндә булғанға, педагогтар иңендә хәрби хеҙмәткәрҙәрҙеке кеүек үк мөһим вазифа ята. Уҡытыусы - ул дәүләт ойоштороусы һөнәре. Был - нигеҙҙәрҙең нигеҙе. Бөгөн беҙ балаларыбыҙға нимә бирәсәкбеҙ, яҡын киләсәктә тап шуны аласаҡбыҙ.

Илебеҙҙең бөтә студенттарына А.С. Макаренконың бөтә хеҙмәт-

# тиһәң...

тасыллыҡ (Оно) тәрбиәләүгә килтерә!

Икенсе яҡтан ҡарағанда, үтә мөһим аспект - малайҙарҙа ир-егеттәр психотибын булдырыу. Мәктәптәрҙең 99 процентында уҡытыусы-педагогтар - ҡатын-ҡыҙҙар, тимәк, малайҙарҙы ир-егет итеп тәрбиәләү етерлек кимәлдә түгел. Педагог ҡатын-ҡыҙ булғанға күрә, уларҙа күберәк ҡатын-ҡыҙ психикаһы үҫтерелә.

Шуға күрә лә проблемалар килеп сыға: малайҙар үҙҙәрен ҡыҙҙар кеүек, ә ҡыҙҙар малайҙар кеүек тота. Һәм артабан: ир-егеттәр аҡса эшләүҙе ҡатын-ҡыҙ өҫтөнә йөкмәтә һәм үҙҙәре диванда эшһеҙ ултырып ваҡыт уҙғара, ә ҡатын-ҡыҙ барыһын да үҙ өҫтөндә алырға мәжбүр була. Был проблема бик етди һәм уны хәл итергә кәрәк. Ҡытайҙа ла был проблема шулай уҡ етди тора. Унда мәктәптән үк ҡыҙҙар һаны малайҙар һанынан күпкә арта, һәм уларҙа ир-егеттәргә хас сифаттар, ә малайҙарҙа ҡатын-ҡыҙ сифаттары үҫешә. Был проблеманы әлегә хәл итә алмайҙар. Ә беҙ хәл итә алабыҙ!

Проблеманан сығыу юлы берәү - уҡыу-уҡытыу процесына теге йәки был өлкәлә уңышҡа өлгәшкән ир-егеттәрҙе, эшҡыуарҙарҙы, предприятие, КБ, фирма, лабораториялар етәкселәрен йәлеп итеү. Ә улар - мәктәптәргә, юғары уҡыу йорттарына ни өсөн уҡытырға барғанын йөрәктәре менән тойған Уңышлы кешеләр, Ғаилә йәнлеләр, Эшһөйәрҙәр, Атайҙар. Һәм улар ҙур телә менән үҙҙәренең донъяға ҡарашын, ир-егеттәрсә фекерҙәрен уҡыусыларға тапшырасаҡ (педагогик эшмәкәрлек менән шөғөлләнәсәк). Бының менән улар ир-егеттәрҙең маҡсат ҡуя алыуы һәм ҡуйылған маҡсаттарға өлгәшә алыуын иҫбатлаясаҡ, тимәк, авторитет, өлгө буласаҡ.

Педагогик эшмәкәрлектең абруйын күтәреү, юғары уҡыу йорттарына, мәктәптәргә күберәк ир-егеттәр йәлеп итеү маҡсатында хәҙерге көндәрҙә иң кәмендә айына 50 мең һумлыҡ эш хаҡы билдәләү кәрәк, сөнки ир-ат - ғаилә башлығы, ғаиләне ҡарауысы. Шулай уҡ, йәмғиәт киләсәге

тәрен, бигерәк тә "Педагогик поэма", тәрбиә темаһына арналғандарын өйрәнеүҙе мотлаҡ индереү зарур. Бындай хеҙмәттәрҙән уҡыусы милекселек түгел - коллектив, файҙаланыу түгел - ижад итеү, эшһеҙлек түгел, ә хеҙмәт мөһим икәнен аңларға тейеш, сөнки улар буласаҡ педагогтар, атайҙар һәм әсәйҙәр. ЮНЕСКО А.С. Макаренконы донъялағы иң күренекле 4 педагогтарҙың береһе, тип билдәләгәнен онотмайыҡ.

Бөтә юғары уҡыу йорттарындағы барлыҡ педагогтарға ла А.С. Макаренконың ғилми хеҙмәттәрен һәм В.Ф. Базарныйҙың эштәрен өйрәнеү мотлаҡ. Ошоларҙан сығып, мәктәптәргә түбәндәгеләрҙе индереү фарыз:

-һаулыҡ һаҡлаусы технологиялар:

а) канторкалар;

б) ҡауырһынлы ручкалар (перолы);

- физкультура дәресен 5 көнлөк уҡыу аҙнаһында 4 дәрескә тиклем арттырыу;

-ир-егет педагогтар һанын арттырыу;

-кластарҙа айырым уҡытыу;

-уҡыусыларға фактик материалды һәм мәғлүмәтте ятларға өйрәтеү урынына хәҡиҡәтте өйрәнеү методологияһын үҙләштереүҙе төп маҡсат итеп ҡуйыу.

Экзамендар ваҡытында уҡыусыларҙың, студенттарҙың интернеттағы энциклопедик, мәғлүмәти сығанаҡтарҙы ҡулланыу мөмкинлегенән алып, хатта белгескә шылтыратыуға тиклем бөтә уҡыу материалдары булырға тейеш. Уҡыусы ятлап алынған мәғлүмәт күләмен түгел, ә дөрөҫлөктө табыуҙағы ижади потенциалын күрһәтергә тейеш. Педагогтар "тере энциклопедиялар" түгел, ә хәҡиҡәткә ынтылыусы һәм тормошта килеп сыҡҡан хәүеф, проблемаларҙы хәл итергә ынтылыусы ижади шәхес әҙерләүселәр улар.

**Шамил БАТЫРШИН,**
**Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты уҡытыусыһы.**

*АТА-ӘСӘЛӘР ЙЫЙЫЛЫШЫ*

# АҠСА ИҢ МӨҺИМЕ ТҮГЕЛ,

## әммә... аҡсаһыҙ ҙа йәшәп булмай

### Аҡса янсығын өйҙә "онотоғоҙ"

Әле бала һөйләшә лә белмәгән сағынан уҡ үҙе яратҡан тәмле тунңдырма, кәнфиттәләүектәр ҡайҙа һатылғанын яҡшы белә. Һәр әсә, бигерәк тә өләсәйҙәр, баланың һораған тәм-томон, уйынсығын һатып алырға күнегеп китә. Кемдең балаһын ҡыуандырғыһы килмәһен инде! Винкс, Лол ҡурсаҡтары, лего, киндерсюрприздар, сникерстар, таҫмалар, машиналар...

Бәлки сабыйлығыҙҙың холҡо бындай иғтибарҙан боҙолоп та китмәҫ, шулай ҙа ул "нимә һорайым, шуны минә алалар" тигән уйҙы бәләкәй саҡтан аңына һеңдереп үҫәсәк. Әлбиттә, был теләктәр бала ҙурайған һайын үҙгәреп торасаҡ. Иң мөһиме - теләгән нәмәһен шунда уҡ һатып алып, балағыҙҙы хыяллана һәм шатлана белеү тойғоһонан мәхрүм итәсәкһегеҙ.

Тиҙҙән балағыҙ өйҙә ҡунаҡ булғанда йәки телевизорҙа мауыҡтырғыс фильм барғанда ни өсөн ул йоҡларға тейешлеген дә аңламай башлаясаҡ. Китабынан айырып, уны магазинға икмәккә лә ебәрә алмаясаҡһығыҙ. Ҡасан булһа ла балағыҙҙың үҙ мәнфәғәттәренән бер нисек тә баш тартырға йыйынмауын аңлаясаҡһығыҙ.

Ләкин былар киләсәктә буласаҡ. Ә әлегә балағыҙ матур ҡаплы шоколад һатып алмағанығыҙ өсөн магазин уртаһында аҡырып илаймы? Бындай саҡта нимә эшләргә һуң? Был хәлдән сығыу юлы бер генә: урамға сыҡҡанда аҡса янсығын өйҙә "онотоп" ҡалдырыу. Шулай ғына сабыйлығыҙҙы был насар ғәҙәтенән арындыра аласаҡһығыҙ. Әлбиттә, ял көнө паркҡа барғанда балағыҙға байрам яһап алырға ла ярай, тик көн һайын түгел.

### Ғаиләлә кем аҡса һанай?

Ун алты йәшлек ҡыҙығыҙ бер көн килеп һеҙгә "Минең туфлийым 1500 һум тора, ә һин үҙенә 10 меңлек аяҡ кейеме алаһың", тип үпкәһен белдерһә, "Мин кемде үҫтергәнмен!" тип, өмөтһеҙлеккә бирелергә ашыҡмағыҙ. Балағыҙ атаәсәһенең тотонған аҡсаһын һанай башлаған икән, уйланырға урын бар. Иҫегеҙгә төшөрөгөҙ әле: бәлки, һеҙ үҙегеҙ өйҙә бөтә алынған әйберҙәрҙең хаҡы турһында йыш һөйләйһегеҙҙер? Ә бәлки, олатай-өләсәйҙәр "Күпме тора? Иҫең китер!" тип йыш ҡабатлайҙыр. Ҡыҙығыҙға ата-әсәнең сығымы уны бер нисек тә ҡыҙыҡһындырырға тейеш түгеллеген иплән кенә аңлатыу кәрәк буласаҡ.

Әлбиттә, бындай аңлашыуҙарҙан һуң бер аҙ ваҡытҡа балағыҙға нимә булһа ла һатып алыуҙан тыйылып тороғоҙ. Һеҙгә ҡыҙығыҙҙың һүҙҙәре оҡшамаһа, быны ул яҡшы белеп торһон. Был осраҡта "Минә бит эшкә йөрөргә, шуға ла яҡшыраҡ һәм ҡиммәтлерәк кейенергә тейешмен", тип аҡланып маташыу ҙа насар әҙәмтәләргә килтерәсәк.

### Бала үҙе аҡса эшләп ҡараһын

Реклама роликтары һәм телевизорҙа барған шоуҙар үҫмерҙең аңын томалай. Унда күрһәтелгән матур тормошҡа ул шул тиклем ышана, үҙе лә шулай йәшәргә хыяллана башлай.

Рекламаларҙан баланы бер нисек тә һаҡлап булмай. Хатта өйөгөҙҙә телевизорығыҙ боҙоҡ булһа ла, ул был фетиштарҙы ҡайҙан булһа ла ишетәсәк. Уны ярлыҡтар, лейблдар, фирма билдәләре тулыһынса арбай. Бәҡтиһәң, сәстәрҙе фирмалы шампунь менән йыуырға кәрәк, кеҫәңдәге телефондың ҡиммәтле, төрлө функцияларға эйә булырға тейеш, ялдарыңды Мысыр һәм Европала үткәреү дөрөҫ икән. Былай дауам итһә, элек йәй көндәрендә ауылға ҡайтып, олатай-өләсәй янында ял итергә яратҡан балаларығыҙ тиҙҙән һеҙҙең иҫке алтынсы моделдәге машинағыҙға ултырырға ла ояла башлар. Балағыҙҙы ғаиләнең йәшәү кимәле түбән булыуы ла сығырынан сығарасаҡ. Яйлап ҡына "тормошта бер нәмәгә лә өлгәшә алмаған" ата-әсәгә ихтирам кәмей башлай. Мәктәпте тамамлауға бындай "матур тормошта йәшәү өсөн генә тыуған" балаларҙың башында елдәр уйнауы, институтҡа йәки колледжға уҡырға инеү өсөн белеме етмәүе асыҡлана ла инде. Шул саҡта тағы ла ата-әсәгә һуңғы аҡсаларын балаларына репетитор яллау өсөн тотонорға тура килә. Күптәр шулай эшләй ҙә. Әммә быхан үҙегеҙ генә яфаланасаҡһығыҙ. Бала түләп юғары белем алыуҙы шымартылған юлдан "икенсе, яҡшыраҡ" тормошҡа илтеүсе һуҡмаҡ итеп күрә. Уларҙың был иллюзияларын ваҡытында юҡҡа сығарырға кәрәк.

Балағыҙға джинсы һатып алырлыҡ булһа ла аҡса эшләп ҡарарға мөмкинлек бирегеҙ. Ата-әсәһенең "ябай" уҡытыусы, табип, инженер булып эшләүенән ояламы? Шулай булғас, әйҙә, һеҙгә нисек йәшәргә кәрәклеген ул үҙе өйрәтһен. Тик эшенә ҡыҫылмағыҙ, ярҙам да итмәгеҙ, барыһын да үҙе атҡарып сыҡһын.

### Комплекстарыңдан арын

Үрҙә килтерелгән миҫалдар бөтә ғаиләлә лә осрайҙыр, моғайын. Тик бер нәмәгә иғтибар итергә кәрәк: ҡайһы бер ғаиләләрҙә балалар ата-әсәләренең аҙ ғына эш хаҡы алып эшләүенән бер ҙә оялмай, нимәләр таптырып та аптыратмай, киреһенсә, үҫеп етеп, үҙҙәре уларға ярҙам итә башлаясаҡтары тураһында хыяллана.

Бер ғаиләлә үҫеп килеүсе ике бала ла төрлө булыуы бар. Улығыҙ булғанына ла риза, ә ҡыҙығыҙ аҙым һайын илап, "Яңы телефон алмаһағыҙ, алгебранан "икеле"не төҙәтмәйем", тип янай. Ни өсөн шулай килеп сыға һуң?

Тәбиғәттән бирелгән характер үҙенсәлектәре алдында беҙ көсһеҙ. Тупаҫ кеше тупаҫ булып ҡаласаҡ, шулай ҙа уны был насар ғәҙәтенән арындырырға мөмкин, үҙен генә ҡайғыртыусының башҡалар тураһында ла уйларға өйрәтеп була. Нисек тиһегеҙме? Быныңың өсөн үҙегеҙгә үҙгәрергә кәрәк. Әгәр ҙә өйҙә гел атаһының "Эштә ҡәҙеремде белмәйҙәр" тип зарланыуын ишетһә, әсәй кеше иренә уның аҙ аҡса эшләүен, күршеләренең инде өсөнсө машина алыштырыуын көн һайын иҫенә төшөрөп торһа, бала бәләкәйҙән үк ғаиләләге финанс хәлде башҡаларҙыҡы менән сағыштырып анализларға өйрәнеп китә.

Шулай булғас, комплекстарығыҙҙан арынырға кәрәк. Һәр ваҡыт аҡса тураһында ғына һөйләүҙән тыйылып торогоҙ. Аҡса тормошта иң мөһиме түгел икәнлеген яҡшы беләһегеҙ бит. Шулай уҡ бөтә ғәйепте рекламаға, заманға япһарып ҡуймағыҙ. Тәрбиә ғаиләлә башлана, һеҙ ниндәй - балаларығыҙ ҙа шундай, быны бер ваҡытта ла онотмағыҙ.

**Ләйсән ДАЯНОВА әҙерләне.**

***✓ Яугир ҡәүемдең хөкүмәте үҙ халҡының ғәскәренә бурлат ҡыҙыл төҫтәге хәрби байраҡ тапшыра, һәм полковник Миңлеғәли Шайморатов, бер тубығында торған килеш, уның ебәк туҡымаһының ҡырыйын үбә.***



ХӘТЕРКИТАП

**1942 йылдың 4 авгусында республиканың "Красная Башкирия" гәзитендә Константин Симоновтың "Башҡорт дивизияһында" очеркы баҫыла. Яҙыусы-яугир Әхтәм Ихсан Симоновтың был очеркты яҙыу тарихы тураһында түбәндәгеләрҙе һөйләй: "1942 йылдың 25 июле. 275-се кавалерия полкы командиры Таһир Таип улы Кусимов һәм полк комиссары Сәғит Рәхмәт улы Әлибаев ныҡлы итеп эшләнгән блиндажда кисәге ҡыҫҡа, әммә ауыр һуғыш йомғаҡтарын тикшерә. Ҡапыл блиндажға һаҡсы йүгереп инә һәм юл буйлап һыбайлылар сабып килеүе хаҡында хәбәр итә. Беренсе булып блиндаж янына полковник Миңлеғәли Шайморатов килеп етә. Ә бейек ҡола атта кем һуң? Атта бик оҫта ултырыусы - билдәле яҙыусы Константин Симонов була.**
**"Красная Звезда" гәзитенең махсус хәбәрсеһе Константин Симонов Башҡорт кавалерия дивизияһына, үҙе әйтмешләй, бөйөк һуғыш яланында Башҡортостандың ҡыйыу улдарының хәрби эшмәкәрлеге менән танышырға килә. Константин Симонов дивизияның барлыҡ частарында ла була, һалдаттар, эскадрон командирҙары менән осраша. Айырыуса майор Нафиҡовтың кавалерия полкында оҙаҡ туҡтала.**
**Константин Симоновтың "Башҡорт дивизияһында" очеркы бөгөн дә шайморатовсыларға гимн булып яңғырай".**
**1977 йылда Константин Симонов үҙенең Әхтәм Ихсанға адресланған хатында былай тип яҙа: "35 йылдан һуң да ул героик осорҙо һәм башҡорт халҡының героик улдарын хәтерләйем. Уларҙың барыһына ла - тереләренә лә, һәләк булғандарына ла - дан! 1942-1977. Константин Симонов".**

# БАШҠОРТ ДИВИЗИЯҺЫНДА

*Алыҫтарҙан ағарып,*
*ай күренә*
*Ирәндеккәй тауҙың*
*аҡ ташы.*
*Ҡайҙа ла ғына бармай,*
*ниҙәр күрмәй*
*Ир-егеткәй менән ат башы.*

Урта рус далаһы өҫтөнән күкрәктән урғылып сыҡҡан оҙон көй ағыла. Ҡояшта йылынған әремдәр әскелтем еҫ тарата, дала сәскәләре хуш еҫен бөркә. Янып һарғайған үләндән яңы сабылған бесән еҫе килә.

Йыр дала юлы кеүек оҙон, һәм даланың үҙеләй киң.

Алыҫта, тыуған ерҙәренән мең саҡрымда ятҡан Воронеж далаһында, эҫе ҡояш аҫтында, башҡорт егеттәре үҙҙәренең боронғо "Урал" йырын һуҙа. Улар күҙәтеү пункты янындағы тар ғына уйһыулыҡта ултыра, эргәләрендәге тәрән "ҡарлуғас ояларынан" танкыға ҡаршы ата торған мылтыҡтарҙың оҙон көбәктәре һерәйеп тора. Яҡында, ваҡ дала ҡыуаҡтары менән ҡапланған тәрән тарлауыҡта, коноводтар ҡарамағындағы аттар утлап йөрөй. Төшкөлөккә хас томра, тынлыҡ. Тик һул яҡта, тылға илтеүсе юл буйында һирәк-һаяҡ миналар шартлай, һәм кипкән эҫе ерҙән туҙан болото күтәрелә.

Рус еренең азатлығы өсөн Пугачев менән яуға күтәрелгән Салауат Юлаев бүләләре яңынан Пугачев бүләләре менән йәнәш үҙ ватанының азатлығы һәм намыҫы өсөн алыша - Ғарифулла Ғафаровтың Урал тауҙары төбәгендә, Өфө янында бер генә тыуған өйө булһа, барса совет кешеләренең берҙән-бер һәм барыһына ла тиң бөйөк ватаны - Рәсәй бар.

Өфөнөң киң майҙанында, март айының шығырлап торған һыуығында, башҡорт кавалерия дивизияһы полктары тын ғына атлы стройҙа тора. Ауыҙлыҡтар сыңлап китә, һәм аттар, тояҡтары менән ҡарҙы шығырлатып, аяҡтарын алмаш-тилмәш ҡуҙғатып ҡуя. Яугир ҡәүемдең хөкүмәте үҙ халҡының ғәскәренә бурлат ҡыҙыл төҫтәге хәрби байраҡ тапшыра, һәм полковник Миңлеғәли Шайморатов, бер тубығында торған килеш, уның ебәк туҡымаһының ҡырыйын үбә. Ул рус армияһында 25 йыл хеҙмәт итте, күп телдәрҙе өйрәнде һәм хөкүмәт, ватан һуғышы көндәре еткәс, башҡорт егеттәренең 1-



*Һүрәттә: һулдан икенсе - М.М. Шайморатов, уртала - К.М. Симонов.*

***"Корреспонденцияларымдың береһе үҙ ирке менән төҙөлгән Башҡорт дивизияһы кешеләренә һәм шул дивизияның командиры, ҡаҡшамаҫ абруйлы полковник Шайморатов тураһында ине".***

*Константин Симонов. "Разные дни войны. Дневник писателя" китабынан.*

се Милли дивизияһы командиры итеп ҡуйып, уға хөрмәт күрһәтте.

Полковник менән бергә байраҡты кисәнге партия райкомы секретаре, дивизия комиссары Мөбәрәк Нәзиров ҡабул итте. Өлкә комитеты пленумдарында, боҙланып бөткән төҙөлөш баҫмаларында, урман ҡырҡыусыларҙың һалҡын барактарында осрашҡан кешеләр хәҙер бына ошо майҙанда, полктар алдында тора. Командирҙары янында республика яуға ебәргән һыбайлы комиссарҙар урын алған. Бында элекке мәғариф наркомы Әлибаев та, урман наркомы Сәйетғәлин дә, комсомолдың өлкә комитеты секретаре Абдуллин да бар ине. Халыҡ үҙ ғәскәрен һуғышҡа әҙерләне, һәм уның иң аҫыл улдары полк комиссарҙары һәм политруктар булып китте. Бер эскадрондың һул яғында дуплы ҡыҫҡа туны өҫтөнән "лейка" тағып алған һыбайлы тора. Был фототрестың элекке директоры, доброволец Яҡупов ине.

Һәр ысын халыҡ эше кеүек, дивизияны төҙөү тарихы ябай һәм бөйөк булды. Башҡорт халҡы үҙ кешеләренән, үҙ тәьминәте, үҙ ҡулдары менән үҙенең милли дивизияһын булдырырға теләне. Сталин халыҡ теләген ҡәнәғәтләндерҙе, һәм район комиссариаттарына йөҙәрләгән ғаризалар ағылды. Башҡорт колхоздарында егеттәр өсөн иң яҡшы аттар һайлап алынды, тегенселәр обмундирование текте, тире иләүселәр тун дупланы, оҫталар эйәр эшләне. Илле градусҡа еткән аяуһыҙ себер һыуыҡтарында полктар оҙайлы ҡышҡы учениеларға сыҡты, ҡар өҫтөндә йоҡланы, урмандарҙы төтәтеп, усаҡтар яҡты. Бөтөн ҡыш буйына халыҡ һуғыш һөнәренә өйрәнде, һәм бына март айы еткәс, шығырлап торған плацта аттар бейеп тора, елдә байраҡ талпына, һәм иртәгә, тәгәрмәстәр шаҡылдауы аҫтында, эшелондар көнбайышҡа, изге һуғышҡа китер.

Эҫелектән иҙрәгән июль көндәре. Артта, алыҫта ҡалды Урал. Тар ғына дала йылғалары ярҙарында баҫышып килеүсе немецтар менән ҡан ҡойғос алыштар бара. Фронттың был участкаһында немецтар туҡтатылды, әммә һуғыштың тынғаны юҡ. Һәр бер көн һәм һәр төн яңы ҡорбандар килтерә. Ауылдар ҡулдан ҡулға күсә, ә төндәрен офоҡ өҫтөндә шәфәҡ ҡалҡа. Унда башҡорттар аттарында ла, йәйәүләп тә һуғыша.

Күптәр юҡ хәҙер, полк командиры майор Нафиҡов та тыуған Башҡортостанына ҡайта алмаҫ инде. Кискә табан ул дивизия штабына сабып килгәйне. Полковник Шайморатов уға приказ тотторҙо һәм, үҙенең һөйөклө офицерын оҙатып, артынан оҙаҡ ҡына ҡарап торҙо. Нафиҡов үҙенә бүләк итеп бирелгән туратын шпорланы, һәм уның таштарға тейеп шаҡылдаған тояҡтары аҫтынан туҙан ҡубып ҡалды. Күк йөҙөн болоттар ҡаплап алды, һәм, эңерҙең нисек төшөүенә ҡарағанда, төндөң дә ҡором ишеләй ҡара булыры тоҫмалланды. Сылбырҙай һуҙылып китеп, дивизия немецтарҙы беҙҙең танкылар килгәнсе тотҡарлап торҙо. Тотҡарлау өсөн алышҡа инергә, алышҡа ингәс - атакаға күтәрелергә лә кәрәк. Полковник Нафиҡовҡа төнгө атака менән немецтар ҡулында булған ауылға бәреп инергә бойоролғайны.

Полк һөжүмгә күтәрелер өсөн тупланған сауҡалыҡ менән немецтар биләгән ауыл араһында биш саҡрымдай арыш баҫыуы ята. Сәғәт туғыҙынсы китеүгә ҡараңғы төштө. Полк атакаға күтәрелде. Киң арыш баҫыуы буйлап немец автоматчиктары һибелгән. Йә уларға төҙәп ата-ата, йә тауыштынһыҙ ҡорос менән йәндәрен алып, башҡорттар ауылға бәреп инергә тырышты.

Бындай төндә идара итеү ҡыйын. Полктың подразделениелары төн ҡараңғылығында һулдан һәм уңдан урап барып, күрше ауылдарҙы һәм шундағы сауҡалыҡ буйҙарын биләне, ә Нафиҡов үҙе иллеләгән яугиры менән ауылға бәрәп инде. Был төнгө һөжүм үҙенең көтөлмәгәнлеге менән аяуһыҙ һәм хәтәр ине. Ауыл урамдарында обоздар, артиллерия өймәкләнгән. Немецтар өй сарҙаҡтарынан, ҡапҡа аҫтарынан ата, һарайҙарға инеп боҫа, арыш араһына тарала, атылған-сабылғандары ҡара урамдарҙа тын ята. Гранаталар шартлаған саҡта бер мәлгә генә өйҙәр күренеп ҡала, ярсыҡтар зыулай, аҡтарылған тәгәрмәстәр һауаға оса. Ватыҡ йөк арбалары юлға кәртә булып ята. Төп урамда механизмдары шартлатылып эшлектән сыҡҡан дүрт ауыр туп күренә.

Ауылда төн буйына ҡул һуғышы тынманы. Бер төн эсендә дүрт йөҙ немец үлтерелде. Нафиҡов отрядының бер өлөшө улар янына ауҙы. Тик яҡтыра башлағас ҡына ауылда дүрт йөҙ, биш йөҙ ҙә түгел, ә меңдән ашыу немец булғанлығы беленде. Һәм Нафиҡовтың тере ҡалған утыҙ яугиры немецтарҙың бында меңләп булыуын күргән кеүек, мең немец та ауылда бары утыҙлап кавалерист барлығын аңланы. Немецтар бар ерҙән дә һибелеп сыға башланы - сарҙаҡтарҙан, подвалдарҙан, ихата арттарынан. Иртәнге томан эсенән туҡтауһыҙ тырылдашҡан автомат тауыштары ишетелә ине. Нафиҡов нисек итеп булһа ла ҡамауҙы йырып сығырға булды.

Ауыл урамдарында яңынан ҡул һуғышы башланды. Нафиҡов яугирҙарға, яралыларҙы бер түңәрәккә алып, немецтар булмаған һуңғы тыҡрыҡ аша сигенергә бойорҙо, ә үҙе бер нисә автоматчигы менән уларҙы ҡаплап торорға булды. Немецтар аҫтан да, өҫтән дә, бар яҡтан да ата бирҙе. Уның янындағылар кәмегәндән кәмене. Ниндәйҙер немец автоматчигы артҡы яҡтан уның арҡаһына атты. Автоматчикты атып йыҡтылар, әммә яраланған Нафиҡовҡа атлауы ауырлаша барҙы. Ул, ауыр тын алып, атыша-атыша, хәл алыр өсөн туҡтай-туҡтай бара бирҙе. Тамағы кипте, һыу эскеһе килде...

Урамдар иртәнге яҡтылыҡҡа күмелде. Командирҙың ҡаплауы аҫтында сигенеп барған яугирҙар төркөмө ауылдан арыш баҫыуына сығып өлгөргәйне, һәм улар сағыштырмаса хәүефһеҙ хәлдә ине. Әммә уның үҙенә иҫән ҡалғандар менән тағы ла бер нисә йорт аша үтергә кәрәк ине, ә атлауы ауырлаша барҙы. Ул ҡанһырай башлағайны инде. Бер мәлдә уның янында ни барыһы ике генә автоматчик - Әпсәләмов һәм Юлдашбаев тороп ҡалды. Улар әсиргә алынған немец офицерын да үҙҙәре менән алып бара ине. Майор бөтөнләйгә ҡанһыраны, ул инде бер нисә мәртәбә йығылып, яңынан торҙо.

Башҡаса әмәл ҡалманы. Яугирҙар хәлһеҙләнгән майорҙы ҡулдарына алып, атлай бирҙе.

Ауыл осондағы өй мөйөшө артынан йүгерешеп килеп сыҡҡан немецтар, уларға терәп тигәндәй, автоматтарынан ут асты. Өсөһө лә ергә ауҙы, һәм автоматын ҡулынан ысҡындырмаған майор, тешен шығырлатып, уны ялалы ҡулына терәп, яткан көйө бер нисә очередь бирҙе. Үлеп барһа ла, һаман алышырға көс тапты. Немецтар йығылды. Әпсәләмов менән Юлдашбаев майорҙы янынан күтәрә биреп, алып китте. Ул атыша алһа ла, атлар хәле юҡ ине инде. Бер минуттан уға тағы ла бер пуля ҡаҙалды. Ул яугирҙарҙың ҡулында хәрәкәтһеҙ ҡалып, һәленеп төштө. Улар уның тынып ҡалған кәүҙәһен арыш баҫыуы, тәрән дала йырындары аша алып китте. Әгәр юлдарында һуҡмаҡ ситендә ятҡан, ауыр яраланған лейтенант Нәзиров осрамаһа, командир кәүҙәһен үҙебеҙҙекеләргә тиклем килтереп еткерер ҙә ине. Нәзиров ыңғыраша, һаташа ине. Улар икәүһен дә алып китә алмай ине, һәм майорҙы нисек кенә яратмаһындар, терене үлгәндән өҫтөн итергә тура килде. Улар майорҙың кәүҙәһен йырын төбөнә һалып, сит-ят күҙҙәрҙән ышыҡлап, өҫтөн ҡыуаҡ ботаҡтары һәм башаҡтар менән ҡаплағас, пулялар аҫтында эйеләбөгөлә, ялалы лейтенантты ары алып китте.

Төнөн Әпсәләмов менән Юлдашбаев, өс разведчик менән дошман сылбыры аша үтеп сығып, командирҙарының кәүҙәһен алып ҡайтырға китте. Улар уны беренсе төндә таба алманы, икенсе төндә лә тапмай ҡайтты, ә өсөнсө төнгә ҡаршы нисек итеп булһа ла табырға ҡарар итте. Әгәр кешеләр шундай ҡарарға килә икән, улар уны үтәй ҙә. Һәм улар тап шулай эшләне лә.

Батырҙар хаҡындағы боронғо әкиәттәгеләй, был алыш шулай тамамланды. Нафиҡов һәләк булды, әммә уның күршеһе һәм дуҫы, күрше полк командиры майор Таһир Кусимов киләһе төндә үк тар ғына дала йылғаһы кисеүе янында үҙе һәм үҙенең дуҫы өсөн немецтар менән алышҡа сыҡты. Был йылғасыҡ йылға тип аталған хәлдә лә, даланың әсәлектән ҡыҙған көндәрендә ошо йылға аша тауыҡ кисеп сығарлыҡ булһа ла, немецтар уның аша сығға алманы. Уларға хатта көндөҙөн дә, төнөн дә кисеүҙең ниндәй булыуын разведкаларға мөмкинлек бирелмәне. Улар, йылға тәрән икән, тип уйлап, кәмәләр менән сығырға маташты. Уларҙың һауа өрҙөрөп тултырылған кәмәләренең утка тотоуҙан өҙгөләнеп бөткән резиналы киҫәктәре яр буйҙарында ятып ҡалды. Шул саҡта немецтар бер юлы бер нисә урындан йылға аша сығырға тырышып ҡараны. Майор Кусимов бар урында ла уларҙан көсһөҙөрәк ине, әммә ул тик бер урында өҫтөнлөк алып, енеп сығырға ҡарар итте. Ул, үҙ тирәһендә барлыҡ атлыларын, разведчиктарын туплап, үҙе немецтарға ҡаршы һөжүмгә ташланды. Немецтар ошо йылғасыҡ аша сыға алманы, уның ярҙарын мәйеттәре менән түшәне.

Аяуһыҙ алыштарҙа үтте июль. Автоматчиктар взводы командиры Кәрим Нарбеков төндәрен өс-дүрт разведчик менән йылға аша сыға ине. Тиҫтәләгән немецты атыпкиҫеп, ҡай сағында "тел" алып, ҡайны саҡта унһыҙ ҙа, таң атыуға үҙ яғына ҡайтып етә инеләр.

Аяуһыҙ алыштарҙа үтте июль. Артиллерия күкрәп торҙо, туҙанлы юлдарҙан танкылар шыуышты, әммә тиҫтәләрсә башҡорт бронебойщиктары, шул иҫәптән колхоз хисапсыһы Ғарифулла Ғафаров та, уларҙы үҙҙәренең "карлуғас ояларында" ҡымшанмай ҙа ҡаршыланы. Үҙенә алдан әҙерләнеп торор өсөн ваҡыт етмәгән, һәм уның үҙ ҡулдары тарафынан ҡаҙылмаған, артыҡ тәрән булған окопта тороп ҡалған бер мәлдә Ғафаров яҡынлашып килеүсе танкыны күреп ҡала. Ул, яҡшыраҡ күренһен, тип, окоптан мылтығын алып, өҫтәл һымаҡ тигеҙ дала еренә сығып ята. Ата-ата үкереп килгән танк йөҙ аҙымға тиклем яҡынлашыу менән беренсе атыуҙан уҡ уны яндыра. Танк эсендә снарядтар шартлай, ә еңелгән дошманынан йөҙ аҙым ғына ерҙә ятҡан Ғафаров үҙ-үҙен ғүмерендә тәүге тапҡыр баһадир итеп тоя ине...

Аяуһыҙ алыштарҙа үтте июль. Немец разведчиктары төнөн ҡыуаҡтарҙа шундай яҙыуҙар ҡалдыра ине: "Рус, әйҙә төнөн атышмағыҙ һәм беҙгә килмәгеҙ, беҙ ҙә шулай итербеҙ". Улар төнөн үҙҙәрен йә атып, йә тамаҡтарына ҡыҫҡа хәнйәр тығып китерҙәр, тип ҡурҡа ине. Уларҙың нервылары ҡуҙғый, ҡараңғы төшөү менән автоматтары ашығыс һәм туктауһыҙ тырылдаша башлай. Уларҙың позициялары алдында шахмат тәртибендә миналар ярыла. Әммә нәфрәт көндөҙөн дә, төнөн дә ал-ял белмәй. Һәм ҡараңғы төшөү менән тауыш-тынһыҙ башҡорт разведчиктары яңынан ҡыуаҡтар һәм йырындар аша шыуыша. Иртә менән немец окопрарында инде бер ни ҙә аңлата алмаған мәйеттәр ятып табыла.

Кис етеп килә. Шайморатов штабының одеял менән ҡапланған тәҙрәләре янында командирҙар картаға төбәлгән. Улар сираттағы төнгө атака планын тикшерә. Лампаның һүрәнерәк нурҙары уларҙың киң һөйәкле бронза төҫөндәге йөҙҙәрен яҡтырта. Ә ауыл артындағы быуала, һыу өҫтөндә киске оҙон күләгәләрен сағылдырып, атта һыбай ултырған көйө, шәрә кавалеристар һыу инә. Урал ауылдарының күнелсәк егеттәре улар, һыу һибешәләр, һыҙғырышалар, айһайтлап ҡысҡырышалар. Улар шат күңелле, аяуһыҙ алыш барған көндәрҙә һуғышты оноттора алған бер генә минут булыуына ла ҡыуана ине.

**Константин СИМОНОВ.**
**Хәрәкәттәге армия.**
**1942 йылдың 31 июлендә "Красная звезда" гәзитендә баҫылған очерктың төп нөсхәһенән Бәҙри ӘХМӘТОВ тәржемә итте.**

*ЗАУЫҠ*



*Ринат СӨЛӘЙМӘНОВ*

# ҠОШ ЮЛЫ

**(Поэма)**

## I

Айға беренсе булып,
Америктар баҫҡан тип,
Сикһеҙ йыһан серҙәрен,
Кешелеккә асҡан тип,
Күпме тылҡыһағыҙ ҙа,
Килешмәйем, йәмәғәт.
Ер низағҡа тулһа ла,
Шөкөр, рухым сәләмәт!

Айға беренсе булып,
Башҡорт рухиәте баҫҡан.
Ана, Зөһрә ҡыҙ тора
Айлы көйәнтә аҫҡан.

Һалҡын айға Иҙелдән
Тере һыу алып менгән.
Халҡыбыҙ хазинаһын
Осормайыҡсы көлгә.

Айҙағы Зөһрә ҡыҙ
Халҡыма маяҡ кеүек.
Аңды сафландырырға
Бер рухи мая кеүек.
Зөһрә ҡыҙ халҡыма
Рухани әсә кеүек.
Ҡара төндә юлына
Яҡты нур сәсә кеүек.

Йыһанға тәүге булып,
Гагарин осҡан тиеп,
Йондоҙҙарға яҡындан
Ул тәү ҡуҙ ҡыҫҡан тиеп,
Күпме тылҡыһағыҙ ҙа,
Килешмәйем, йәмәғәт.
Ер афәткә тулһа ла,
Хәйер, рухым сәләмәт.

Йыһанға тәүге булып,
Алып сүмесе осҡан.
Күктәге йондоҙҙарҙы
Алып сүмесе һоҫҡан.

Ул сүмес менән Зөһрә
Күнәктән һыу эскәндер.
Йыһан баҡсаһындағы
Йондоҙ-сәскәләргә лә
Иҙел һыуын сәскәндер.

## II

Йыһан...
Ғәләмәт серле йыһан
Башҡорт рухына тулы.
Ана, сикһеҙ киңлектә
Һыҙылып киткән Ҡош юлы.

Ул - сыңрау торналарҙың
Йондоҙға әүерелгән
Ҡауырһын-ҡанаттары.
Дауылдарҙа аҙашҡан
Торна балаларына
Йүнәлеш-талаптары.

Ҡош юлы...
Башҡорт рухи күгендә
Һыҙылып киткән Ҡош юлы.
Урал батырҙан булған
Ҡош юлының баш юлы.

Ҡош юлы...
Ҡош юлына
Эйәрәйек туғандар.
Торналар Ҡош юлынан
Юлын табыр булғандар.

Аҙаштырмаҫ Ҡош юлы
Сыуалышлы заманда.
Күпме йән яһилланып,
Ҡайнай утлы ҡаҙанда.

Башҡорт рухи күгендә
Һибелеп киткән ҡауырһын.
Уларҙың яҡтыһында
Үҙ юлыңды табырһың.

Ана, бер ҡаурый,
Ана, икенсе,
Ете... туғыҙ, ун...
Һәр ҡауырһындан
Урғыла бер моң.

Был Бабич ҡауырһыны,
Ә был - Салауаттыҡы.
Анау бик сағыу янған
Ҡанат - Аҡбуҙаттыҡы.

Алыҫтарҙан нурлана
Аҡмулла аманаты.
Дауыллап ҡуймаҫ тимә
Шүлгәндең яманаты.

Барыһынан яҡтыраҡ
Балҡый Урал йондоҙо.
Башҡорт ынйыларынан
Биҙәүле рух көмбәҙе.

Ана, баҙланып балҡый
Зәки Вәлиди нуры.
Рух күгенән маташалар
Ул ҡауырһынды һурып.

Ҡош юлына теҙелгән
Ыласын ҡанаттары:
Алдар, Ҡаһым, Мусалар,
Шайморат һалдаттары.

Ана-а-а, рухи көмбәҙҙә
Рәшит Назаров нуры.
Йыһан үҙе йыр яҙа
Уның ҡаурыйын һурып.

Был Мостай ҡауырһыны,
Бынһы Рәмиҙеке.
Исемләү мотлаҡмы ни?
Барыһы ла беҙҙеке!

## III

Йәш быуын Ҡош юлынан
Юлын табырға тейеш.
Йондоҙ-ҡауырһындарҙың
Затын танырға тейеш.

Ҡош юлы - ул изге юл,
Аҙаштырмаҫ дауылда.
Быуаттарҙа сыныҡҡан
Исемдәр бар ул юлда.

Дауыллы заманалар
Милләтте тарҡатҡанда,
Берәүҙәр ерен һатып,
Берәүҙәр тел һатҡанда,
Өр-яңыса "ҡош юлы"н
Берәү төҙөп ятҡанда,
Уралымдың таңдары
Көнбайыштан атҡанда,
Ҡош юлына эйәрмәй
Их, аҙашыусылар күп.
Замана тәхетендә
Их, алдашыусылар күп.

Арҡысаҡ йондоҙолай
Арҡыс-торҡос йондоҙҙар
Башҡорт күген ҡаплаһа,
Ыуыҙ быуын аҙашып,
Бәхет юлын тапмаһа,
Уралымдың таңдары
Көнсығыштан атмаһа,
Илем менән ни булыр?
Телем менән ни булыр?

Ҡош юлы - бәхет юлы,
Унда бар булмышыбыҙ.
Уралда тамырыбыҙ,
Уралда һулышыбыҙ.

## IV

Зөһрә ҡыҙ Ҡош юлынан
Агиҙелгә төшкәндер.
Көйәнтәләп һыу алып,
Бер ынтылып эскәндер.

Эскәндер ҙә, зарланып,
Ҡабат айға менгәндер.
Буш күнәктәрен генә
Көйәнтәгә элгәндер.

Хәҙер үҙ күҙ йәшенән
Күнәктәре тулалыр.
Тулышып еткән айым
Бигерәк бойоҡ шуғалыр.

Әсә йәнле Зөһрә ҡыҙ
Нурландыра Ҡош юлын.
Зарлана күргән һайын
Бик күптәрҙең буш юлын.

Ҡош юлы - бәхет юлы,
Ҡояшҡа илтер һуҡмаҡ.
Бөгөн беҙгә шул көйгә
Эйәреп китеү мотлаҡ.

Ҡош юлы - тәртип юлы,
Унда бар асылыбыҙ.
Сит-ят "киммәттәр"енән
Аҙыуҙан баҫылығыҙ.

Ҡош юлы бит рухани
Ынйыларҙан туҡылған.
Уға һаҡһыҙ ҡараштан
Һауала ай тотолған.

Башҡорт тамғалы айым
Рухани әләм кеүек.
Ай тотолған төн беҙгә
Киҫәтеү-сәләм кеүек.
Зөһрә ҡыҙҙың йөҙөндә
Тотош бер ғәләм кеүек.

Асылын тапмайынса
Аҙашыусылар байтаҡ.
Юл алырға ваҡыттыр
Изге Ҡош юлын байҡап.

## V

Башҡорт рухи күгендә
Олатайҙар исеме
Ҡош юлын хасил иткән.
Беҙгә шул ҡаурыйҙарҙың
Балҡышы ышығында
Йәшәргә насип иткән.

Дауыл ҡуптарыусылар
Әле лә сығып тора.
Уларға Дим талынан
Киҫелгән сыбыҡ тора.

Ҡош юлы - тарих юлы,
Дәүерҙәргә тоташҡан.
Һауалағы Ҡош юлы,
Ҡәүемемдең Ҡош юлы -
Маҡсаттары оҡшашҡан.

Бөгөн илаһи юлды
Дауам итеүселәр ҙә бар.
Башланып торған дауыл
Яуын этеүселәр ҙә бар.

...Әбүзәр, Үтәбайҙар,
Лариса, Зөлфиәләр... -
Халҡым рухын һаҡлаған
Ил йәнле әүлиәләр.

...Гөлназдар, Шәрәфиҙәр,
Хисмәттәр, Тамаралар... -
Улар барҙа ныҡ торор
Рухани манаралар.

Бөгөн һауаплы юлға
Эйәреүселәр ҙә бар.
Ул юлдың тамағына
Терәлеүселәр ҙә бар.

Ҡош юлы - дауамлы юл,
Еремдә инештәре.
Ҡош юлын баҙландыра
Уралда сәскә атҡан
Мөхәббәт емештәре.

Ҡош юлынан барыусы,
Башҡорт ҡотон һаҡлаусы,
Зөһрәләр, Алыптар
Сығыр беҙҙең халыҡтан!

✓ *Үлән сәйенең составы, һәр кемдең тәжрибәһенә ҡарап, төрлөсәрәк булырға мөмкиндер. Ләкин минең өсөн шифалы үләндәрҙең төрлө урындан - ете соҡор буйынан йыйылған булыуы әһәмиәтле һымаҡ, сөнки ете сакраль һан бит.*



ИНТЕРНЕТТАН



# КӨҘҘӨҢ ҮҘ ТӘМЕ

■ Табип-диетологтар билдәләүенсә, ҡәһүә - ямғырлы көндә йоҡо килеп торғанда эсә торған эсемлек. Уны йәшел сәй менән дә алыштырырға була, сөнки унда ла кофеин күп. Әммә йәшел сәйҙе барыһы ла үҙһенмәүе бар. Ә ҡәһүәнең еҫе генә ни тора! Ул, ысынлап та, сәғәт тирәһенә етерлек энергия бирә. Ҡәһүәнең кире яҡтары ла бар. Мәҫәлән, ул организмдан кальцийҙы сығара, шуға ла өлкән йәштәге ҡатындарға уны һөт менән эсеү мотлаҡ. Юғары ҡан баҫымы булғандарға ҡәһүә тыйыла тиһәләр ҙә, һүҙ уның әле генә тарттырылғаны тураһында, ә магазинда һатылған ирей торған эсемлектең артыҡ зарары юҡ. Тик хроник арыу кисергән, күптән ялда булмағандарға ҡәһүә насар тәьҫир итә. Улар уның файҙалы яғын тоймай ҙа, киреһенсә, ҡәһүәнән баш ауыртыуы, йоҡоһоҙлоҡ башланыуы ихтимал.

■ Алабама университеты хеҙмәткәрҙәре асыҡлауынса, кешенең рационы һәм психик торошо араһында тура бәйләнеш бар. Бөтөн донъя сәләмәтлек ойошмаһы статистикаһына ярашлы, иң киң таралған психик тайпылыштарҙың береһе - депрессия. Был диагноз күпселек кешелә осрай һәм белгестәр уның төп билдәләре тип насар кәйеф менән тормоштан ҡәнәғәтлек алыу һәләтен юғалтыуҙы атай. Бөгөнгө көндә иң ҡурҡынысы шул, депрессия үҫмерҙәрҙә йыш осрай. Улар ҡатнашлығында тикшеренеүҙәр үткәргәндән һуң, белгестәр күптәренең рационына калий етешмәүен, ә натрийҙың артыҡ булыуын асыҡлаған. Был үҫмерҙәрҙең артыҡ әшкәртелгән ризыҡ менән тукланыуы, емеш-еләк, йәшелсә ашамауы тураһында һөйләй. Белгестәр уларға калийға бай ризыҡтар - картуф, шпинат, томат, банан, әфлисун, авокадо ашарға кәңәш итә.

■ Роспотребнадзор уҡыу йылы алдынан балаларға прививка яһарға ҡуша. Был хәүефле инфекциялар менән зарарланыу хәүефен түбәнәйтәсәк. Һүҙ быума йүтәл (коклюш), һын ҡатыу ауырыуы (столбняк), дифтерия, ҡыҙылса (корь), ҡыҙамыҡ (краснуха), эпидемик паротит тураһында бара. Шулай уҡ йыл һайын киҙеүгә ҡаршы прививка эшләү кәңәш ителә. Быума йүтәл, мәҫәлән, һауа юлы менән күсә һәм үпкәләр шешеүенә килтереүе бар. Ауырыу кеше сирҙе прививкаһы булмаған 100 кешегә йоҡтора ала. Ул ауырығанының 1-се көнөнән алып 30 тәүлек дауамында башҡалар өсөн хәүеф сығанағы. Рәсәйҙә был сир менән ауырыусыларҙың яртыһы - 3-14 йәшлек балалар.

■ Көҙгә миҙгелдә ҡабаҡ, слива һәм груша ашағыҙ, тип кәңәш итә диетологтар. Ҡабаҡ бета-каторинға бай, был уға сағыу төҫ бирә һәм А витамины сығанағы булып тора. Был берләшмә күҙҙәрҙең, тиренең һәм лайлалы тиресәнең сәләмәтлеге өсөн генә түгел, ә вирустарға ҡаршы тороу өсөн яуаплы. Ҡояшлы көндәрҙә А витамины тире яман шеше һәм меланоманан һаҡлай. Ҡауында калий күп, ул организмдан артыҡ һыуҙы сығара, йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен булдырмай. Ул юғары ҡан баҫымы менән яфаланыусылар өсөн иң кәрәкле йәшелсә. Ҡауынға нимдәй ҙә булһа май өҫтәү кәрәк, аҡ май, үҫемлек майы, ҡаймаҡ, йогурт, туңдырма бета-каротин үҙләштерелеүенә булышлыҡ итә. Сливала С витамины менән бер рәттән, антиоксиданттар бар. Грушаны ас ҡарынға ашарға ярамай, ул калий, магний һәм эсәктәрҙе таҙартыусы пектинға бай.

ДОНЪЯ БЫЛ!

**Киң мәғлүмәт саралары аша көн дә төрлө үлем осраҡтары хаҡында ишетеп торабыҙ. Кемдер ҡартайып, 80-90 йәштәргә етеп вафат була, ә кемдәрҙер был донъянан йәшләй генә китеп бара. Бәгзеләр ниндәйҙер бер сир арҡаһында үлә икән, икенселәр һәләкәттәргә юлыға. Ғөмүмән, кеше үҙ гүмере - мәңгелек түгел. Һәр кемебеҙгә ғүмер оҙайлығын да Аллаһы Тәғәлә тәҡдир итеп яҙған, йәғни барыбыҙ ҙа ана шул әжәл еткәнсе йәшәйбеҙ инде. Бөгөнгө һүҙем үлемдең сәбәптәре, уларҙы иҫкәртеү хаҡында ла түгел, ә ана шул төшөнсәгә үҙебеҙҙең ҡарашыбыҙ тураһында.**



# ҮЛЕМ ҠУРҠЫНЫСЫ НИҘӘ?

Беҙ - тере кешеләр ниндәйҙер йорт емерелеү, самолет, поездар, караптар һәләкәткә осрау, ер тетрәү арҡаһында тиҫтәләгән, ҡайсаҡ йөҙләп кешенең ғүмере ҡыйылыуын айырыуса ауыр кисерәбеҙ. Уларҙың тере ҡалған ғаилә ағзаларын, туғандарын йәлләйбеҙ. Төрлө мәғлүмәт сараларында улар тураһында ҡыҙғаныс телетапшырыуҙар, мәҡәләләр сыға. Хөкүмәт органдары тарафынан мәрхүмдәрҙең ғаиләләренә миллионлап, хатта унан да күберәк сумма аҡса бүленеүен хуплайбыҙ. Бындай саралар менән үлгәндәрҙе, әлбиттә, кире ҡайтарып булмай, әммә уларҙың туғандарының хәстәрһеҙ ҡалмауы бер аҙ ғына булһа ла тынысландырғандай.

Ошоноң һымаҡ ғәҙәттән тыш хәлдәр хаҡында ишетһәм, шундай уҡ аңһыҙ бәләҡазаларға, үлемгә тарыған тағы бер кешеләр категорияһы тураһында уйлана башлайым. Мәҫәлән, илебеҙ күләмендә көн һайын тиҫтәләгән, ә инде бер йыл эсендә меңәрләп кеше автомобиль һәләкәтенә юлығып һәләк була. Быларҙың ниндәйҙер бер өлөшө юл ҡағиҙәләрен боҙоусылар булһа, икенселәре - һис кенә лә ғәйебе булмаған пассажирҙар һәм башҡалар. Күптән түгел фәлән ерҙәге автобус ауыу сәбәпле үлгән кешеләрҙе ерләү сығымдарын ниндәйҙер бер фирма үҙ өҫтөнә алғаны хаҡында ишетеп ҡалдым. Әммә ғәҙәттән тыш фажиғәләргә осраған кешеләрҙең ғаиләләренә ғәҙәттә бүленә торған ярҙам хаҡында бер ни ҙә ишетелмәне. "Фәлән ерҙә юл-транспорт фажиғәһе арҡаһында фәләнсә кеше һәләк булды. Уларҙың һәр кеһенең ғаиләһенә бирәр миллион һум аҡса бүленәсәк..." тигән хәбәрҙәрҙе, ысынлап та, бер ҡасан да ишеткәнем юҡ. Әгәр шулай була ҡалһа, илдәге бихисап автоһәләкәттәрҙе һөйләп, бөтә телетапшырыуҙар тик ана шуға ғына ҡоролған булыр ине шәйт. Шулай, үҙебеҙ ҙә һиҙмәҫтән, автомобиль һәләкәттәренә осрап үлгән кешеләрҙең был донъянан китеүен ғәҙәти хәлдәй күреп ҡабул итәбеҙ. Йәки, икенсе төрлө итеп әйткәндә, был кешеләрҙең үлеме, әйтәйек, самолет менән ҡолап үлгәндәргә ҡарағанда еңелерәк һымаҡ...

Икенсе бер миҫал. Берәүҙең әжәле әрме ваҡытында килеп етте икән: бөтә мәғлүмәт саралары ошо ғәҙәттән тыш үлем хаҡында "саң ҡаҡырға" тотона. Һалдат ғүмеренә "битараф булған командирҙар"ҙы, хатта бөтөнләйгә әрме системаһын һүгә башлайҙар. Ә инде йәш егет әрмегә бармаҫ элек, йәиһә әрме хеҙмәтен бөтөрөп ҡайтып, ниндәйҙер фажиғәгә тарый икән, ни өсөндөр бындай үлемде, әлеге әйткәндәй, ғәҙәти һымаҡ итеп ҡабул итә халыҡ.

Ҡасандыр ишеткән бер лаҡап иҫемә төшә. Зыяратта берәүҙе ерләйҙәр икән. Шунда килгән бер кеше икенсеһенән: "Нимәнән үлгән ул, - тип һорай имеш, - рактанмы?" "Юҡ", - тип яуап бирәләр уға. "СПИДтанмы?" "Юҡ". "Әләйһә, туберкулездандыр?.." "Юҡ". "Ә нимәнән үлгән һуң", - тип ныҡышһа һаман әлеге кеше. "Гриптан", - тип яуаплайҙар уға. "Әй, улай булһа - ҡурҡыныс юҡ..." тип һығымта яһай теге ныҡыш әҙәм.

Ҡазаланған кеше өсөн йәки ана шул яҡынын юғалтҡан туғандары өсөн ниндәй генә үлем дә берҙәй ҡурҡыныс ул, минеңсә. Бәлә-ҡазаға тарыған шул кешеләрҙең береһе хаҡында ла: "Быныһы ныҡ үлгән, ә тегеһе еңелсә генә вафат булған",- тип әйтә алмайбыҙ бит. Шуға күрә лә, кемдеңдер үлеме өсөн туғандарына фәләнсә сумма бүлеү, ә икенселәренә тик ерләү аҡсаһын ғына түләп, ә өсөнсөләренә бер тин дә әләкмәүе, йомшаҡ ҡына итеп әйткәндә, бигүк ғәҙел түгелдер. Эскелек, наркомания йәиһә суицид арҡаһында, дөрөҫөрәк итеп әйткәндә, был донъянан үҙ теләге менән киткән кешеләр хаҡында түгел, әлбиттә, һүҙем.

Юғарыла әйткән һүҙҙәрем, башлыса, мәрхүмдәрҙең яҡындарын хәстәрләү хаҡында булды. Ә инде үлгәндәрҙең үҙҙәренә килгәндә, бер кемебеҙ ҙә үлемдән гарантияланмағанбыҙ. Иртәме-юҡмы, әжәл һәммәбеҙгә киләсәк. Бәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм үлемде бик ҡурҡыныс ваҡиғаға һанаған. Тик был донъяны ташлап киткән өсөн түгел, ул ниндәй хәлдә үлеүҙе күҙ уңында тотҡан. Иман килтермәгән көйө вафат булыуҙың ҡурҡынысы хаҡында һәр саҡ иҫкәртә килгән ул. Шуға күрә, Аллаһы Тәғәләнең илсеһе Мөхәммәт ғәләйһис-сәләм ҡушыуы буйынса тере сағыбыҙҙа Аллаһы Тәғәләгә иман килтереп, Уға баш эйеп, Уның ҡушҡандарын үтәп, тыйғандарынан тыйылып йәшәп өлгөрөү кәрәк.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

ШАҢДАУ

# ЕТЕУТ СӘЙЕ ЛӘ ӘҘЕРЛӘГӘНДӘР



**"Киске Өфө"нөң 33-сө һанында Лилиә Һаҡмарҙың "Бишут сәйе" тигән мәҡәләһен ҡыҙыҡһынып уҡып сыҡтым. Шагирәнең тәбиғәтте яратыуы, тыуған еребеҙҙәге үләндәрҙең дауалау көсөн белеүе һоҡландырҙы.**

Ошо мәҡәлә айҡанлы башта шуны әйтеп үткем килә: беҙҙең халыҡта үлән сәйҙәре әҙерләү менән шөғөлләнеүселәр электән булғандыр, күрәһең. Быһа, әйтәйек, күптән инде "Темәс менән Мәскәү араһы" тигән исем аҫтында Баймаҡ районы Темәс ауылында йәшәгән арҙаҡлы шәхесебеҙ Әбүбәкер Хөсәйеновтың юлъяҙмаһын әҙерләп баҫтырып сығарғайным. Унда уҙған быуаттың 20-се йылдар башында Әбүбәкер олатайҙың ғаиләһе менән ғәйәт ҙур миссия үтәп, башҡорттоң тормошон, көнкүрешен күрһәтеү маҡсатында ҡымыҙ бейәләрен поезд вагонына тейәп, Мәскәүгә Бөтөн Союз ауыл хужалығы ҡаҙаныштары күргәҙмәһенә барыуы тураһында бәйән ителә. Тарихта ҡалырлыҡ ғәйәт ҡыҙыҡлы ваҡиға була ул. Мәскәүҙә, ВДНХ-ның Башҡорт АССР-ы павильонында, баш ҡала халҡын Башҡортостан менән таныштырып, ярты йыл буйы йөрөп ҡайта улар. Юлъяҙмала, ошондай оҙайлы сәфәргә йыйынғанда, шифалы үләндәр йыйнап, киптереп, үлән сәйе әҙерләүҙәре тураһында ла телгә алына.

Юл йөрөгәндә минең үҙемә лә үлән сәйе әҙерләүселәрҙе күреп белергә тура килде. 1973 йылдың 24 июлендә, йәйҙең йәмле бер көнөндә шулай Бәләбәй районының таулы-урманлы бер төбәгендә Веровка тигән урыҫ ауылында 50 йәшлек Нина Ивановна Козарева исемле апайҙарға фатир һорап барып керҙем. Ыҡсым ғына ауыл йорто, өй эсе таҙа, йыйнаҡ итеп йыйыштырылған. Өйҙә хуш еҫтәр сығып тора. Төрлө үләндәр еҫенән тотош бер букет тиергә була. Әлдә нисәмә урында киптерергә үләндәр, емеш-еләк япраҡтары йәйеп һалынған. Нимәгә был, тип һорауыма Нина апай, ете соҡор буйынан йыйып киптерәп, барыһын бергә ҡушып сәй әҙерләүе тураһында һөйләп бирҙе. Составы: һары мәтрүшкә, мәтрүшкә, ҡурай еләге япрағы, муйыл япрағы, ҡарағат, сейә япрағы, йүкә сәскәһе. Өсән-Ивановкала уны (Веровкаға 12 километр, ауыл советы үҙәге) "семновражный чай", йәғни "ете соҡор сәйе" тип атайҙар, тине хужабикә. Мин иһә, Лилиәгә эйәреп, "етеут сәйе" тиергә булдым. Үләнде ҡайһы ваҡытта йыйыу тураһында ла һораштым. Һары мәтрүшкәне лә, мәтрүшкәне лә июль уртаһында йыйырға кәрәк. Бесәнгә төшеү менән шифалы үләндәр йыя башлайбыҙ, тип аңлатты Нина Ивановна. Мин нәҡ ана шул бесәнгә төшкән, үлән сәйе әҙерләгән ваҡытҡа тура килгәнмен икән.

Үлән сәйенең составы, һәр кемдең тәжрибәһенә ҡарап, төрлөсәрәк булырға мөмкиндер, әлбиттә. Мәтрүшкә урыныңа, әйтәйек, болант та бик һәйбәт булалыр. Ләкин минең өсөн шифалы үләндәрҙең төрлө урындан, был осраҡта - ете соҡор буйынан йыйылған булыуы әһәмиәтле һымаҡ, сөнки ете сакраль һан бит. Шулай ҙа, нисек кенә булмаһын, афарин һеҙгә, һаулыҡты һаҡлау өсөн тәбиғәт байлығын ҡуллана белеүселәр!

**Рәшит ШӘКҮР.**

БЫЛ - ҠЫҘЫҠ



# ҠОРАМА ҒЫНА ТИП ҠАРАМА...

**Бөгөн ҡорама - тәү сиратта, модалы әйбер, интерьерҙың бер биҙәге булып тора. Ә борон иҫке туҡыма киҫәктәренән ҡоралған ҡорамалар бөтөнләй икенсе тәғәйенләнештә булған һәм серле, мөғжизәле нәмә тип һаналған. Хәҙер туҡыма киҫәктәре көсөнә ышаныу күптән үткән, әммә мөғжизәләре һаман да һаҡлана, иң мөһиме - улар менән ҡуллана белергә кәрәк.**

### Мөхәббәт һәм ихтирам

Бөрөү ҙә беренсе ысын одеял ҡасан барлыҡҡа килгәнен белмәй. Борон заманДарҙа был ролде йөнлек тиреләре башҡарған, әммә улар һыуыҡтан һаҡлаһа ла, кире йоғонтонан, күҙ тейеүҙән, боҙомдан һаҡламаған. Уның ҡарауы, туҡыма киҫәктәренән тегелгән юрған был бурысты бик яҡшы башҡарған. Шуға күрә, ҡораманың донъя халыҡтарының барыһында ла осрауына аптырайһы түгел. Уның иң боронғо өлгөһө булып беҙҙең дәүергә тиклем IX быуат менән билдәләнгән Боронғо Мысыр ҡорамаһы тора.

Эҫе йөшел ҡитғала Австралия аборигендары ла, Һиндостан арийҙары ла, Себер аҫаба халҡы ла, инктар ҙа, Мексикалағы һәм Перулағы майя индеецтары ла, ҡырыҫ викингтар ҙа, шотландтар һәм ирландтар ҙа, инглиздәр ҙә, Рәсәй төпкөлөндәге крәҫтиәндәр ҙә, ожмах утрауындағы гавайҙар ҙа ҡорама ҡулланған. Инглиздәр хатта уны юғары сәнғәт кимәленә күтәреп, бөгөн пэчворк, курак, квилт тип йөрөтә. Дөйөм алғанда, ҡорама киң һәм йөҙәр йылдар бөтөн ер шарында яратып ҡулланыла. Хатта бөгөн бөтөн нәмәгә хөрләк булғанда ла, ҡорама менән ҡыҙыҡһыныу кәмемәй.

### Яҙмыш йөйө

Бер яҡтан, ҡорамаға һөйөүҙе ябай рационаллек һәм һаҡсыллыҡ менән аңлатырға мөмкин. Беҙҙең иҫәпсел атай-олатайҙар бер нәмәне лә әрәм итмәгән һәм хатта туҡыма киҫәктәрен дә хужалыҡта файҙалы итеп ҡулланған. Ғәмәлдә ҡорама - бер сығымһыҙ юҡтан бар яһалған нәмә ул. Әммә уның феноменын һаҡсыллыҡ менән генә аңлатып бөтөү мөмкин түгел. Азияның күп халыҡтары иҫке әйберҙәрҙең ғүмерен оҙайтыу үҙендә рухынды үҫтереү өсөн файҙалы һәм символик мәғәнәгә эйә, тип иҫәпләй.

Тағы бер ҡыҙыҡ гипотеза билдәләүенсә, ҡорама менән шөғөлләнеү - үҙендең яҙмышыңды һәм тормош юлыңды аңлау һәм уны ҡабул итеп, үҫтереү ул. Төрлө туҡыма киҫәктәрен бер-береһе менән берләштереп, төрлө туҡымалар ҡатламын бергә тегеп, ҡул эше оҫтаһы үҙенең үткән һәм хәҙерге тормош осорҙарын бер бөтөнгә әүерелдерә, көнкүрешен биҙәй. Тағы ла, туҡыма киҫәктәренән барлыҡҡа килгән һүрәттә уны теккән кешенең тормош ритмы, темпераменты сағыла. Шуға күрә уларҙа йомшаҡ, һығылмалы һүрәттәрҙе лә, киҫкен, осло, етеҙ образдарҙы ла күрергә мөмкин. Ә оҫта шөғөл барышында психотерапия сеансын ала һәм үҙенең асылын сағылдыра.

### Ғаилә ҡомартҡыһы

Башҡа күҙаллауҙар буйынса, иҫке туҡыма киҫәктәре ҙур көскә эйә һәм төрлө күңелһеҙлектәрҙән, бәләләрҙән һаҡлай. Әммә мотлаҡ үҙенә кеше энергияһын һеңдергән һәм кейеп йөрөлгән иҫкергән кейем киҫәктәренә тегелергә тейеш. Шуға күрә бөгөн яңы туҡыманан ҡоралған ҡорама, матур күренһә лә, бер ниндәй һаҡлау көсөнә эйә түгел.

Борон ҡораманы буласаҡ кәләш туйына теккән, унда кейәүҙең һәм кәләштең, шулай уҡ уларҙың туғандарының иҫке кейем киҫәктәре ҡулланылған. Туғандар уларҙы йәштәргә бәхет һәм именлек теләп, ихлас биргән. Йыйылма туй ҡорамаһы йәштәр өсөн бүләк тә, уларҙың ғаилә бәхетен һаҡлаусы бетеү ҙә, муллыҡ, шул иҫәптән күп балалар йәләп итеүсе талисман да булып торған. Яңы тыуған сабыйына әсәй кеше үҙенең әйберҙәренән ҡорама юрған теккән, бындай одеялға тегелгән көслө һәм наҙлы әсә энергияһы баланы күҙ тейеүҙән һәм ҡара көстәрҙән һаҡлаған.

Быуындан-быуынға тапшырылған ҡорама үҙенә аңыҡ ырыуҙың энергияһын туплап, ғаилә ҡомартҡыһына әүерелгән һәм уның көсө ырыу һағы булараҡ артҡандан-артҡан. Әммә шуны ла оноторға ярамай: һаҡлаусы ҡорама үҙенең көсөн бер ваҡытта ла өйҙән сығарылмаған һәм сит күҙҙәргә күрһәтелмәгән осраҡта ғына һаҡлай. Уны хатта ҡунаҡтарға ябынырға ла бирмәгәндәр: ни тиклем генә яҡшы кеше булмаһындар, уларҙың энергияһы "туған" туҡыма киҫәктәренең серен боҙа, уның һаҡлау сифаттарын емерә. Бындай магик одеялдарҙы бары тик иретелгән ҡар һыуында ғына йыуалар. Ирегән ҡар осраҡлы килеп эләккән негативты йыуып төшөрә, ә уны ҡораусылар, әгәр инде был донъяла булмаһалар, теге донъяла тынуслыҡ һәм ҡәнәғәтлек кисерә.

**Марина ТУТАЕВА.**

СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

### "Аяҡ осо - үксә" күнегеүе

Ултырғыста йәки табуреткала яҡшылап ултырырға, аяҡтар тубыҡтан 90 градусҡа бөгөлөп, табандар иҙәнгә йәки ергә ныҡлы тейеп тора, ҡулдар тубыҡта ята йәиһә ике яҡлап табуретка ҡырыйына тотонған.

"Бер" тигәндә аяҡ табанын, үксәне иҙәндән йәки ерҙән айырмай ғына мөмкин тиклем юғарыраҡ күтәрәбеҙ һәм шул уҡ ваҡытта тын алабыҙ. Уларҙы кире иҙәнгә ҡуйғанда тынды ауыҙ йәки танау аша сығарабыҙ. "Ике" тигәндә тағы ла аяҡ табанын күтәрәбеҙ - тын алабыҙ, кире төшөрәбеҙ - тын сығарабыҙ. 32 тапҡыр ошо күнегеүҙе эшләй-эшләй тын алып-тын сығарғас, 3-5 секунд ял итергә кәрәк. Әгәр бер туҡтамай 32 тапҡыр эшләүе ауыр икән, 16 тапҡыр эшләгәндән һуң ял итегеҙ. Икенсе "утыҙҙы" (32), киреһенсә, тын алғанда ике аяҡтың да табандарын аяҡ осона ғына терәп, мөмкин тиклем күтәреп, тын сығарғанда ҡабат тәүторош хәленә ҡайтып башҡарырға кәрәк. Өсөнсө "утыҙҙа" (32) аяҡ табанын үксәгә терәп күтәреү һәм үксәне аяҡ осона терәп күтәреү алмашлап башҡарыла. Шулай итеп, өс тапҡыр "утыҙ" (32) башҡарыла һәм норма (32х3) үтәлә.

### "Ҡабырғала рок-н-ролл"

Һул яҡ ҡабырғағыҙғы ятығыҙ, арҡа тура, аяҡтар һуҙылған (уң аяҡ һулының өҫтөндә). Уң ҡул тура һәм тән буйлап янбашта ята, һул ҡулды һуҙырға ла, сығанаҡтан бөгөп, устарҙы баш аҫтына һалырға ла була.

"Бер" тигәндә уң ҡулды һәм уң аяҡты бер үк ваҡытта бөгөргә һәм тын алырға кәрәк, уларҙы тәүге торошона кире ҡайтарғанда - тынды сығарырға. "Ике" тип тын алғанда тағы ла уң ҡулды уң аяҡты бөгөп, тынды сығарғанда уларҙы элекке хәленә ҡайтарырға. Күнегеүҙәрҙе эшләгәндә тын алыу ҡыҫҡа, шаулы, ә тын ғәҙәттәгесә һиҙелмәй, тәбиғи булырға тейеш икәнлеген иҫегеҙҙән сығармағыҙ! Уң ҡул һәм уң аяҡ менән 8 тапҡыр эшләгәс, 3-5 секунд ял итегеҙ һәм артабан тағы ла 8 тапҡыр тын-алыу-тын сығарыу менән бер рәттән хәрәкәттәр эшләгеҙ. Ял итә-итә 4 тапҡыр ҡабатлағыҙ. Был һеҙҙең беренсе "утыҙ" (32) була. Һуңынан уң ҡабырғағыҙға боролоп, шул уҡ хәрәкәттәрҙе һул ҡулығыҙ һәм һул аяғығыҙ менән башҡарығыҙ. Күнегеүҙең дөйөм нормаһы - 6 "утыҙ", йәғни бер яҡ менән өс тапҡыр 32, икенсе яҡ менән 3 тапҡыр 32. Әгәр күнегеүҙе 8 тапҡыр эшләүе күңелһеҙ булһа, 16 йәки 32 тапҡыр туҡтамай эшләргә мөмкин. Ҡабырғала ятыуҙы һәр 32 һайын алыштырырға ла була.

### "Дүрт тағанлап рок-н-ролл"

Ҡулдарға, терһәккә һәм тубыҡтарға терәлеп, дүрт тағанлап торогоҙ. Баш аҫҡа эйелгән, муйынды һуҙып, башты күтәреп алға ҡарарға түгел, ә мотлаҡ иҙәнгә йә ергә ҡарарға кәрәк! "Бер" тигәндә уң аяҡтың тубығы менән һул ҡулдың терһәгенә тейергә, бер үк ваҡытта шаулы итеп ҡыҫҡа ғына тын алырға. Тәү торошҡа ҡайтҡанда тынды сығарырға. "Ике" тигәндә һул аяҡтың тубығы менән уң ҡулдың терһәгенә тейергә. Күнекмәне уң аяҡ менән һулын сиратлаштырып эшләргә. 8 тапҡыр эшләгәс, 3-5 секунд ял итегеҙ. Хәрәкәт темпы - ғәҙәттәгесә. Норма - 96 тын алыу- тын сығарыу (32х3).

**С. КУЗИНА.**

**(Дауамы бар).**

БЫНАҒАЙЫШ!

# АҠЫЛДЫ...

## төҫ һәм көй ярҙамында үлсәп була имеш



**Заманса техноген йәмғиәттә йәшәү беҙҙән көндән-көн күберәк интеллектуаль сығымдар талап итә, тимәк, мейегә яңыса йәшәргә күнегергә тура килә. Ә тәбиғи булмаған ысулдар ҡулланып, интеллектты үҫтереп буламы?**

Әлбиттә, була. Бында иң тәүҙә һеҙгә ярҙамға медитация киләсәк. АҠШ-ның Висконсин университеты нейрофизиологы Ричард Дэвинсон һәм уның хеҙмәттәштәре ғүмерҙәре буйына медитация менән шөғөлләнеүсе Һиндостандың будда монахтарының һәм медитацияның нимә икәнен дә белмәгән ябай граждандарҙың мейеләрен тикшергән. Медитация ваҡытында монахтарҙың гамма-тулҡындар тип йөрөтөлгән мейе тулҡындарының эшмәкәрлеге күтәрелгән.

Ә Корнелл университетының Вейла медицина колледжы ғалимдары гипноздың кеше мейеһендәге фекерләү процесына нисек йоғонто яһауын асыҡларға тырышҡан.

Тикшеренеүҙәр барышында шулар асыҡланған: иғтибар өсөн бәйле мейе өлөштәре эшмәкәрлеген гипноз ярҙамында көйләп була икән. Мәҫәлән, әгәр ҙә кешегә ҡыҙыл төҫ менән "зәңгәр" тип яҙылған ҡағыҙ бите биреп, һүҙҙең ниндәй төҫ менән яҙылғанын һораһаң, дөрөҫ яуап бирер алдынан күптәр тәрән уйға ҡала.

Тағы ла бер ысул - дарыуҙар ҡулланыу. Эксперттарҙың фараҙлауынса, алдағы 20 йыл эсендә кешенең интеллектуаль эшмәкәрлеген үҫтереүсе биохимик препараттар уйлап сығарыласаҡ. Тик бындай препараттар допингтар рәтенә индерелһә, уларҙы ҡулланыу ҡайһы бер осраҡтарҙа, мәҫәлән, имтихандар осоронда уҡыусыларға һәм студенттарға, бөтөнләй тыйыласаҡ. Тик бындай дарыуҙарҙың организм өсөн кире эҙәмтәләре булыуы ихтимал.

Һәм, ниһәйәт, иң "текә" ысул - мейене төрлө импульстар менән уятыу.

Көньяҡ Кореяла "Гений ордены" тигән йәмғиәт эшләй. Уның ағзалары аҡыл кимәлен үҫтереү өсөн билдәле бер тауыш ритмдары ҡулланып, сеанстар үткәрә. Иркутск травматология һәм ортопедия институты профессоры Владимир Бутуханов фекеренсә, мейе күҙәнәктәре - нейрондар - йоҡо хәлендә булыуы ихтимал һәм уларҙы уятһаҡ, баш тиҙерәк эшләй башлаясаҡ. Бында беҙгә музыка һәм төҫ ярҙамға киләсәк.

Махсус компьютер программаһында профессор мейе тулҡындарын ноталарға һәм төҫкә әйләндергән. Баҡтиһәң, кеше ни тиклем аҡыллыраҡ булһа, уның энцефалограммаһының көй һәм төҫ диапазоны киңерәк икән. Ә аҡыл йәһәтенән артта ҡалған пациенттарҙың мейе көйө бер тонда яңғырай, төҫ йәйғоронда ҡыҙыл һәм ҡыҙғылт-һары төҫтәр өҫтөнлөк итә.

Әгәр ҙә мейенең айырым өлөштәренә лазер нурҙары менән тәьҫир итһәң, энцефалограмма үҙгәрәсәк. Төрлө психик ауырыуҙар менән яфаланыусы балаларҙы дауалағанда был ысул ҡулланыу ыңғай һөҙөмтәләр биргән, улар иғтибарлыраҡ була башлаған.



## 9 СЕНТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.50 "Модный приговор". [6+]
10.50 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.10 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.30 На самом деле. [16+]
19.40 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Дипломат". [16+]
23.35 Футбол. Отборочный матч чемпионата Европы-2020. Сборная России - сборная Казахстана. Прямой эфир из Калининграда.
1.45 "Вечерний Ургант". [16+]
2.20 "Время покажет". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "Время покажет". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 "Кто против?" [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Сердце матери". [12+]
23.25 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Королева бандитов". [12+]
3.50 Т/с "Семейный детектив". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Ай ҡыҙы-2". [12+]**
**11.00 Новости (на рус. яз.).**
**11.30 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**12.00 Счастливый час. [12+]**
**13.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Бай баҡса. [12+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе… [6+]**
**16.00 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 Гора новостей.**
**16.30 Т/с "Ай ҡыҙы-2". [12+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Ради добра. [6+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.00 Новости (на рус. яз.).**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Реальный футбол. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 Теге өсәү. [12+]**
**23.30 Күстәнәс. [12+]**
**0.00 Х/ф "Роза прощальных ветров". Новости (на баш. яз.). [12+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Карагул". [12+]**
**5.00 Бай бакса. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 10 СЕНТЯБРЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.50 "Модный приговор". [6+]
10.50 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.10 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.30 На самом деле. [16+]
19.40 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Дипломат". [16+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.00 "Время покажет". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "Время покажет". [16+]
3.40 "Наедине со всеми". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 "Кто против?" [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Сердце матери". [12+]
23.25 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Королева бандитов". [12+]
3.50 Т/с "Семейный детектив". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Ай ҡыҙы-2". [12+]**
**11.00 Новости (на рус. яз.).**
**11.15 Республика Live. #Дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час. [12+]**
**13.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Дорога к храму. [6+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**16.00 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 Гора новостей.**
**16.30 Т/с "Ай ҡыҙы-2". [12+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Реальный футбол. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.00 Новости (на рус. яз.).**
**20.15 Криминальный спектр. [16+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 Полезные новости. [12+]**
**21.00 Уфимское "Времечко".**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Честно говоря. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Коко до Шанель". Новости (на баш. яз.). [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.45 Спектакль "Озеро моей души". [12+]**
**5.15 "Весело живем". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 11 СЕНТЯБРЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.50 "Модный приговор". [6+]
10.50 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.10 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.30 На самом деле. [16+]
19.40 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Дипломат". [16+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.00 "Время покажет". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "Время покажет". [16+]
3.40 "Наедине со всеми". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 "Кто против?" [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Сердце матери". [12+]
23.25 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Королева бандитов". [12+]
3.50 Т/с "Семейный детектив". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Ай ҡыҙы-2". [12+]**
**11.00 Новости (на рус. яз.).**
**11.15 Честно говоря. [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 Счастливый час. [12+]**
**13.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Аль-Фатиха. [12+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Бала-сағa. [6+]**
**16.00 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 Гора новостей.**
**16.30 Т/с "Ай ҡыҙы-2". [12+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Неизвестный Башкортостан. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.00 Новости (на рус. яз.).**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Историческая среда. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Реальный футбол. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 Ете егет. [12+]**
**23.45 Земляки. [12+]**
**0.00 Х/ф "Безымянная звезда". Новости (на баш. яз.). [16+]**
**1.45 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Эх, холостяки, холостяки!" [12+]**
**4.30 "Весело живем". [12+]**
**4.45 Ете егет. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 12 СЕНТЯБРЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.50 "Модный приговор". [6+]
10.50 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.10 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.30 На самом деле. [16+]
19.40 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Дипломат". [16+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.00 Д/ф "Владимир Спиваков. Жизнь на кончиках пальцев". [12+]
1.00 "Время покажет". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "Время покажет". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 "Кто против?" [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Сердце матери". [12+]
23.30 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Королева бандитов". [12+]
3.50 Т/с "Семейный детектив". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Ай ҡыҙы-2". [12+]**
**11.00 Новости (на рус. яз.).**
**11.15 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час. [12+]**
**13.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Земляки. [12+]**
**14.45 Ради добра. [6+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**16.00 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 Гора новостей.**
**16.30 Т/с "Ай ҡыҙы-2". [12+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Реальный футбол. [12+]**
**18.30 Хоккей. КХЛ. ХК "Салават Юлаев" (Уфа) - ХК "Автомобилист" (Екатеринбург).**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Республика Live. #Дома. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 "Песня года". [12+]**
**23.30 Автограф. [12+]**
**0.00 Х/ф "Безымянная звезда". Новости (на баш. яз.). [12+]**
**1.45 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Лебедушка моя". [12+]**
**4.30 "Песня года". [12+]**
**5.00 Автограф. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 13 СЕНТЯБРЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.50 "Модный приговор". [6+]
10.50 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.10 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.30 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.40 "Поле чудес". [16+]
21.00 Время.
21.30 "Голос 60+". Новый сезон. [12+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.25 Д/ф Премьера. "Внутри секты Мэнсона: Утерянные пленки". [18+]
2.00 На самом деле. [16+]
3.00 "Про любовь". [16+]
3.55 "Наедине со всеми". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 "Кто против?" [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Х/ф "Пока смерть не разлучит нас". [12+]
0.55 Х/ф "Холодное сердце". [12+]
4.10 Т/с "Семейный детектив". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Д/ф "Все хотят жить вечно". [12+]**
**11.00 Новости (на рус. яз.).**
**11.15 "Йома". [0+]**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 Интервью. [12+]**
**12.30 Башҡорттар. [6+]**
**13.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Үткән гүмер. [12+]**
**14.00 "Весело живем". [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00 Интервью.**
**15.15 Алтын тирмә. [0+]**
**16.00 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 Гора новостей.**
**16.30 Д/ф "Все мы - одна семья". [12+]**
**17.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 "Йома". [0+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 "Башҡорт йыры-2019". [12+]**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.00 Новости (на рус. яз.).**
**20.15 Дорожный патруль. [12+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Башҡорттар. [6+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Интервью. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.45 Земляки. [12+]**
**0.00 Х/ф "Удача напрокат". Новости (на баш. яз.). [12+]**
**2.00 Спектакль "Одолжи мне жеребца". [12+]**
**4.00 "Весело живем". [12+]**
**4.15 Караоке по-башкирски. [12+]**
**5.00 Башҡорттар. [6+]**
**5.30 Д/ф "Все хотят жить вечно". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 14 СЕНТЯБРЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.50 Д/с "Россия от края до края". [12+]
6.00 Новости.
6.10 Д/с "Россия от края до края". [12+]
6.55 Т/с "Красная королева". [16+]
9.00 "Играй, гармонь любимая!" [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.10 Д/ф "Ирина Роднина. Женщина с характером". [12+]
11.15 "Честное слово" с Юрием Николаевым. [12+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.15 Д/ф "Иосиф Кобзон. Песня моя - судьба моя". [16+]
18.00 Премьера. Вечер-посвящение Иосифу Кобзону. [12+]
21.00 Время.
21.20 "Клуб Веселых и Находчивых". Летний Кубок-2019. [16+]
23.40 Х/ф Премьера. "Как Витька Чеснок вез Леху Штыря в дом инвалидов". [18+]
1.25 Х/ф "Гиппопотам". [18+]
3.00 "Про любовь". [16+]
3.50 "Наедине со всеми". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
8.15 "По секрету всему свету". [12+]
8.40 Местное время. Суббота. [12+]
9.20 "Пятеро на одного". [12+]
10.10 Сто к одному. [12+]
11.00 Вести.
11.20 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Петросян-шоу". [16+]
13.50 Х/ф "Мезальянс". [12+]
18.00 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Мама Маша". [12+]
1.10 Х/ф "Лабиринты судьбы". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха. [12+]**
**8.45 Д/ф "Еду в деревню". [12+]**
**9.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 "Перекличка". [6+]**
**10.30 Байтус. [6+]**
**10.45 Сыйырсыҡ. [0+]**
**11.00 Күстәнәс. [12+]**
**11.30 Бай баҡса. [12+]**
**12.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**12.30 Ете егет. [12+]**
**13.15 Земляки. [12+]**
**13.30 Хазина о Хазине. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.30 Репортаж, посвященный 120-летию со дня рождения командира 112-ой Башкирской кавалерийской дивизии Минигали Шаймуратова. [12+]**
**16.15 Хоккей. КХЛ. ХК "Салават Юлаев" (Уфа) - ХК "Амур" (Хабаровск).**
**19.00 Новости (на баш. яз.).**
**19.30 Полезные новости. [12+]**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.00 Деловой Башкортостан. [12+]**
**20.15 Ради добра. [6+]**
**20.30 "Байыҡ-2019". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Посмотрим… [12+]**
**22.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2019". [12+]**
**0.00 Х/ф "Покровские ворота". [0+]**
**2.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**3.15 Спектакль "Женитьба". [12+]**
**5.15 Д/ф "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Д/ф "Все мы - одна семья". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 15 СЕНТЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.30 Т/с "Красная королева". [16+]
6.00 Новости.
6.10 Т/с "Красная королева". [16+]
7.45 "Часовой". [12+]
8.15 "Здоровье". [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.00 Новости.
10.10 "Жизнь других". [12+]
11.10 "Видели видео?" [6+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.10 "Видели видео?" [6+]
13.30 Д/ф "Однажды в Париже. Далида и Дассен". [12+]
14.40 "ДОстояние РЕспублики: Джо Дассен". [12+]
16.00 Д/с Премьера. "Страна Советов. Забытые вожди". [16+]
18.10 "Точь-в-точь". [16+]
21.00 Время.
22.00 Премьера. "Большая игра". [16+]
23.45 Х/ф Премьера. "Основано на реальных событиях". [16+]
1.45 Х/ф "Можешь не стучать". [16+]
3.10 "Про любовь". [16+]
3.55 "Наедине со всеми". [16+]

### РОССИЯ 1

5.15 Х/ф "Терапия любовью". [12+]
7.20 "Семейные каникулы". [12+]
7.30 "Смехопанорама" Евгения Петросяна. [12+]
8.00 Утренняя почта. [12+]
8.40 Местное время. Воскресенье.
9.20 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым". [12+]
10.10 Сто к одному. [12+]
11.00 Вести.
11.20 Смеяться разрешается. [12+]
13.45 Х/ф "Сухарь". [12+]
18.00 "Удивительные люди-4". [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин. [12+]
22.40 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
0.30 "Действующие лица с Наилей Аскер-заде". [12+]
1.30 Т/с "Ледников". [16+]
3.20 Х/ф "Терапия любовью". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 МузКәрәҙ. [0+]**
**10.15 "Книга сказок". [0+]**
**10.30 "Детей много не бывает". [0+]**
**11.00 "Сулпылар". [0+]**
**11.30 Гора новостей. [6+]**
**11.45 Бирешмә. Профи. [12+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 Алтын тирмә. [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.30 Башҡорттар. [6+]**
**16.00 Дорога к храму. [0+]**
**16.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 Спектакль "Сказка о Емеле-лодыре". [12+]**
**17.45 Концерт. [12+]**
**18.30 Деловой Башкортостан. [12+]**
**18.45 Полезные новости. [12+]**
**19.00 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**19.45 Әлләсе… [6+]**
**20.30 "Теге өсәү!" [12+]**
**21.00 Республика Live. #Дома. [12+]**
**21.30 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15 Специальный репортаж. [12+]**
**22.30 "Красная кнопка". [16+]**
**23.15 "Байыҡ-2019". [12+]**
**0.15 Х/ф "Ищите женщину". [0+]**
**3.00 Спектакль "Анфиса". [12+]**
**5.30 Историческая среда. [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**6.45 Специальный репортаж. [12+]**

✓ *Изгелек - бер ваҡытта ла туҙмай торған берҙән-бер кейем.*
*(Генри Торо).*



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# ШАЙМОРАТОВ АРҠАҘАШТАРЫ - СОВЕТТАР СОЮЗЫ ГЕРОЙҘАРЫ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**35-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Туған. Фил. Осраҡ. Плюс. Әтәлге. Окапи. Олон. НТВ. Аманат. Арзан. Һалам. Дәрүиш. Халзанов. Ваҡыт. Ут. Алма. Рада. Март. Ля. Лупа. Мазь.

**Вертикаль буйынса:** Журавлев. Протазанов. Нахаҡ. Йосопов. Ыҫмала. Һал. Ғафаров. Апа. Уртлам. Ҡолон. Нота. Мөбәрәкова. Двигатель. Африка. Ленин. Ел. Ат. Шама.

*ТӨРЛӨ-ТӨРЛӨҺӨ*



# ЙЫРЛАЙБЫҘ!

**Башҡортостанда ауыл биләмәләре араһында "Йырсы ауыл" республика конкурсы старт ала. Яңы ижади бәйге 2019 йылдың октябренән 2020 йылдың октябренә тиклем бара, тип хәбәр иттеләр Республика халыҡ ижады үҙәгенең матбуғат хеҙмәтенән.** Конкурста ҡатнашыуға муниципаль райондарҙың ауыл тораҡ пункттарының үҙешмәкәр йыр коллективтары (халыҡ йыры, фольклор йыры, эстрада йыры ансамблдәре; ғаилә ансамблдәре; ир-егеттәрҙең йыр ансамблдәре һәм яңғыҙ башҡарыусылар) саҡырыла. Ҡатнашыусыларҙың йәше сикләнмәгән. Сара өс этапта ойоштороласа. Беренсе этап - һайлап алыу (2019 йылдың октябре-декабре) - республика ауылдарында конкурс ҡарауҙары формаһында уҙғарыла (ауыл мәҙәниәт йорто, ауыл клубы, ауыл күп функциялы клубы). Икенсе этап - район (2020 йылдың февраль-майы) - беренсе этапҡа үткән ҡатнашыусыларҙы айырым график буйынса ҡарау (ҡала мәҙәниәт һарайы, район мәҙәниәт йорто, социаль-мәҙәни үҙәк). Өсөнсө этап - республика (2020 йылдың октябре) - икенсе этапҡа үткән ҡатнашыусыларҙы ҡарау (конкурсҡа 1-се дәрәжә лауреаттар ғына ебәрелә). Гала-концерт Өфөлә була. Ойоштороусылар - Башҡортостан Республикаһының Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге, район хакимиәттәре. Белешмәләр өсөн телефон: 8 (347) 289-66-96, 8-905-355-44-20, 8-987-103-48-44 - Кондакова Наталья Михайловна.




# "БАБИЧ" ЕҢДЕ

**Булат Йосоповтың "Бабич" тарихи фильмы "Һөйөү һәр йөрәктә" халыҡ-ара кинофестивалендә Рәсәйҙең халыҡ артисы, режиссер һәм сценарист Владимир Мотыль исемендәге призға лайыҡ булды.** "Һөйөү һәр йөрәктә" халыҡ-ара кинофестивале Мәскәү өлкәһенең Дзержинский ҡалаһында уҙҙы. Фильм менән "Йәнле таҫма" кинокомпанияһының йәмәғәтселек менән бәйләнеш буйынса хеҙмәткәре Гөлнара Яруллина таныштырҙы. "Халыҡҡа Владимир Мотыль исеме "Белое солнце пустыни" мажаралы кинотаҫмаһынан һәм "Звезда пленительного счастья" тарихи фильмынан һуң билдәле булды. Жюри фекеренсә, был - фестивалдең иң юғары наградаһы", - тип хәбәр итте Гөлнара Яруллина.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1441 һижри йыл.*

| Сентябрь (Мөхәррәм) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 9 (10) дүшәмбе | 5:08 | 6:38 | 13:30 | 18:17 | 19:47 | 21:17 |
| 10 (11) шишәмбе | 5:10 | 6:40 | 13:30 | 18:15 | 19:45 | 21:15 |
| 11 (12) шаршамбы | 5:12 | 6:42 | 13:30 | 18:12 | 19:42 | 21:12 |
| 12 (13) кесе йома | 5:14 | 6:44 | 13:30 | 18:10 | 19:40 | 21:10 |
| 13 (14) йома | 5:16 | 6:46 | 13:30 | 18:07 | 19:37 | 21:07 |
| 14 (15) шәмбе | 5:17 | 6:47 | 13:30 | 18:05 | 19:35 | 21:05 |
| 15 (16) йәкшәмбе | 5:19 | 6:49 | 13:30 | 18:02 | 19:32 | 21:02 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*ҮӘТ ӘЙ!*

# КЕМ УРЛАША?

**Рәсәйҙәр магазиндарҙан урлаған иң популяр тауарҙар исемлеге төҙөлгән.** Ир-егеттәр - аҙыҡ-түлек, ә ҡатын-ҡыҙҙар парфюмерия магазиндарында йышыраҡ урлаша икән. Иң күбе сыр, колбаса изделиелары, ҡәһүә, керпектәр өсөн тушь һәм тырнаҡ лактары урлана - магазиндарҙағы урлауҙарға ҡаршы система уйлап табыусылар 2019 йылдағы һандарға ҡарап, ошондай һығымтаға яһаған. Был исемлеккә кәнфиттәр, кондитер изделиелары, һыра һәм башҡа алкоголь, диңгеҙ ризыҡтары, ирен буяғыс, тәнгә һәм сәскә һөртә торған майҙар һәм иннек тә ингән. Билдәләнеүенсә, аҙыҡ-түлек магазиндарындағы урлашыуҙарҙың 77 осрағын - ир-егеттәр яһай, парфюмерия магазинында иһә урлашыуҙарҙың 78 проценты гүзәл заттарға тура килә. Мәғлүмәттәргә ярашлы, быйыл йөҙҙө таныуға ҡоролған система менән йыһазландырылған магазиндарҙан 38 млн һумлыҡ тауар урланған.

# ДАРЫУМЫ, ЫУМЫ...

**Эксперттар билдәләүенсә, күптәр дарыуҙарҙы дөрөҫ ҡабул итмәй.** Һүҙ - антибиотиктар, температураны, ҡан баҫымын төшөрөүсе, йүткереүҙе баҫыусы, танау тоноуҙан ҡулланылыусы, эсте йомшартыусы, ауыртыуҙы баҫыусы дарыуҙар тураһында бара. Ә был иһә сирҙең тағы ла ҡатмарлашыуына килтерә. Мәҫәлән, антибиотиктарҙы дөрөҫ эсмәһәгеҙ, бактериялар уларға яраҡлаша һәм дарыуҙың файҙаһы булмай. Әгәр ҙә пневмония йәки сепсис менән ауырый ҡалһағыҙ, быға тиклем антибиотиктарҙы дөрөҫ ҡулланмауҙан "көслөләнгән" бактерияларҙы антибиотиктар еңә алмаясаҡ. Дарыу тамыҙмайынса тын ала алмаһағыҙ, таныуығыҙ тиҙҙән быға өйрәнәсәк. Эс йомшартыусы дарыуҙарҙы күп ҡулланыу ҙа эсәктәрҙең "ялҡауланыуына" килтерә, етмәһә, улар бөйөр, йөрәк, нервылар системаһы һәм бауыр эшмәкәрлегенә насар йоғонто яһай.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

# ЯҢЫ МИҘГЕЛ...

## ваҡытлыса өйҙәшлектә



**М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры 100-сө ижад миҙгелен асты. Ремонт эштәре менән бәйле йыл ахырына тәғәйенләнгән юбилей сараларын театр Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры сәхнәһендә үткәрергә мәжбүр булһа ла, коллектив яңы ижад миҙгелен яҡшы кәйефтә һәм киләсәккә юғары маҡсаттар менән ҡаршылай. Был турала журналистар менән осрашыуҙа театр директоры Иршат Фәйзуллин белдерҙе. Сарала шулай уҡ театрҙың баш режиссеры Айрат Абушахманов, режиссерҙар Илсур Ҡаҙаҡбаев менән Фирғәт Ғарипов ҡатнашты.**

Әлеге мәлдә театр коллективы Мостай Кәримдең "Ҡыҙ урлау" спектакле өҫтөндә эшләй. Ул халыҡ шағирының юбилейына бағышлана һәм премьераһы 8 октябргә тәғәйенләнгән. Режиссер Илсур Ҡаҙаҡбаев әйтеүенсә, был пьеса республиканың ғына түгел, күрше төбәктәр театрҙарында ла әүҙем ҡуйылған әҫәрҙәрҙең береһе. Башҡорт театры ла уға тәүгә мөрәжәғәт итмәй. Режиссер Рифҡәт Исрафилов сәхнәләштергән спектакль әле лә өлкән быуын тамашасыһының хәтерендәлер. Әйткәндәй, ул спектаклдә ҡатнашҡан актерҙарҙы ла - Башҡортостандың халыҡ артистары Олег Ханов, Илдар Сәйетов, Илсөйәр Ғизетдинова, Эльвира Юнысова һ.б. яңынан был спектаклдә күрергә мөмкин буласаҡ.

Баш режиссер Айрат Абушахманов билдәләүенсә, Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрының бәләкәй залында барлыҡ спектаклдәрҙе лә уйнау мөмкинлеге юҡ. Шуға ла коллектив "Эскәмйә" (А. Гельман) менән "Һөйәркә" (Т. Миңнуллин) спектаклдәрен яңынан тергеҙә.

Ошондай уҡ шарттарҙа балалар өсөн Яңы йыл спектаклдәренә лә әҙерлек бара. Рәсәйҙә бэби-театр йүнәлешендә эшләгән иң билдәле режиссер Александра Ловянникова 6 йәшкә тиклемге балалар өсөн Яңы йыл тамашаһы ҡуйһа, был йәштән өлкәндәр өсөн Фирғәт Ғарипов матур музыкаль әкиәт тәҡдим итәсәк. Шулай уҡ театр яңы йүнәлеш - мәктәп таҡтаһы янындағы театрҙы үҙләштерә. Сторителлинг тип аталған был спектакль-ваҡиғалар мәктәп программаһына ингән яҙыусыларҙың ижады һәм тормош юлы буйынса төҙөлә.

Яңы йылға тиклем театр труппаһы ҙур гастролдәргә лә сыға. 15-17 октябрҙә Ҡаҙағстан тамашасыһына "Шәүрәкәй" (М. Буранғолов), "Хыялға ҡаршы" (А. Баймөхәмәтов, Я. Пулинович), "Mouse story" (Д. Урбан) спектаклдәре тәҡдим ителә. 26 октябрҙә Санкт-Петербург ҡалаһына "Һөйәһеңме, һөймәйһеңме?" (Ф. Бүләков) спектакле бара, ошо уҡ ваҡытҡа был ҡалала Халыҡ-ара театр олимпиадаһы тәғәйенләнгән, башҡорт театры унда "Зөләйха күҙҙәрен аса" әҫәре менән ҡатнаша. 1-4 ноябрҙә гастролдәр Ырымбур ҡалаһында дауам итәсәк. Ноябрҙә Ижевск ҡалаһында "Алтын битлек" фестивале төбәктәрҙә" проектында һәм 12 декабрҙә V "Рәсәй Дәүләте Тарихы. Ватан һәм яҙмыштар" халыҡ-ара театр фестивалендә шулай уҡ "Зөләйха күҙҙәрен аса" спектакле күрһәтеләсәк. Ошо уҡ спектакль менән артистар 15 сентябрҙә Чечен Республикаһында Рәсәй милли театрҙары Бөтөн Рәсәй фестиваленә, 22 сентябрҙә Иркутск ҡалаһында Вампилов исемендәге Халыҡ-ара театр фестиваленә юллана.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Ваҡытлыса үҙ сәхнәһен алыштырып тороуға ҡарамаҫтан, Башҡорт театрының тамашасыһы яратҡан театрына тоғро ҡалыр, тигән ышаныста коллектив. Сентябрь аҙағына тиклем театр үҙ сәхнәһендә спектаклдәр ҡуясаҡ. 20 сентябргә тәғәйенләнгән "Театр төнө"ндә лә улар әүҙем ҡатнашасаҡ, бәләкәй залда "Самрау" балалар студияһы тәрбиәләнеүселәре сығыш яһаһа, ҙур залда поэтик кисә ойошторола саҡ. Унан алда иһә, ғәҙәттәгесә, театр алдында ҙур тамаша буласаҡ.**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

БАШҠОРТСА ҺҮҘЛЕК

# ТУҒАҘАҠ НИСЕК БУЛА?

**Биология фәндәре докторы, БДУ-ның Сибай институты профессоры Сәфәрғәли Йәнтүриндың "Зоология терминдарының русса-башҡортса, башҡортса-русса һүҙлеге"нән Башҡортостанда йыш осраған ҡоштарҙың башҡортса-русса атамалары менән танышығыҙ.**

**Гаршнеп** - ваҡ һаралйын
**глухарь** - һуйыр
**глухая кукушка** - һаҡау кәкүк
**гоголь** - боған, гоголь өйрәк
**горная трясогузка** - тау сәпсеге
**городская ласточка** - ҡала ҡарлуғасы
**горлица** - әберсен күгәрсене
**горлица обыкновенная** - һылыу күгәрсен
**грач большой** - ҡара ҡарға
**гуменник** - сыбар ҡаҙ
**деревенская ласточка** - ауыл ҡарлуғасы
**дербник** - яғалбай, яғылбай
**длинноносый крохаль** - ҡушы
**длиннохвостая синица** - мамыҡас
**домовый воробей** - йорт турғайы, буҙ турғай
**домовый сыч** - байғош, байғош ябалаҡ
**дрозд белобровик** - аҡкаш барҡылдаҡ
**дроздовидная камышевка** - туғай турғайы
**дрозд рябинник** - мышар барҡылдағы, миләш барҡылдағы
**дрозд деряба, дрозд большой** - ҙур барҡылдаҡ
**дрофа** - туғаҙаҡ
**дубровник** - һаҙ турғайы
**дупель** - зырҡыуыт, дырҡыуыт
**дятел трехпалый** - һарыбаш тумыртҡа
**жаворонок белокрылый** - сырлауыҡ
**жаворонок лесной** - урман һабан турғайы, йүрелек
**жаворонок черный** - ҡара һабантурғай
**желна (черный дятел)** - ҡара тумыртҡа
**желтоголовый королек** - кәрлә турғай
**желтоголовая трясогузка** - һарыбаш сәпсек
**желтоспинная трясогузка** - туғай сәпсеге
**жулан** - ҡарағанат
**зарянка** - әберсә турғайы, таң турғайы
**зеленая пеночка** - йәшел төйөт
**зеленушка** - йәшел турғай
**зимородок** - балыҡсы турғай
**змееяд** - һунағара, йылан типкес ыласын
**зуек галстучник** - шарфлы сәпсәү
**зяблик** - алағанат турғай

(Дауамы. Башы 33-34-се һандарҙа).

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БАЙЛЫҠ - БЕР АЙЛЫҠ,

## ҡәнәғәтлек - ҙур байлыҡ

Бала уңған ҡатындың бер ҡулын бәйләй, уңмаған ҡатындың ике ҡулын да бәйләй.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

"Шулай тип әйтәләр" тигән һүҙҙәр артына бөйөк ялған йәшеренгән.

**(Д. Маллох).**

Изгелек - бер ваҡытта ла туҙмай торған берҙән-бер кейем.

**(Генри Торо).**

Мәңгелек ғазаптан ҡотолорға теләһәң, бер кемде лә ғәйепләмә, бер кемгә лә яла яҡма - Хоҙай быны яратмай.

**(Нил Синайский).**

Ғүмер оҙон, әгәр ул тулы булһа ғына. Шуға ла ғүмерҙе ваҡыт менән түгел, ҡылыҡтарың менән үлсә.

**(Сенека).**

Илай-илай тыуабыҙ, зарлана-зарлана йәшәйбеҙ, донъянан төңөлөп үләбеҙ.

**(Томас Фуллер).**

Кеше ғүмере шулай үтә: бәләкәй генә ҡаршылыҡтарға ҡаршы көрәшергә ҡурҡаһың һәм бер туҡтауһыҙ йәненә тыныслыҡ эҙләйһең, ә ундай ҡаршылыҡтар булмай башлағас, өлгәшелгән йән тыныслығы түҙеп тормаҫлыҡҡа әйләнә.

**(Б. Паскаль).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер ҡарттың ике улы була. Улдарының кесеһе бер ваҡыт атаһынан уның байлығының үҙенә тейешле өлөшөн һорай. Атаһы уның теләген ҡәнәғәтләндергәс, улы ситкә сығып китеп, аҙып-туҙып йөрөп, булған байлығын туҙҙырып бөтөрә. Тиҙҙән улы йөрөгән яҡтарҙа аслыҡ башлана, һәм ул бер байға сусҡа көтөргә яллана. Барыбер мандый алмай, асыға. Шунда ул атаһын хәтергә төшөрә: "Атайымдың күпме хеҙмәтсеһе бар, улар барыһы ла икмәк ашай, минең кеүек асыҡмай. Ҡайтайым, атайымдан ғәфү үтенәйем, "Хоҙай һәм һинең алдыңда ғәйеплемен, улың тип аталырға хаҡым юҡ, мине хеҙмәтсең итеп ҡабул ит", тип әйтәйем", - тип уйлай һәм тыуған яҡтарына юл тота. Улы ҡайтып килгәнен ишетеп ҡалған атаһы уның ҡаршыһына йүгерә, уны ҡосаҡлап үбә. Улы: "Атай, мин Хоҙай һәм һинең алдыңда ғәйеплемен. Минең һинең улың тип аталырға хаҡым юҡ", - ти. Атаһы шунда хеҙмәтселәренә:" Иң шәп кейемдәрҙе килтерегеҙ һәм улымды кейендерегеҙ. Өҫтәл әҙерләгеҙ, хәҙер күңел асасаҡбыҙ. Улым үле ине, хәҙер терелде, юғалғайны, табылды", тигән. Кешегә Хоҙайҙан китергә ярамай. Әгәр ҙә китә ҡалһаң, бөтә йөрәктән Хоҙайға яңынан ҡайтырға тырышырға кәрәк".**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
6 сентябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 3707
Заказ - 1753/09